ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

20-26 ноябрь (ҡырпағай) 2021

№47 (985)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

***"Ни өсөн көнсөл кешеләр һәр ваҡыт кәйефһеҙ йөрөй?" - тип һорағандар бер ваҡыт Аристотелдән. "Сөнки уларҙы үҙ уңышһыҙлыҡтары ғына түгел, ә башҡаларҙың уңыштары ла көйөндөрә", - тип яуаплаған аҡыл эйәһе. Кәрәгенән артыҡ хәстәрлекте һәм көйәләнеүҙәрҙе йөкмәмәгеҙ иңегеҙгә, әйләнә-тирәгеҙҙәге кешеләргә лә өлөш сығарығыҙ. Бәлки, тап ошо өлөш уларҙы бәхетле итер.***

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

"Биғлый атай"ҙар ҙа була...



2-3

Шәйехзада ауылы аҫабалары - әсәле-ҡыҙлы Таңсулпан һәм Рушана Бабичевалар



8-9

Киләсәктә лә... башҡорт мөхитле ғаиләлә йәшәһәм ине



11

Тимер юлсылар династияһынан



12-13

ТВ-программа 14

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## ? Үҙең үҫтергәнде ашайһыңмы, әллә магазиндағына һалындыңмы?

***Лилиә НУРЕТДИНОВА, журналист:*** Дөрөҫ туҡланыу мәсьәләһе, өҫтәлдә күберәк үҙең үҫтергән ризыҡ булһын тигән уй ҡыҙым тыуғас, 2008 йылда башыма килде. Ике балам да аллергия менән йонсоно: саҡ ҡына шәрбәт йә химияһы күберәк булған аҙыҡ ашау менән биттәре алланып, сөбөрсөктәр сығып йонсота ине. Тәүҙә баҡса алдыҡ, унда мөмкин тиклем күберәк йәшелсә-емеш ултыртып үҫтерә инек. Шунан шәхси йортҡа күстек. Шулай итеп, был йәһәттән мөмкинлектәр тағы ла артты: ҡош-ҡорт, йорт ҡуяндары аҫрай башланыҡ, мул итеп емеш үҫтерәбеҙ. Тәүге баҡсабыҙҙы ла ташламаныҡ, унда ла уңыш алырға өлгөрәбеҙ.

Йәй дауамында йәшелсә-емеште күберәк эшкәртеп, ҡышҡылыҡҡа запас туплап ҡалырға тырышам. Өс литрлыҡтан 50-60 банка компот ябам - магазин һутына әйләнеп тә ҡарамайбыҙ. Тағы 50-ләп банка соус эшләйем, шулай уҡ консерваланған магазин лечоһын да алмайбыҙ. Ҙур туңдырғыс алдыҡ, йәшелсә-емеште шунда туңдырып һаҡлайым: кәбеҫтә, фасолдең төрлө төрҙәре, ваҡ черри помидоры, сатай-ботай үҫкән кишерҙе ҡырғыстан үткәреп, борщ йә щи өсөн әҙерләп ҡуям. Баҙыбыҙ тулы тоҙланған ҡыяр, помидор, йәшелсә салаттары. Магазиндан, ғөмүмән, картуф, кишер, кәбеҫтә, ҡабаҡ, ташҡабаҡ һатып алған юҡ. Йәй буйына үҙебеҙҙең баҡса еләге, алма, груша, ҡарағат ашайбыҙ, бер тигәс тә, балалар витаминға туйына.

Һарайыбыҙҙы ла буш тотмайбыҙ, файҙаһын күрергә тырышабыҙ. Ит һатып алғылайбыҙ, шулай ҙа ҡуян, тауыҡ итенән өҙөлгәнебеҙ юҡ. Өй тауыҡтарының йомортҡаһы ла бит магазиндыҡынан ер менән күк араһылай, тәмле, туҡлыҡлы, таҙа ем ашатып ҡына аҫрағас. Әсәйҙәргә, туғандарға күстәнәскә лә етә. Әйткәндәй, һуңғы бер нисә йыл иртә яҙҙан бүҙәнә һатып ала башланыҡ, йәй буйы бүҙәнә йомортҡаһы ашап кинәнәбеҙ. Ул инде бигерәк шәп, иң мөһиме - файҙалы, тәмле. Тик көҙөн уларҙы һуйырға тура килә.

Шәхси хужалыҡ бил бөккәнде ярата. Минән ҡайһы бер таныштарым һорай: нимәгә кәрәк былар һиңә? Әҙерҙе һатаһың да алаһың, тиҙәр. Ә мин магазин аҙыҡ-түлегенең тәмен яратмайым. Хатта һатып алынған ҡабаҡ, кәбеҫтәнең дә тәме юҡ, яһалма ризыҡ кеүек. Ә инде ҡыяр, помидор тураһында әйтеп торорға ла түгел! Бынан тыш, уларҙың ҡайҙа һәм ниндәй шарттарҙа үҫтерелгәнен, ниндәй ашламалар менән зыянланғанын бер кем белмәй. Ә бит алма, груша, виноград - барыһы ла ҡоротҡостарға ҡаршы химия менән эшкәртелә. Ә ниндәй кимәлдә ҡулланылған ул? Бер кем әйтә алмаясаҡ. Үҙең үҫтергәнең экологик таҙа аҙыҡ-түлек.

Быйыл үҙебеҙҙән артҡан баҡса уңышын күпләп һаттым да, кәм тигәндә, 30 меңләп аҡса эшләнем. Киләһе йыл килемде арттырып, 50 меңгә еткерергә иҫәп, Алла бирһә. Иң яратҡан шөғөлөм - ҡуян аҫрау. Уларҙы ла һатабыҙ, ите үҙебеҙгә лә, әсәйҙәребеҙгә лә етә. Ҡуян ите аҡһымға, минераль матдәләргә бай; аҙ ҡанлылыҡтан, аллергиянан файҙалы, ҡандағы шәкәр кимәлен нормаллаштерә, һөйәк һәм мускулдарҙы нығыта, күреү һәләтен яҡшырта һ.б. Тиреһен эшкәртеп, йылы күкрәксендәр тегәбеҙ. Киләсәктә ҡуян фермаһы асырға хыялланам.

*БАЛАЛАР ИҒТИБАРЫНА*

# Ә ҺЕҘ ТАРИХТЫ БЕЛӘҺЕГЕҘМЕ?

**2021 йыл, мәғлүм булыуынса, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты инициативаһы менән Башҡорт тарихы йылы тип иғлан ителде һәм ул "Данлы тарих - ғорур вариҫ" девизы аҫтында үтте. Йәштәр, мәктәп уҡыусылары үҙ тарихы менән ҡыҙыҡһынамы, тамырҙарын беләме, баҫма матбуғатты уҡыймы икәнен асыҡлар өсөн йыл дауамында гәзитебеҙҙә сыҡҡан мәҡәләләр нигеҙендә бәләкәй генә викторина үткәрергә булдыҡ. Һеҙҙән яуаптар, иң әүҙем һәм һорауҙарға дөрөҫ, тулы яуап биреүселәргә - беҙҙән бүләктәр! Иң тәүге булып тулы яуап биреүсегә 7 томдан торған "Башҡорт энциклопедияһы". Алға!**

1. Борон умартасы ҡортон ниндәй кешегә һатҡан һәм ни өсөн? Был турала ниндәй мәҡәл бар?
2. Салауат Юлаев, Степан Разин, Сыңғыҙхан, Кемаль Ата Төрк, Эдип, Гарнагон, Юлғотло, Нөгөш, Миңлеғәли Шайморатов... Башҡарған ролдәренең осона сығып булмаһа ла, сәнғәт һөйөүселәр өсөн ул - сәхнә генералы. Һүҙ кем хаҡында бара?
3. Башҡортлоҡто Назар Нәжми нимәгә тиңләй?
4. 11 йәшендә 42 картинала уйнаған, былтыр сентябрҙән алып быйылға тиклем Голливудта киноға төшкән ҡыҙҙың һәм уның туғанының исем-фамилияһы.
5. 1895 йылда венгр ғалимы А. Вамбериҙы Башҡортостан буйлап кемдәр оҙатып йөрөй һәм уға башҡорт теле буйынса материалдар йыйыуҙа ярҙам итә?
6. Төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының иң билдәле ойошмаһы нисек атала һәм уның етәксеһе кем?
7. Башҡортостандың был халыҡ шағирының нәҫеле эске йылан ырыуына ҡарай. Кем ул?
8. "Типтәр" терминының килеп сығышына ишара булырҙай ниндәй башҡорт мәҡәле бар?
9. Борон балды ниндәй һауытҡа йыйғандар һәм был нимәгә бәйле?
10. "Башҡорт Википедияһы"нда мәктәп йәшендәге балалар, үҫмерҙәр, йәштәр, шулай уҡ теләге булғандар өсөн ойошторолған конкурс нисек атала?




12+

**✓ Рәсәйҙә алимент аҡсаһына күҙ терәп торған 1,5 млн самаһы тулы булмаған ғаилә иҫәпләнә. Ошондай, даими рәүештә алимент түләп, күрешеп, хәлдәрен белешеп йәшәгән атайҙар, бәхеткә, бар.**



КЕМ АЛЫҠ?

# АҘНА ҺАЙЫН БҮЛӘК

**Гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһының иң ҡыҙыу мәле бара. Сәмле, ғәмле, фекерле милләттәштәр өсөн йән аҙығы, серҙәш, ҡорҙаш һәм фекерҙәш булған "Киске Өфө" гәзитен уҡыусыларға ифрат шатбыҙ һәм рәхмәтлебеҙ. Һеҙ - иң аңлылар, вайымлылар, илһөйәрҙәр, телһөйәрҙәр.**



● Гәзитебеҙҙе, үҙе бүләк ул, тип ҡабул итһәгеҙ ҙә, һәр яҙылыу кампанияһы мәлендә һеҙгә даими рәүештә дәртләндереү, бүләкләү саралары ла тәҡдим итеп тороуыбыҙҙы беләһегеҙ. Был миҙгелдә лә гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер матур ғына китаптарға лайыҡ буласаҡ. Квитанцияға ҡушып, гәзитебеҙ тураһындағы фекерегеҙ теркәлгән ҡош телендәй генә хатығыҙҙы ла һалһағыҙ, бик шат булырбыҙ. **2022 йылдың беренсе яртыһы өсөн ПР905 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә яҙылыу хаҡы 731 һум 66 тин тәшкил итә.** Ә кемдәрҙе бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә тыуған көндәрен хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтәнә шатлыҡ өҫтәр.

● "Киске Өфө"гә яҙылыусыларҙы бер аҙ дәртләндереү өсөн тағы бер акция иғлан иттек. **15-нән 21-се ноябргә тиклемге аҙнала гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәрҙең барыһына ла күренекле шағирә Зөлфиә Ханнанова китаптар бүләк итә.** Шағирә белорус яҙыусыһы Алесь Карлюкевичтың "Шубуршун һәм уның дуҫтары" тигән әҫәрен тәржемә итеп, китап итеп баҫтырып сығарған. Баҫма күберәк балаларға тәғәйенләнә.

**Ә 22-28 ноябрҙә "Киске Өфө"гә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәреүселәр өсөн эшҡыуарҙар Минзәлә һәм Кадурий Фазлетдиновтар Мәүлит Ямалетдиновтың "Ҡөрьән сүрәләренә шиғри аңлатмалар" китабын бүләк итә.**

**Әйҙәгеҙ, кем алыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

БЫНАҒАЙЫШ!

# "БИҒЛЫЙ АТАЙ"ҘАР ҘА БУЛА...

**Сабый донъяға үҙ ихтыяры менән тыумай, ғүмерҙе уға ата-әсәһе бүләк итә. Ләкин был сабыйҙарҙың иң бәхетһеҙҙәре күпмелер ваҡыттан, ҡайһылары әсәһе ҡарынында уҡ, тере етемлеккә дусар ителә: йә әсәһе баш тарта унан, йә атаһы уның хаҡында ишетергә лә теләмәй, ташлап китә.**

Әйе, айырылышыуҙар бик күп, айырыуса бөгөнгө шарттарҙа. Яңы мәғлүмәттәр булмау сәбәпле, быйылғы ете ай күрһәткестәре буйынса ла фекер йөрөтөргә булалыр: ошо осорҙа 493 509 никах теркәлгән булһа, 370 469 ғаилә тарҡалған. Төп сәбәптәрҙең береһе - йәшәйеш кимәленең насар булыуы. Артабан иһә - эскелек, наркомания, хыянат, үҙ-ара һыйышмаусанлыҡ, физик һәм психик көс ҡулланыу һөҙәмтәһе. Статистика буйынса, Рәсәйҙә алимент аҡсаһына күҙ терәп торған 1,5 млн самаһы тулы булмаған ғаилә иҫәпләнә. Ошондай, элекке ғаиләһендә ҡалған балаларын кешелек бурысы буйынса үҙ теләге менән ярҙамынан ташламай, даими рәүештә алимент түләп, күрешеп, хәлдәрен белешеп йәшәгән атайҙар, бәхеткә, бар. Ләкин балаһына ярҙамдан баш тартып, аңлы рәүештә алименттан ҡасып йөрөгән әҙәмдәр һанына ҡараһаң, тәүге төркөмдәге хәстәрлекле һәм кешелекле атайҙар бик әҙ булып күренә башлай.

Ә бына үҙ балаларынан ҡасып йөрөүсе бындай әҙәмдәр күпме икән? Дөрөҫөн генә әйткәндә, Рәсәйҙә уларҙың аныҡ ҡына иҫәбенә сыға алмайҙар әлегә. Төрлө сығанаҡтарға һылтаныусы мәғлүмәттәр буйынса, һандар төрлөсә. Быйылғы йылдың туғыҙ айында Суд приставтары федераль хеҙмәтендә 1,3 млн алимент юллау документтары ҡаралған һәм һөҙөмтәлә балаларына бурыслыларҙан 22,6 млрд һум аҡса түләтелгән. Былтырғы менән сағыштырғанда, был 74 процентҡа (13 млрд.) күберәк. Бынан тыш, 57 700 мөлкәт ҡулға алынған (арест), алимент түләүҙән ҡасып йөрөгән 56 000

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## ? Үҙең үҫтергәнде ашайһыңмы, әллә магазиндағына һалындыңмы?

***Рамаҙан ХӨСНӘТДИНОВ, Өфө районы Зубово ауылы:***

Райондан бында күсеп килгәнебеҙгә өс йыл булды, йәшәгән ауылыбыҙ күрәләтә бөтөрөүгә дусар ителә: мәктәп ябылды, медпункт юҡ, клуб, китапхана тигән нәмәләр байтаҡтан юҡ инде. Һаулығым торошо буйынса минә медиктар ярҙамына мөрәжәғәт иткеләргә тура килә, шуға баш ҡалаға яҡын ошо ауылды һайланыҡ. Ҡатыным менән икебеҙ ҙә ныраҡ пенсияға сыҡтыҡ, кесе улыбыҙҙың ғаиләһе менән бергә күстек, сөнки ауылда йәштәргә эш юҡ. Һатып алған коттедж ҙур, иркен, бөтәбеҙгә лә урын етерлек. Улар килгәс тә эшкә урынлаштылар. Ә беҙгә әбейем менән йорт яны баҡсаһында ла эш етерлек, ун сутыйға яҡын ерҙе буш ятҡырып булмай бит. Унан һуң, ауыл кешеһенең ере лә булмаһа, нисек йәшәмәк кәрәк? Шул баҡса мәшәҡәттәре, ер эше менән ауылыбыҙҙы һағыныуҙы баҫа алдыҡ, хәҙер өйрәнеп киләбеҙ инде.

Быйыл ҡоролоҡ булыуға ҡарамаҫтан, ярайһы ғына уңыш алдыҡ: ҡышҡа етерлек картуф үҫтерҙек, орлоҡҡа ла айырып баҙға һалып ҡуйҙыҡ. Ҡарап, ашлап, һыу һибеп, утап торһаң, уңыш оҙаҡ көттермәй, башҡа төр йәшелсәләр: кәбеҫтә, кишер, сөгөлдөр, һуған, һарымһаҡ, ҡыяр, помидор - бөтәһе лә уңды. Күрәһең, яңы ерҙең сиҙәме уңдырышлы булып сыҡты. Бер һүҙ менән, магазинға бик һирәк йөрөйбөҙ. Һөт, сәйшәкәр ҙә балаларға тәм-том алабыҙ. Йәшелсә, емеш-еләк бөтәһе лә үҙебеҙҙеке.

Улым менән һарай эшләнек быйыл, киләһе йыл ҡаҙ, тауыҡ, өйрәк себештәре һатып алмаҡсыбыҙ. Ит-май мәсьәләһен дә хәл иткәнбеҙ: ауылда йәшәгән бер туғаным йылҡы, һыйыр малы көтә, ваҡ малы күп, теләгән ваҡытта барып һатып алырға була тип килешелгән. Ҡусты кеше бит, рәхмәт инде, аҡса алырға ҡыймай йә арзаныраҡҡа бирергә тырыша ине лә тәүҙәрәк, ләкин был мәсьәләлә мин туғанлыҡты файҙаланырға яратмайым, хәләл тирен түгеп тәрбиәләгән малынан кеше килем алырға теләйеш, тип ҡарайым. Ауыл кешеһенә аҡса бик кәрәк, балаларын да бит шул мал көсө менән уҡыталар.

Дөрөҫ, күсеп килгән йылы магазин ризығына ҡарап торорға тура килде, әлбиттә, бында бит беҙҙе бер кем дә баҡса ултыртып көтөп тормаған. Өйрәнеп булманы тәки магазиндыҡына. Бигерәк тә һөт һәм һөт ризыҡтары тәмһеҙ һәм сифатһыҙ. Бөгөн алған һөт иртәгәһенә һыуыҡтыста әсеп ултыра, май-ҡаймағы - ташҡа үлсәйем, ауыл ағының ризығына яҡын да килмәй. Майынан - май, картуфынан - картуф тәме килмәй.

Баҡса ултыртып, шөкөр, рәхәтләндек. Магазин юлын оноторға тағы бер сәбәп: һуңғы йылдарҙа аҙыҡ-түлеккә туктауһыҙ хаҡтар артыуы. Әлегесә, сифаты булһа, хаҡына ла ҡарап торолмаç ине, бөлки, ләкин сифатһыҙ, шул уҡ ваҡытта синтетик, химик матдәләр - консерванттар, һәр төрлө стабилизаторҙар, ҡатлы-ҡатлы Е өҫтәмәләре ҡушылған яһалма аҙыҡҡа - аҡса әрәм. Ғөмүмән, аҙыҡ-түлек оҙаҡ һаҡланһын һәм уға матур тауар күренеше бирер өсөн өҫтәмәһеҙ етештерелгән аҙыҡ-түлек юҡ бөгөн.

Әйткәндәй, тоҡлап он алабыҙ, ҡатыным ауылсалап ҡомалаҡтан тәмле итеп икмәк һала, сөнки әҙәм балаһының иң төп һәм изге күргән аҙығы - икмәктең икмәге лә хатта зыянлы өҫтәмәләр менән "нышып" тултырылған. Ул ғына ла түгел, ошо төп ризығыбыҙға ла бит хаҡты арттырыпмы арттыралар ғына: быйыл йыл башынан онға - 14, икмәккә 9 процентҡа хаҡ артҡан. Ҡасандыр бер чиновник ҡатын-ҡыҙ ярлы халыҡҡа "макарошка" ашап та йәшәп була бит, тип аҡыл өйрәткәйне. Хәҙер ошо сағыштырмаса арзан иҫәпләнгән ризыҡҡа ла өмөт юғала бара: быйыл уның хаҡы 12 процентҡа " һикергән"! Үәт һиңә, аша хәҙер "макарошка"... Ә бит Рәсәй донъяла иң күп иген продукцияһы етештереүсе ил. Бындай ғибрәт исемлекте туктауһыҙ дауам итергә була: көнбағыш майы - 27, шәкәр ҡомо - 59, картуф - 36, алма - 26, тауыҡ ите - 19,8, йомортҡа 16 процентҡа ҡиммәтләнгән. Ғөмүмән, пенсияға ғына ҡарап торған һәм әҙ килемле ғаиләләргә тиҙҙән магазиндарға бына шулай итеп юл ябылыуы ла бик ихтимал. Шуға күрә, мөмкин тиклем үҙ көнөбөҙҙә үҙебеҙ күреү хәйерлерәктер, тием.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Һуңғы тәүлектә Башҡортостанда 677 коронавирус инфекцияһы осрағы теркәлгән. Шулай итеп, сир йоҡторғандарҙың дөйөм һаны - 98 973 кеше. Бөтәһе 87 891 кеше һауыҡҡан, шул иҫәптән 679-ы - һуңғы тәүлектә. 28 пациент коронавирустан вафат булған. Дөйөм исемлектә - 3 189 ҡорбан. Башҡортостанда 1 866 367 кеше прививканың беренсе компонентын алған, ә 1 584 079 кеше вакцинацияны тулыһынса тамамлаған.

✓Радий Хәбиров Рәсәйҙең Дәүләт Советы Президиумы составына инде. Был бойороҡҡа Владимир Путин ҡул ҡуйған. Шулай уҡ Дәүләт Советының яңы составына Ямал-Ненец автономиялы округы, Әстрхан, Ленинград, Калуга һәм Ҡурған өлкәләре, Камчатка крайы, Төньяҡ Осетия - Алания, Алтай етәкселәре инде. Дәүләт советы президиумының составы дәүләт башлығы тарафынан билдәләнә һәм ярты йылға бер тапҡыр алмаштырыла. Башҡортостан Башлығы 2020 йылда ла уның составына ингәйне.

✓Мәскәүҙә XV "Рәсәй транспорты" халыҡ-ара форумы булып үтте. Форум эшендә Радий Хәбиров етәкселегендәге Башҡортостан делегацияһы ла ҡатнашты. Быйыл төп тема - "Рәсәй транспорты-2035. Стратегиянан - бойомға ашырыуға". Төп эшлекле сессияла власть һәм бизнес-берләшмә вәкилдәре яңыртылған Транспорт стратегияһын ғәмәлгә ашырыу принциптарын, берҙәм терәк транспорт селтәрен, шулай уҡ 2035 йылға технологик яңылыҡтарҙы тикшерҙе.

✓Азамат Абдрахманов Ишембай районы хакимиәте башлығы вазифаһын ҡалдырҙы. Хәҙер ул - республика Хөкүмәте Аппараты етәксеһе. Ишембайҙа уны Азат Ишемғолов алыштырҙы. Ул 1984 йылдың ноябрендә Өфөлә тыуған. Башҡорт дәүләт университетын тамамлаған. Федераль милеккә идара итеү агентлығы булегендә, "Мотор" ғилми-етештереү предприятиеһында, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай секретариатында эшләй. 2019 йылдан - Ишембай районы хакимиәтендә.

✓Рөстәм Ғәзизов Стәрлетамаҡ ҡалаһы хакимиәте башлығы итеп тәғәйенләнде. Бығаса ул ҡала хакимиәте башлығының сәнәғәт комплексын үҫтереү буйынса беренсе урынбаҫары ине. Рөстәм Ғәзизов 1983 йылда Башҡортостандың Шишмә районында тыуған. Өфө авиация университетын, Башҡортостан Республикаһы Президенты ҡарамағындағы Башҡортостан дәүләт хеҙмәте һәм идара итеү академияһын тамамлағас, бер нисә муниципаль һәм коммерция предприятиеларында эшләй. 2017 йылдан Өфө хакимиәте башлығы урынбаҫары булып эшләне.

***✓ Дөрөҫ, приставтарҙы ғәйепләргә мөмкин, әлбиттә, ләкин юғарылағы "астрономик" һандарҙан сығып фекер йөрөткәндә, уларҙың иңенә асылда көс еткеһеҙ бурыс йөкмәтелгән.***



кешене эҙләү иғлан ителгән, шуларҙың 33 300-ө табылған. 97 мең бурыслы "атай"ға ҡарата - административ, 45 мең кешегә яуыз ниәттән алимент түләмәүен дауам иткәне өсөн енәйәт эше ҡуҙғатылған. Был һандар юҡҡа ғына килтерелмәне, улар ил күләмендә ғаилә көрсөгө һәм алимент проблемалары масштабын, йәмғиәтебеҙҙә әхлаҡ-әҙәп категорияһының тарҡалыу барышын бик асыҡ күҙалларға ярҙам итә. Дәүләт тарафынан был хәлде нисектер ауыҙлыҡлау саралары күрелгән хәлдә лә, уларҙы урап үтергә лә оҫтарҙы хәсрәт-атайҙар. Мәҫәлән, аҫтына һыу инә башлағанды һиҙеп, шуларҙың ҡайһылары күҙ буяу өсөн бәләкәй генә сумма күсерә лә приставтар уяулығын алдап, эҙ яҙҙыра һала.

Приставтар, тигәндән, ана шундай шылғайҙарҙы контролдә тотоу, балаһын яңғыҙ ҡарарға мәжбүр әсәләрҙән килгән ғариза-ялыуҙарҙы системалы хәл итә барыуҙа күп нәмә уларға бәйле. Үкенескә, был ведомство хеҙмәткәрҙәре эшенә балаларын яңғыҙ ҡараусы әсәләрҙән дәғүәләр бик күп, айырыуса үҙәктән алыҫ төбәктәрҙә. Уларға ҡабул итеү көнөнә эләгеп тә, яҙылып та булмай, телефондары яуап бирмәй, сөнки сайттарҙа хәҙер күпселек иҫкергән йә ялған номерҙар бирелә. "Һеҙҙең шылтыратыуға беҙ бик шатбыҙ, ҡыҙғанысҡа, операторҙар бушамай", тип яуап биреүгә көйләнгән битараф автомат бәйләнеше линияһына ла эләгеп булмай һәм, ғөмүмән, телефон аша ғына бындай мәсьәләләрҙе хәл итеү мөмкин дә түгел. Һөҙөмтәлә ҡатындар алимент юллап, пристав хеҙмәте менән урындағы прокуратура һәм суд араһында кәлеп һалырға мәжбүр. Ғаризалар ҡаралмайынса оҙаҡ ята, тип зарлана әсәләр. Шуғалыр ҙа, интернет порталдарҙа бындай әсәләргә "Суд приставтарының ғәмһеҙлегенә ялыу яҙыу өлгөһө" йә булмаһа, "Нисек итеп приставтарҙы алимент юллауға мәжбүр итергә" тигән кәңәш-инструкциялар бирелә. Дөрөҫ, приставтарҙы ғәйепләргә мөмкин, әлбиттә, ләкин юғарылағы "астрономик" һандарҙан сығып фекер йөрөткәндә, уларҙың иңенә асылда көс еткеһеҙ бурыс йөкмәтелгән. Дәүләт структураһына был хеҙмәттең эшен йәнләндереү һәм көсәйтеү юлын ҡарарға кәрәктер, бәлки? Тураһын ғына әйткәндә, уларҙың кәнсәләре алимент ғаризалары, юллауҙары, ялыуҙарынан тонсоғор хәлдә бит! Шуға ла эштәренең һөҙөмтәһе лә ҡәнәғәтләндермәй юллаусыларҙы. Был ведомствола эшләүселәргә, икенсе яҡтан, барыбер ҙә "туң йөрәктәр", "ғәмһеҙҙәр" тигән рәнйеү һүҙҙәре, ҡарғыш алыуҙан һаҡ булырға, һәр мөрәжәғәт артында бер ғәйепһеҙ сабый күҙҙәренә "баға" белергә өйрәнеү ҙә яҙыҡ булмаҫ ине.

Ошо йәһәттән ваҡытында Суд приставтары федераль хеҙмәтенең Башҡортостан буйынса идаралығы етәксеһе булып, маҡталып эшләгән, әле лә тынғыһыҙ эшмәкәрлеге менән һәр кемебеҙгә билдәле Дәүләт Думаһы депутаты Зариф Байғусҡаров фекеренә ҡолаҡ һалайыҡ, булмаһа. Әлеге көндә Башҡортостанда 15 меңләп атай кеше элекке ғаиләһендә ҡалған балаларына ярҙамдан баш тарта, ти ул. "8 йылға яҡын ябай суд приставы булып эшләгән сағымда мин бындай ирҙәрҙән балаларына алиментты мәжбүри түләтеү эштәре менән шөғөлләндем, уларҙы эҙләү һәм юллау өсөн ял көндәрем менән дә иҫәпләшеп торманым, сөнки әсәләргә яңғыҙы ғына үҙҙәренә балаларҙы аҫрау нисек ауырға төшөүен күрә һәм аңлай инем. Ниңә ярҙамдан баш тартаһығыҙ, тигән һорауыма ирҙәр, ғәҙәттә, элекке ҡатындарын ғәйепләй башлай ине. Мин уларға, ҡатындарығыҙ менән үҙ-ара мөнәсәбәттәрегеҙҙә балаларҙың ғәйебе юҡ, тигәнде аңлатырға тырыша инем, ләкин улар быны ишетмәй ҙә ине, ҡыҙғанысҡа. Бындай әҙәмдәр булып формалашыуҙарында уларҙың ата-әсәләре ғәйепле, әлбиттә. Сөнки улар улдарын киләсәктә үҙ балалары өсөн яуаплылыҡ тойоп, уларҙы кеше итеп тәрбиәләргә тейешле ир булырға өйрәтмәгән, тимәк..."

Рәсәйҙә алимент түләтеү тәртиптәренең төрлө юлдары, яңыртылған саралары ғәмәлгә индерелә, ләкин былар нигеҙҙә балаларына ярҙамдан баш тартмай, намыҫлы эшләп йөрөгән атайҙарға, йәғни уларҙың рәсми эш хаҡына ғына түгел, өҫтәүенә, бөтөн булған килем суммаларына ла ҡағыла. Проблема уларҙа түгел, ә йәшәү һәм эш урындарын алыштырып, хеҙмәт хаҡын конвертта алып йә бөтөнләй эшләмәй, меҫкенләнеп, эсеп, аҙып-туҙып, балалары хәстәренән ҡасып-боҫоп йөрөүсе әтрәгәләмдәрҙә. Ахырҙа, эш шуға барып етте: "биғлый"ҙарҙы эҙләү бер ниндәй һөҙөмтә бирмәгәс, сараһыҙҙан, балалар мәнфәғәтендә, дәүләт хәҙер алимент түләүҙе үҙ өҫтөнә алырға мәжбүр. Бының өсөн эҙләү иғлан ителгән ҡасҡалаҡ "атай" бер йыл эсендә табылмаһа, ил Президенты В.Путин тарафынан 2018 йылдың 7 мартында ҡул ҡуйылған закон нигеҙендә суд аша был әҙәм "эҙһеҙ ғәйеп булған" тип таныла һәм РФ Пенсия фонды балаға "аҫраусыһын юғалтыу" сәбәпле социаль пенсия тәғәйенләй. Шул көндән алып алимент ҡасҡалаҡ елкәһенән дәүләт иңенә күсә, унын ҡарауы, ғәйеп булыусыны хәҙер Пенсия фонды буйынса эҙләү дауам итә, сөнки балаға дәүләт иҫәбенән түләнгән бурысты бер кем дә ғәмәлдән сығармай: ул "биғлый" елкәһендә ҡала һәм, әгәр был әҙәм табыла ҡалһа, ул енәйәт яуаплылығына тарттырыла һәм бурысы үҙенән түләтелә.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## ? Үҙең үҫтергәнде ашайһыңмы, әллә магазиндағына һалындыңмы?

***Миләүшә ЗАХАРОВА, иҡтисадсы-бухгалтер:*** Ауыл халҡы, ярай ҙа, күпселеге үҙе етештергән ризыҡ менән туҡлана, шулай ҙа магазинға йөрөмәй ҙә мөмкин түгел: әле тоҙо бөтөп китә (Хоҙайым, уға ла фантастик хаҡ өҫтәп кенә ҡуймаһындар берүк!), әле шәкәре, әле шыйыҡ майы кәрәк булып ҡына тора. Ләкин төп туҡланыу ризығы - картуф, йәшелсә, һөт-ит продукттары үҙ ҡулыңда булғас, магазинға әлегесә ваҡ-төйәк йомош менән генә бараларҙыр, тип уйлайым.

Тик бына хәҙер ауылда ла күбәйеп китте мал аҫрамай, картуф сәсмәй генә йәшәүселәр. Уларҙы ғәйепләргә йыйынмайым, бындай хәлдең үҙ сәбәптәре барҙыр, моғайын, әгәр берҙән-бер сәбәп ялҡаулыҡ ҡына булмаһа... Улар ауыл магазинына йөрөймө, әллә ваҡыты тығыҙ ауыл табибы булып эшләүсе минең бер таныш ҡатын кеүек, ял көндәре яҡындағы ҡаланан аҙна-ун көнлөк ризыҡ тейәп ҡайтамы - миңә билдәһеҙ. Был йәһәттән ҡала халҡына бер ҙә генә көнләшерлек түгел, әҙерҙе һатып ала ла ашай, тип. Магазиндарҙа байтаҡтан бирле инде хаҡтар тешләшеүе ауыл кешеһенә лә яҡшы мәғлүм бит, юғиһә. Алам тип барғанын ала алмай сығып киткәндәр ҙә байтаҡ хәҙер магазиндарҙан.

Яңыраҡ сит ил агенты ғәмәлен башҡарыусы ҡушаматы тағылған "Левада-үҙәк" мәғлүмәттәрендә хәбәр ителеүенсә, һуңғы ярты йыл эсендә рәсәйҙәрҙең 40 процентҡа яҡыны үҙҙәренә кәрәкле аҙыҡ-түлек һатып алыуҙан мәхрүм. Шул ыңғайҙа әйтеп кителә: 52 процент кеше өҫ һәм аяҡ кейеме, 71 процент эре йорт йыһаздары һатып ала алмай. Ярлыларҙан айырмалы, хатта килеме сағыштырмаса юғарыраҡ булған респонденттар ҙа юҡ-юҡта нимәнелер һатып алыуҙан тыйыла. Мәҫәлән, шуларҙың 16 проценты кәрәкле аҙыҡ-түлек һатып алыуҙан баш тарта. Август урталарында уҡ күп һанлы ялыуҙар менән бәйле Монополияға ҡаршы федераль хеҙмәт "Лента", "Магнит", Пятерочка", "Карусель" сауҙа үҙәктәрендә пландан тыш тикшереүҙәр үткәрергә йыйынғайны, тик аҙағы ни менән бөткәндер бының - билдәһеҙ. Әйтерһең дә, аҙыҡ-түлеккә хаҡтар артыуҙа фәҡәт магазиндар ғәйепле.

"Росстат" мәғлүмәттәре буйынса, 2021 йылдың икенсе кварталында килеме йәшәү минимумынан кәм булған кешеләр һаны 17,7 млн тәшкил иткән. Унан алдағы кварталда был күрһәткес 21,1 млн булған, тип хәбәр ителә. Ысын булһа, фәҡирлектең "киҫкен кәмеүе"ндә, йәнәһе лә, адреслы матди ярҙам булышлыҡ иткән, тиҙәр. Рәсәй Хеҙмәт министрлығы мәғлүмәттәре буйынса иһә илдә балалы ғаиләләрҙә 82 процент самаһы әҙ килемле халыҡ йәшәй. Был һандарҙың ҡайһыһына ышанырға?

Нимә генә тимәһендәр, барыбер факт факт булып ҡала. Бик шатланып йөрөр ине лә халыҡ магазиндарға, тик баяғы кеҫә яғы "тырр" ти, кеҫәң таҡыр бит, ти. Былтыр уҡ әле Йәмәғәт палатаһының агросәнәғәт комплексы үҫеше буйынса комиссия етәксеһе Юлия Оглоблина хаҡтар артыу менән бәйле аҙыҡ-түлек карточкаһы тәртибен индерергә, әҙ килемле ҡатлам өсөн социаль туҡланыу ойоштороорға тәҡдим иткәйне, был мәсьәләнең дә дауамы булманы, буғай. Быйыл йыл башында уҡ әле "Комсомольская правда" гәзите яҙып сығыуынса, рәсәйҙәр "фәҡирҙәр магазины"на юлды таҡырайта башланы. Бындай сауҙа нөктәләрендә иң кәрәк төр аҙыҡ-түлек башҡа супермаркеттарға ҡарағанда 10-15 процентҡа арзаныраҡ. Европа өлгөһөнсә эшләй башлаған бындай магазиндар, уларҙағыса, дискаунтер" тип атала икән. Уҫал телле бәғзе блогерҙар быны әлегесә "фәҡирҙәр магазины" тип атаны ла инде. Киләһе 5-7 йылда илдә ошондай магазиндар һаны артыуы көтөлә икән, ләкин был ғына фәҡирлектән ҡотҡарырмы һәм, ғөмүмән, һеҙ әйтмешләй, "магазиндыҡына ғына һалынып" йәшәргә форсат бирерме икән?..

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан торлаҡты сафҡа индереү күләме буйынса Волга буйы федераль округында беренсе урынға сыҡты. Башҡортостанстат мәғлүмәттәре буйынса, 2021 йылдың ғинуар-октябрендә республикала 2,35 миллион квадрат метр торлаҡ майҙаны файҙаланыуға тапшырылған. Сағыштырыу өсөн: был уҙған йылдың ошо уҡ осор күрһәткестәренән 22,1 процентҡа юғарыраҡ. Республикала 1,26 миллион квадрат метр торлаҡ шәхси төҙөүселәр иҫәбенә төҙөлгән.

✓Рәсәйҙең Һаулыҡ һаҡлау министрлығы прививканан һуң коронавирус менән сирләгәндәрҙең QR-кодын ғәмәлдән сығара. Рәсми хоҡуҡи мәғлүмәт интернет-порталында Рәсәй Һаулыҡ һаҡлау министрлығының вакцинация сертификатының яңы формаһы тураһында бойороғо баҫылған. Документта билдәләнеүенсә, QR-код прививканан һуң - бер йыл, ә сирләгәндән һуң ярты йыл ғәмәлдә була. Әгәр прививка яһатҡан кешелә коронавирус асыҡланһа, унын вакцинация хаҡында һанлы пропускы юҡҡа сығарыла.

✓Мылтыҡ менән ҡоралланған Илназ Ғәләүиев Ҡаҙан мәктәптәренең береһендә атыш ойоштороғайны. Туғыҙ кешенең ғүмере өҙөлдө. 21 кеше яраланды. В.П. Сербский исемендәге Социаль һәм суд психиатрияһы ғилми үҙәге уны аҡылдан яҙған тип танығайны. Санкт-Петербургта үткәрелгән икенсе психолог-психиатр экспертизаһы ғәйепләнеүсенең аҡылы теүәл һәм ул енәйәт яуаплылығына тарттырылырға мөмкин икәнен күрһәтте. 19 йәшлек Илназ Ғәләүиев тиҙҙән суд алдына баҫа. Уға ғүмерлеккә ирektән мәхрүм ителеү хөкөмө янай.

✓Декабрь башында Сибайҙа һәм Туймазыла йоғошло сирҙәр госпиталдәрен төҙөү башлана. Был турала Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров белдерҙе. "Һәр госпиталь 9 мең квадрат метр майҙанда урынлаша. Әлеге ваҡытта финанслау, проектлау мәсьәләләре тамамлана. Төҙөлөштөң ике ай эсендә тамамланырына иҫәп тотабыҙ", - тине БР Хөкүмәте премьер-министры Андрей Назаров.

✓Башҡортостанда төҙөлөш, сәнәғәт һәм ауыл хужалығы предприятиеларында мотлаҡ прививка яһау индерелде. Бындай ҡарарға республиканың Роспотребнадзор идаралығы етәксеһе вазифаһын башҡарыусы Галина Пермина ҡул ҡуйҙы. Документта һуңғы биш аҙнала республикала яңы коронавирус инфекцияһы менән сирләүселәрҙең 18-29 йәшлектәрҙә - 10,5 процент, 30-49 йәшлектәрҙә - 18,8 процент, 50 йәштән 64 йәшкә тиклемгеләрҙә 19,1 процентҡа артыуы билдәләнә.

*✓ Торатауҙа шихан түбәһенә күтәрелеү өсөн баҫҡыстар эшләйәсәкбеҙ. Тау түбәһенә хәҙер был уникаль тәбиғәт объектының фаунаһына һәм флораһына зыян килтермәйенсә, бары тик баҫҡыстан ғына менергә мөмкин буласаҡ.*



*ҠЫҪҠАСА*

# ОЛО БАЙРАМ КӨТӨЛӘ

✓ **Республика Башлығы Радий Хәбиров социаль селтәрҙә хәбәр итеүенсә, Өфөнөң 450 йыллығы билдәләнгән йылда ҙур мәҙәни форум - Балалар фольклориадаһы ойошторола.** "Ҙур ҡыуаныс менән хәбәр итәм: Будапешта 50-се Генераль Ассамблеяла 2024 йылда Рәсәйҙә, атап әйткәндә, Башҡортостанда Беренсе Бөтә Донъя балалар фольклориадаһын үткәреү тураһында ҡарар ҡабул ителде. Быйыл республикала уҙғарылған фольклориада иң сағыуҙарының береһе тип танылды", - тип билдәләне Радий Хәбиров. Республика етәксеһе һүҙҙәренсә, VI Бөтә донъя фольклориадаһын асҡан көндәрҙә CIOFF Президенты Филипп Боссан менән ошо идея тикшерелде. Ул саҡта Боссан әфәнде Совет Бөтә донъя балалар фольклориадаһын уҙғарыу буйынса халыҡ-ара положение әҙерләүе хаҡында әйткәйне.

✓ **Башҡортостанда Рәсәй Федерацияһы Оборона министрлығының элекке хәрби часы биләмәһендә - Алкино-2 ауылында "Патриот" хәрби-патриотик мәҙәниәт һәм ял паркы булдырыла.** "Йәштәрҙе илһөйәрлек йүнәлешендәге сараларға һәм проекттарға йәлеп итеү, Рәсәйҙең Ҡоралы көстәре сафында хеҙмәт итеүҙең абруйын күтәреү өсөн тотош илдә "Патриот" парктары булдырыла. Тарихи хәтерҙе һаҡлауға булышлыҡ иткән ҙур комплекстар төрлө саралар уҙғарыу өсөн майҙансыҡ булып тора", - тип билдәләне Хөкүмәт ултырышында Премьер-министр Андрей Назаров. Концепцияға ярашлы, паркта "Авангард" уҡытыу-методика үҙәге, "Партизан ауылы" тарихи-мемориаль комплексы, Юнармия, күнекмә майҙаны, атыу үҙәге, хәрби техника музейы, ашхана, физкультура-һауыҡтырыу комплексы, Һауа-десант ғәскәрҙәре ҡаласығы, реконструкция зонаһы һәм башҡа объекттар ҡаралған.

✓ **Башҡортостан буйынса Эске эштәр министрлығының ЮХХДИ идаралығы начальнигы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Владимир Севастьянов республика Хөкүмәтендәге кәңәшмәлә иҫерек водителдәр ҡатнашлығындағы автоавариялар һаны буйынса статистика мәғлүмәттәре менән таныштырҙы.** "Ағымдағы йылда эскән водителдәрҙең юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен боҙоуы сәбәпле 256 юл-транспорт ваҡиғаһы теркәлгән, һөҙөмтәлә 54 кеше һәләк булған, 338-е йәрәхәтләнгән. Иҫерек водителдәр ҡатнашлығындағы аварияларҙың күпселеге Өфөлә (61 юл-транспорт ваҡиғаһы), Баймаҡ (12), Белорет (10), Туймазы (9), Ишембай (8) райондарында, шулай уҡ Сибайҙа, Октябрьскийҙа, Дыуан, Яңауыл райондарында (7-шәр осраҡ) булған", - тип хәбәр итте Владимир Севастьянов. Уның һүҙҙәренсә, үлемесле аварияларҙың төп сәбәбе - автомобилдәрҙең бәрелешеүе һәм йәйәүлеләрҙе тапатыу. 2021 йылдың туғыҙ айы йомғаҡтары буйынса Башҡортостанда бөтәһе 2 716 юл-транспорт ваҡиғаһы булған. Уларҙа 353 кешенең ғүмере өҙөлгән, ә 3 302-һе төрлө дәрәжәләге йәрәхәттәр алған.

✓ **Хөкүмәттәге оператив кәңәшмәлә Республиканың һаулыҡ һаҡлау министры Максим Забелин Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировҡа COVID-19 буйынса хәлдең тотороҡланыуына бәйле өлкәндәрҙе диспансерлаштырыуҙы рөхсәт итеүҙе һораны.** Радий Хәбиров һүҙҙәренсә, әлеге ваҡытта, объектив күрһәткестәр буйынса, коронавирус менән сирләүселәр артмай, ковидтан үлем осраҡтары аҙайҙы, койка фондына ла йөкләмә кәмей. Атап әйткәндә, йоғошло сирҙәр койкалары ике меңгә кәмегән. Ҡыуатов исемендәге Республика клиник дауаханаһы, Өфөнөң 5-се дауаханаһы, Һуғыш ветерандары госпитале, Баймаҡ, Дүртөйлө, Стәрлетамаҡ ҡалаларында инфекция госпиталдәре яҡын арала ғәҙәттәгесә эшләй башлай. Республиканың Һаулыҡ һаҡлау министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, бөгөнгә Башҡортостанда 5 739 урын әҙерләнгән, шуларҙың 27 проценты буш.

*ТӨРЛӨҺӨНӘН*

# ГЕОПАРКТАР БУЛАСАҠ!

**Был өлкәләге пландар хаҡында Геопарктар буйынса попечителдәр советының икенсе ултырышынан һуң Республика Башлығы Радий Хәбиров үҙенең социаль селтәрҙәрендә яҙҙы. Объекттарҙың инфраструктураһын үҫтереүгә 2022 йылда 1 миллиард һум самаһы аҡса бүленәсәк, ә өлгө булып АҠШ һәм Европа геопарктары торасаҡ.**

"Нимәләр эшләнгән һәм "Янғантау", "Торатау" геопарктары буйынса ниндәй пландарыбыҙ бар? Беренсе. Беҙ ошо һәм башҡа тәбиғи геопарктарҙың статусын билдәләүсе һәм уларҙы яҡлаусы юридик база булдырҙыҡ. Икенсе. ЮНЕСКО системаһы буйынса икенсе - "Торатау" геопаркын булдырыу йүнәлешендә уңышлы алға барабыҙ. Шулай уҡ Башҡортостан шихандарын ЮНЕСКО-ның Бөтә донъя мираҫы исемлегенә индереүгә дәғүә итеү досьеһы әҙерләнек. Ошо ғәмәлдәребеҙ һөҙөмтәһендә кешеләргә республиканың уникаль тәбиғи объекттарын нығыраҡ асабыҙ. Бер йылда "Торатау" һәм "Янғантау" тәбиғи объекттарына килеүсе туристар һаны һиҙелерлек артҡан.

2022 йылға беҙ территорияларыбыҙҙы үҫтереүҙә тағы ла етди аҙымдар яһарға ниәтләйбеҙ. Бының өсөн 1 миллиард һум самаһы аҡса бүлдек. Уларға Торатауҙа шихан түбәһенә күтәрелеү өсөн баҫҡыстар эшләйәсәкбеҙ. Тау түбәһенә хәҙер был уникаль тәбиғәт объектының фаунаһына һәм флораһына зыян килтермәйенсә, бары тик баҫҡыстан ғына менергә мөмкин буласаҡ. Шулай итеп туристарҙың хәүефһеҙлеге лә тәьмин ителә. Шулай уҡ Торатау итәгендә кворкинглы, лекторийы һәм ресторанды, башҡа объекттары булған ҙур бизнес-үҙәк төҙөй башлаясаҡбыҙ.

"Янғантау"ға килгәндә, ниһайәт "Мәсетле" геологик киҫелеше музейының нисегерәк булырға тейешлеген асыҡланыҡ. АҠШ һәм Европаның шундай музейҙарын өлгө итеп алдыҡ. Был туристарға ла, ғалимдарға ла фәнни күҙлектән ҡыҙыҡлы һәм белем тупларлыҡ булыр, тип ышанам. Шулай уҡ элекке Тәкәй - Салауат Юлаевтың тыуған ауылы территорияһын үҫтерә башлауыбыҙ ҙа мөһим. Попечителдәр советында беҙ "Салауат ере" тип аталған проектты раҫланыҡ Тағы бер ҡабатлайым, геопарк статусы был объекттарҙың уникаль тәбиғи үҙенсәлектәрен һаҡлауҙы төп урынға ҡуя. Шул уҡ ваҡытта кешеләр уларҙы ҡарап һоҡланһын өсөн барлыҡ мөмкинлектәр булдыра", - тип яҙа Башҡортостан Башлығы.

# ХАЛЫҠ ТАУЫШЫ ИШЕТЕЛДЕ

**Әбйәлил районының Ниәҙғол ауылы янындағы марганец карьерындағы хәлдәр ер аҫты ҡаҙылмаларын файҙаланыу буйынса ведомство-ара комиссия тарафынан контролгә алынды. Быңдай ҡарарға Ниәҙғолдан алыҫ түгел урында "Восток" геология-разведкалау идаралығы компанияһының марганец табыуҙа экологияны боҙоу ихтималлығы хаҡында социаль селтәрҙәрҙәге хәбәр сәбәпсе булды.**

Ошо факт буйынса республика Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Азат Бадранов урындағы халыҡ менән осрашты. "Йәмәғәтселек фекеренсә, карьерҙа шартлатыу эштәре алып барыла, урындағы йылға быҫратыла һәм йылғаларҙың береһе компания эшмәкәрлеге арҡаһында ҡороуға дусар ителә", - тине Азат Шамил улы һәм осрашыу һөҙөмтәләре буйынса был мәсьәләне Ер аҫты ҡаҙылмаларын файҙаланыу буйынса ведомство-ара комиссия ултырышына ҡуйырға тип килешелеүе тураһында белдерҙе. Бынан тыш, "Восток" идаралығы эшмәкәрлеген урындағы йәмәғәт контроле аҫтында контроль-күҙәреү органдары тарафынан тикшерергә ҡарар ителде. "Иҡтисади үҫеш менән экологик хәүефһеҙлек араһында тигеҙлеккә өлгәшеү беҙҙең өсөн өҫтөнлөклө бурыс булып тора. Закон боҙоуҙар асыҡлана ҡалһа, йәки уларҙы бөтөрөү сараһы күреләсәк, йә уларҙың лицензиялары тартып алынасаҡ. Намыҫһыҙ рәүештә ер аҫты байлығынан файҙаланыусыларға ҡарата беҙ бындай эш итеү тәжрибәһе туплағанбыҙ инде",- тип белдерҙе вице-премьер.

Урындағы Ташбулат ауыл советы депутаты Заһит Нурғәлин билдәләүенсә, ауыл халҡы исеменән яҙылған социаль селтәрҙәге был хәбәр ваҡытында тотоп алынды. "Һөйләшеү ышаныслы рәүештә асыҡтан-асыҡ барҙы. Азат Бадранов беҙҙе объектив бойондороҡһоҙ экологик экспертиза үткәреләсәгенә ышандырҙы. Был нисек тә тиҙерәк, йылға туңмаҫ борон һәм компания үҙенең яуаплыһыҙлыҡ эҙемтәләрен таҙартмаҫ элек үткәрелһен ине. Нисек кенә булмаһын, беҙ бөтөн халыҡ алдында иғлан ителәсәк экспертиза һөҙөмтәләрен көтәбеҙ", - тине Заһит Нурғәлин.

# ҺӘЙКӘЛДЕ РЕМОНТЛАҒАНДА...

**Башҡортостан Республикаһы мәҙәни мираҫ объекттарын дәүләт һаҡлауы буйынса идаралыҡ янында Салауат Юлаев һәйкәлен реставрациялау мәсьәләһе буйынса күҙәтеү советы булдырылды.**

Был Совет граждандар йәмғиәте институттары менән эшләүҙең һөҙөмтәһен күтәреү һәм идаралыҡ эшмәкәрлегенең асыҡлығын тәьмин итеү маҡсатында барлыҡҡа килде. Күҙәтеү советы һәйкәлде ремонтлау буйынса техник заданиеларҙы төҙөү документацияһын, һәр реставрация этабын күҙәтә һәм йәмәғәтселеккә, киң мәғлүмәт сараларына еткерә аласаҡ. Уның составына Мәҙәни мираҫ объекттарын дәүләт һаҡлауы буйынса идаралыҡ, Республика Башлығы ҡарамағындағы Кеше хоҡуҡтары һәм граждандар йәмғиәте институттарын үҫтереү буйынса совет, "Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы (конгресы)" йәмәғәт ойошмаһы, Йәмәғәт палатаһы вәкилдәре, шулай уҡ федераль эксперттар, билдәле ғалимдар һәм эшмәкәрҙәр инде. Әлеге ваҡытта Күҙәтеү советының эш тәртибе тураһында положение эшләнә.

Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, 2018-2019 йылдарҙа Мәҙәни мираҫ объекттарын дәүләт һаҡлауы буйынса идаралыҡ пландан тыш тикшереү барышында һәйкәлдә күп кенә кәмселек булыуын асыҡланы. 2020 йылда объект милексеһе реставрациялау буйынса фәнни-проект документацияһын эшләү буйынса саралар ойошторҙо. Тарихи-мәҙәни экспертиза акты менән уның һуңғы варианты идаралыҡҡа быйыл сентябрҙә бирелде. Өфө ҡалаһы хакимиәте мәғлүмәте буйынса реставрация эштәре 2022 йылда ойошторола. Федераль әһәмиәттәге мәҙәни мираҫ объекты "Салауат Юлаев һәйкәле" дәүләт һаҡлауына 1974 йылда РСФСР-ҙың Министрҙар Советы ҡарары менән ҡуйылған. Ул Көнсығыш Европалағы иң бейек атлы скульптура. Суйындан ҡойолған һәйкәлдең бейеклеге 9,8 метр, постамент менән бергә 14 метр, ауырлығы 40 тонна. Авторы - скульптор-монументалист, рәссам Сосланбәк Тавасиев.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Башҡортостанда колледж уҡытыусылары өсөн федераль мәғариф үҙәге булдырыла. Бында йыл һайын 15 меңдән ашыу педагог белемен камиллаштыра ала. Хөкүмәттә федераль мәғариф үҙәге проекты ҡаралды. Ул өс этапта тормошҡа ашырыла. Премьер-министр Андрей Назаров әйтеүенсә, мәғариф үҙәгендә урта һөнәри уҡыу йорттары уҡытыусылары әҙерләнә һәм квалификацияһын үҫтерә ала. Федераль мәғариф үҙәге Өфөлә "Йәш һөнәрмәндәр" паркы нигеҙендә эшләйәсәк.

✓Башҡортостан Республикаһының Милли әҙәби музейы Башҡорт теле көнөнә арналған "Теле барҙың - иле бар" нәфис һүҙ фестиваль-конкурсын ойоштора. Был конкурста Рәсәйҙең төрлө типтағы белем биреү учреждениеларының 1-11-се класс уҡыусылары ҡатнашырға мөмкин. Улар Башҡортостан шағирҙарының башҡорт теле тураһында шиғырҙарын яттан һөйләгән видеояҙмалар ебәрергә тейеш. Конкурс 2021 йылдың 1 ноябренән 30-на тиклем онлайн уҙғарыла. Йомғаҡ 14 декабрҙә - Башҡорт теле көнөндә яһала.

✓М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры 26 ноябрҙә Рәсәйҙең атҡаҙанған артисы, Башҡортостандың халыҡ артисы, танылған актер һәм режиссер Олег Хановтың 70 йәшлек юбилейын билдәләй. Көндөҙгө сәғәт 4-се яртыла ул театр фойеһында ҡотлауҙар ҡабул итә, Сергей Есениндың "Анна Снегина" поэмаһын уҡый. Киске 7-лә "Ҡыҙ урлау" спектакле күрһәтелә, ул унда төп ролдәрҙең береһен башҡара.

✓Ике йыл рәттән 30 метрлыҡ яңы йыл шыршыһы Өфөнөң Совет майҙанын биҙәп торҙо. Быйыл ул урынын алмаштырҙы. Яһалма шыршы "Моторҙар эшләүселәр" мәҙәниәт һарайы алдындағы майҙанда ҡуйыла. Өфө хакимиәтенең матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, бында балалар өсөн боҙ ҡаласығы ла төҙөлә. Төп фигуралар: 2022 йылдың символы - Юлбарыҫ, Ҡыш бабай һәм Ҡарһылыу, әкиәт персонаждары.

✓Халыҡ иҫәбен алыуҙың яҡынса мәғлүмәттәре 2022 йылдың ғинуарында иғлан ителә. Һөҙөмтәләр билдәле булғансы, Өфө "миллионлы ҡала" тигән статусын раҫланы, тип белдерергә мөмкин. Был хаҡта баш ҡала хакимиәтендә уҙған оператив кәңәшмәлә граждандар йәмғиәте институттары менән эш итеү идаралығы етәксеһе Артур Ғафаров хәбәр итте.

**БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

*БЕЛЕМ УСАҒЫ*

# ТӘРБИӘСЕЛӘР...

## оҫталығын арттырҙы

**М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының "Остаз" мәктәпкәсә белем биреү тәрбиәсеһенең педагогик оҫтаханаһы" проектына йомғаҡ яһалды. Башҡортостан Башлығы гранты аҡсаһы иҫәбенә бойомға ашырылған проект балалар баҡсалары тәрбиәселәренә районнарҙың диалект үҙенсәлектәрен иҫәпкә алып эшләргә ярҙам итеү маҡсатын алған.**

"Остаз" оҫтаханаһында быйыл республиканың Стәрлебаш, Әбйәлил һәм Борай районларынан 200-ҙән ашыу тәрбиәсе квалификацияһын камиллаштырған, тағы ла 35 тәрбиәсе "Башҡорт телен белгән мәктәпкәсә белем биреү педагогы" курсы буйынса уҡыған. Ә 123 тәрбиәсе мәктәпкәсә белем биреү ойошмаларында тәрбиәләнеүселәрҙең белем алыу һәм тәрбиә эшмәкәрлеген башҡорт телендә ойоштороу программаһы буйынса тәжрибәһен арттырған. Проект сиктәрендә шулай уҡ Башҡорт телен, башҡорт халҡының мәҙәниәтен һәм фольклорын өйрәтеүҙә ойоштороу буйынса сценарийҙар һәм эштәр республика конкурсы үткәрелгән, унда ла педагогтар бик әүҙем ҡатнашҡан.



Балалар баҡсаларында эшләгән тәрбиәселәрҙең һөнәри оҫталығын камиллаштырыуҙан тыш, яңы ике йүнәлештә - "Туған башҡорт теле һәм әҙәбиәте, мәктәпкәсә белем биреү" һәм "Туған башҡорт теле һәм әҙәбиәте, башланғыс белем биреү" буйынса быйыл абитуриенттар ҡабул ителгән. Әле был йүнәлештәрҙә 14 студент белем алып йөрөй. "Тәү сиратта кадрҙар һәм уҡытыу-методик ҡулланмалар менән бәйле мәсьәләләрҙе хәл итеү кәрәк. Беҙ ошо ике мөһим эште иңебеҙгә алып, "Остаз" проектын эшләнек. Был проектыбыҙҙа балалар баҡсаларында башҡорт телен өйрәтеүгә төп иғтибар бүленде. Уҡытыу барышында улар өсөн уҡытыу-методик ҡулланмалар әҙерләнде. Киләсәктә республиканың бар районлары тәрбиәселәренә лә һөнәри оҫталыҡтарын күтәреү мөмкинлеген бирергә ниәт бар, был һыңғай тәжрибәне дауам итергә ине", - ти М. Аҡмулла исемендәге БДПУ-ның башҡорт филологияһы факультеты деканы Ләйлә Хөсәйенова.

Шулай итеп, "Остаз" мәктәпкәсә белем биреү тәрбиәсеһе педагогик оҫтаханаһының тәүге ҡарлуғастары - Әбйәлил районының ун ете, Борайҙың һигеҙ һәм Стәрлебаштың ун тәрбиәсеһе ҡулдарына белемдәрен камиллаштырыуы тураһында танытыу алды. Был айҡанлы уҙғарылған тантанала БР мәғариф министры Айбулат Хажин, М. Аҡмулла исемендәге БДПУ ректоры Салауат Сәғитов, республика Хөкүмәте Аппаратының социаль сәйәсәт буйынса департаменты директоры Зөлфиә Ғарифуллина, Башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү фонды директоры Гөлназ Йосопова, "Башҡортостан уҡытыусыһы" журналының баш мөхәррире Салауат Кәримов ҡатнашты. "Беҙҙең мәктәптәр уҡытыу-методик ҡулланмаларына бай, ә мәктәпкәсә белем алыусылар бынан мәхрүм ителгәндәр. Был туған телебеҙҙе һаҡлау һәм үҫтереүҙә етди проблема булып тора. Әлеге ваҡытта тәрбиәселәрҙең үҙҙәре менән берлектә эшләнгән һәм телебеҙҙең диалект үҙенсәлектәрен дә күҙ уңында тотҡан ҡулланмалар бөтөнләй булманы. Бындай методик комплекстар эшләнеүе бик хуп күренеш. Балаларға бәләкәйҙән туған телдә өйрәтеп үҫтереү бик мөһим", - тине Айбулат Вәкил улы һәм тәжрибә туплаған педагогтарҙы тәбрикләне.

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

*ХАЛЫҠ ИҪӘБЕН АЛЫУ - 2020*

# ТАМАМЛАНДЫ!

**14 ноябрҙә 10 йылға бер тапҡыр уҙғарылған федераль әһәмиәттәге сара - Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу 2020 кампанияһы тамамланды. Башҡортостан халыҡ иҫәбен алыуҙа ҡатнашыу буйынса лидерҙар иҫәбенә инде.**

Халыҡ иҫәбен алыу бурыстарын үтәүгә цифрлы технологиялар ҡулланыу ярҙам итте - иҫәп алыу ҡағыҙҙарын тултырыу процесы ябайлаштырылды һәм тиҙләтелде. Икенсенән, граждандарға унайлы булған өсысул ҡулланылды. Өсөнсөнән, тажзәхмәт пандемияһы шарттарына бәйле еңел булмаған шарттарҙа эшләгән иҫәпселәр был сараның мөһимлеген аңлап, эшен яуаплы башҡарҙы. Был йәһәттән иҫәп алыусылар һәм халыҡты сир йоҡтороуҙан һаҡлау буйынса барлыҡ саралар күрелде, уларҙы бәхетһеҙ осраҡтарҙан "Уралсиб" банкы, ковид менән сирләү осраҡтарынан "ВТБ" банкы страховкаланы.

Уңыштарыбыҙҙа тәьмин итеүҙәге ҙур ролде мәғлүмәт-аңлатыу эштәре алып тора. Һуңғы мәғлүмәттәр буйынса, республиканың киң мәғлүмәт саралары әүҙемлек буйынса илдә өсөнсө урында. Эске эштәр бүлеге лә аныҡ һәм системалы эш алып барҙы, уның һөҙөмтәләре менән барлыҡ власть һәм урындағы үҙидаралыҡ органдары ҡуллана ала.

Алда тағы ла ҙурыраҡ эш тора: ҡыҫҡа ваҡытта иҫәп алыу персоналына хеҙмәт хаҡы түләргә тейешбеҙ. Был йәһәттән республика, традиция булараҡ, эште беренсе булып тамамлай. Был бик мөһим фактор, сөнки иҫәп алыусыларҙа кампания тураһында йылы тәьҫораттар ҡалырға тейеш. Цифрлаштырыу арҡаһында иҫәп алыуҙың тәүҙә һөҙөмтәләре киләһе йыл башында уҡ билдәле буласаҡ, ентекле һәм яҡынса һөҙөмтәләр менән апрелдә таныша аласаҡбыҙ, ә тулы йомғаҡ киләһе йыл һуңында яһаласаҡ. Элек бының өсөн ике-өс йыл кәрәк була торғайны.

**Әкрәм ҒӘНИЕВ,**
**Дәүләт статистика федераль хеҙмәтенең Башҡортостан Республикаһы буйынса территориаль органы етәксеһе.**

*ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ*

# ТАҒЫ БЕР ФОЛЬКЛОРИАДА



**Башҡортостанда 2024 йылдың 1 июнендә беренсе тапҡыр Балалар фольклориадаһы үтәсәк. Ҡала хакимиәтенең сираттағы кәңәшмәһендә уны хакимиәт башлығы Сергей Греков хәбәр итте һәм был сараны Өфөнөң юбилейына үҙенсәлекле матур бүләк буласаҡ, тип баһаланы. Ул ваҡытҡа бөгөн барлыҡ күләмле сараларҙың ҡеүәтен һәм мөмкинлеген сикләргә мәжбүр иткән тажзәхмәт сире коллектив иммунитет алдында артыҡ шашына алмаҫ, тип өмөтләнәйек.**

Ә әлегә, көҙ тип иҫәпләнһә лә, ҡыш килде, һәр хәлдә үҙенең тулы көсөнә ингәнгә тиклем нисек ҡаршы алыуҙарын һынап ҡарарға булды. Эйе, уҙған ял көндәрендә яуған ҡар ҡаланың коммуналь-хужалыҡ хеҙмәттәре өсөн тәүге һынау булды. Ҡала хакимиәте башлығы белдереүенсә, яуаплы хеҙмәттәр үҙҙәренең бурысын лайыҡлы үтәне. "Ҡаланы таҙартырға бик күп кеше һәм техника сыҡты. Быйыл мөмкин тиклем ҡом ҡатнашмаһын ҡулланыуҙы кәметеп, хәүефһеҙ булған "Бионордом" реагентын ҡулланасаҡбыҙ. Ул хатта газонға эләккәндә лә, зыяны юҡ", - тине Сергей Греков.

Тел төбөн аңлағанһығыҙҙыр инде - ҡыш тураһында һүҙ йөрөтәбеҙ икән, тимәк, Яңы йыл яҡынлаша. Баш ҡалала уны ҡаршыларға әҙерлек башланған да инде. Хакимиәттең Коммуналь хужалыҡ һәм төҙөкләндереү идаралығы начальнигы Рөстәм Хәмитов белдереүенсә, эпидемиологик хәл-торошто иҫәпкә алып, быйыл боҙ майҙансыҡтары күберәк - 321 (былтыр 247) буласаҡ. Был иһә халыҡтың бер урында күмәкләп өймәкләшеүен булдырмау маҡсатынан эшләнә. Байрамдың төп шыршылары Ленин һәм Салауат Юлаев исемендәге майҙандарҙа, шулай уҡ райондарҙың 20 майҙанында ҡуйыласаҡ. Торлаҡ предприятиелары 120 ихатала яңы йыл майҙансығы эшләйәсәк. 70 сауҙа үҙәге, сәнәғәт һәм башҡа предприятиелар территорияһында шыршылар ҡуйыласаҡ һәм уның тирә-яғы байрамса биҙәләсәк. Бөгөнгә Салауат Юлаев исемендәге майҙанда пиксель шыршыһын монтажлау эштәре тамамланған. В. И. Ленин исемендәге майҙанда, ғәҙәттәгесә, 30 метрлыҡ урман һылыуы урын аласаҡ. Совет майҙанында төҙөкләндереү эштәре алып барылғанлыҡтан, унда быйыл пиксель шыршы ҡуйылмаясаҡ, ә уны үҫеп ултырған шыршы алмаштырасаҡ. Пиксель шыршы "УМПО" мәҙәниәт һарайы алдына ҡуйыласаҡ. "Өфөгорсвет" предприятиеһы Ленин майҙаны алдында, Орджоникидзе исемендәге мәҙәниәт һарайы алдында, Ленин һәм Пушкин урамы сатында, Зәки Вәлиди урамы яғынан Ленин паркына ингән урында иллюминация инсталляциялары ҡуясаҡ. Шулай уҡ Пушкин аллеяһы ла иллюминация менән биҙәләсәк. Баш ҡаланы Яңы йыл һулышында биҙәүҙе 1 декабрҙә тамамлау күҙаллана.

Әүҙем ялға килгәндә инде, Өфөлә барлығы 88 хоккей ҡумтаһы эшләнәсәк һәм улар дөйөм белем биреү һәм спорт мәктәптәре, шулай уҡ торлаҡ йорттар ихаталары территорияһында урынлашасаҡ. Барлыҡ хоккей ҡумталарына ла яҡтылыҡ үткәрелгәнлектән, уларҙа кисен дә уйнарға мөмкин буласаҡ. 21 һырғалаҡтың иң тәүгеһе 18 ноябрҙә - "Строитель" стадионында эшләй башланы. С. Елистратов исемендәге Шорттрек үҙәге лә тәләүселәрҙе йыл әйләнәһенә ҡабул итә. Хоккей ҡумталары һәм һырғалаҡтар ҙа 1 декабрҙә ҡулланыуға тапшырылырға тейеш. Сергей Греков шулай уҡ Ағиҙел йылғаһы буйында ла һырғалаҡ эшләү бурысын йөкмәтте.

Саф һауа, спорт менән әүҙем шөғөлләнеүҙең файҙаһы ниңмәлә, беләһегеҙме? Сәләмәт тормош рәүеше алып барыусыларҙы тажзәхмәт сире урап үтә, тиҙәр. Йөҙ тапҡыр ишеткәнсе, бер тапҡыр һынап ҡарайыҡ әле...

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклеге онотмағыҙ.**

### Йүтәл

❖ Лимон һәм һарымһаҡ ҡатышмаһын әҙерләргә мөмкин. Быныҡ өсөн 6 баш ҙур һарымһаҡты таҙартырға, 6 лимонды һөйәктәренән таҙартып, ит турағыста ваҡларға. Банкаға һалып, 400-500 грамм бал өҫтәп болғарға һәм 10 көн ҡараңғы урында төнәтергә. Ваҡыты-ваҡыты менән болғатып торорға. Шунан һуң дауаны ашарҙан 20 минут алда көнөнә 3 тапҡыр 4-әр балғалаҡ ҡабул итергә. Был әҙерләмә йүтәлдән һиҙелерлек ярҙам итә, уны ауырыуҙы иҫкәртеү маҡсатында ла даими ашарға мөмкин.

### Бүҫер

❖ Ҡарағас төнәтмәһен әҙерләү өсөн 5 ҡалаҡ ваҡланған ҡайырыһын термосҡа һалып, 0,5-0,7 литр ҡайнар һыу ҡойоп, төнгөләккә ҡалдырырға. Иртәнсәк һөҙөп, төнәтмәне 5 өлөшкә бүлеп, көн дауамында ашарҙан 40 минут алда, йә ашағандан һуң 1 сәғәт үткәс эсергә. Дауаланыу оҙайлығы - бер нисә айҙан, ярты йылға тиклем. Төнәтмәне 15 көн эскәс, 7 көн туҡтап торорға. Төнәтмәне ҡояшта тотмаҫҡа, бер көн генә һаҡларға, һыуытҡысҡа 2 көн һаҡларға була.

❖ Үрҙә күрһәтелгәнсә әҙерләнгән төнәтмәне кәрәкле тиклем йылытып, бүҫергә компресс яһарға мөмкин. Мамыҡ тампонды сылатып, ауыртҡан урынға баҫырға, өҫтөнән һыу үткәрмәй торған нәмә ҡапларға. Өҫтөнән шәл ябынып, эҫе йылытҡыс тәрәргә һәм шул һыуынғанса тоторға. Бындай йылы компрестарҙы иртән һәм кис яһарға була. Әммә бүҫерҙә йәки уның тирәләй шешенеү һиҙелһә, эҫе компрестар яһау ҡыҫҡа тыйыла.

### Иммунитет

❖ Һаулыҡты нығытыу өсөн ярты килограмм мүк еләгенә 1 стакан таҙартылған әстерхан сәтләүеге, 2-3 йәшел алманы дүрткелләп турап ҡушырға. Ҡатышмаға ярты килограмм шәкәр һалырға һәм ярты стакан һыу ҡойорға. Талғын утҡа ҡуйып, ҡайнар хәлгә еткерергә, уттан алып таҙа банкаларға ҡойорға. Был тәмлекәсте иртән һәм кис 1-әр ҡалаҡ ашау файҙалы.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

✓ Төп проблема - ошо енәйәтселәр ниндәй мөхиттән алынып, енәйәттәштәр ҡулына эләгә? Улар ниндәй ғаиләлә үҫә? Ир-егеттәрҙе, малайҙарҙы тәрбиәләгәндә ниндәй хаталар китә?



ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!



## ЙОРТ ЙЫҺАЗДАРЫ

П.И. Небольсин тирмә эсен дә тасуирлай һәм бик ҡыҙыҡлы үҙенсәлектәрен телгә ала: "Беҙ йыш ҡына ҡунаҡҡа йөрөнөк... һәм бөтә тиерлек тирмәләрҙең эс яҡтан йыһазланышы бер төрлө булыуын күрҙек. Бер яҡ сите буйлап ҡупшы итеп йыйылған түшәкле һәм көндәҙ кейеҙ, келәмдәр аҫтына йәшереп ҡуйылған ситса йәки һырылған юрғанлы (мамыҡтан түгел, дөйә йөнөнән эшләнгән) караuat ҡуйыла; тирә-яғында төрлө тәпәндәр, һандыҡтар, ҡумталар, эскәмйәләр, самауыр, сәй кәрәк-ярағы ҡуйыла..." Йылҡы тиреһенән эшләнгән ҡымыҙ һауыттары (ҡуллыҡ, муртай, ҡымыҙ һабаһы, ботлоҡ) эргәһендә ул ағастан эшләнгән күнәктәр, силәктәр, оҙон тар көбөләр - май яҙғыстар, "ҡыҙыл ағас сеүәтәләр һәм йәтеш ижауҙар, йүкә йәки ҡайындан оҫта һырлап яһалған үҙенсәлекле "һоҫҡолар" ҡуйылыуын күргән. Тирмәне йыш ҡына ҡорал һәм зауыҡлы эйәр, сбруйҙар биҙәгән. Үҙ ҡулдары менән һуҡҡан келәмдәр иҙәнгә генә түгел, сағыу биҙәлгән һандыҡ һәм эскәмйәләргә лә ябылған.

Малсылыҡ менән көн күргән төбәктәрҙә хатта XIX быуат аҙаҡтарында ла йәйләүҙәрҙә тирмә ҡорғандар. "Император География берләшмәһен билдәлеккә ҡуйып, - тип яҙа үҙенең юл дәфтәрҙәрендә музыка белгесе һәм этнограф С.Г. Рыбаков, - 1893-1894 йылдарҙа йәйгеһен ерле Башҡорт илендә, Көньяҡ Уралдың ҡырағай таулы улыстарында, Ырымбур губернаһының Верхнеурал һәм Орск өйәҙҙәрендә булдым, былдағы башҡорттар урыҫтар йоғонтоһон бик тоймаған һәм үҙенең боронғо йәшәү рәүешен һаҡлап ҡалған". Һаҡмар йылғаһының үрге ағымында автор Урал арьяғының Бөрйән улысы старшинаһы Сөләймәнов йортона саҡырыла: "Старшинаның ҡыуышы (бында тирмә мәғәнәһендә) бик ҙур ҙа түгел ине, әммә йыһазланышы хужа етеш тормош алып барыуы хаҡында һөйләй. Тирмә эсе буйлап мөлкәт тултырылған бер нисә ҙур һәм ваҡ һандыҡ ҡуйылған, улар өҫтөндә өйөлөп сыбар төҫлө яҫтыҡ, юрғандар һәм башҡа көнкүрештә кәрәк әйберҙәр ята; ишеккә яҡынырак ат сбруйы, иләктәр, балта эленгән; ишек эргәһендә тәпән, көбө, тиреһән һаба һәм турһыҡ - ҡымыҙ әҙерләү өсөн тәғәйенләнгән әйберҙәр урынлашҡан..." Һуңғарак сәйәхәтсене һәм уның юлдаштарын һырланған ағас һауыттан ҡымыҙ менән һыйлағандар, ҙур ағас табаҡтарҙа итле ризыҡ ҡуйғандар.

Тирмәләр йәйләүгә сыҡҡанда ғына ҡулланыла башлаған, улар эсендә ут яҡмай башлағандар, ашарға яҡындараҡ урынлашҡан япма аҫтында бешергәндәр. Хәллеләр ике тирмә ҡорған, береһе хужалыҡ өсөн тәғәйенләнгән һәм унда һауыт-һаба, аҙыҡ-түлек һаҡланған, балалар ҙа шунда уҡ йәшәгән, йәш киләше менән улы йәки оло йәштәге берәй туғандары йоҡлап сығыуы ихтимал булған. Төп тирмә бөхтә йыһазланып тотолған. Бигерәк тә аҡ тирмә, ҡунаҡ тирмәләре зауыҡлы, бай йыһазланған. Бында иҙәнгә генә түгел, кирәгәне лә биҙәгән аҫалы балаҫтар, сағыу туҡымалар күп булған. Нәҡ ошо тирмәләрҙә "с щегольскою постелью" (зауыҡлы түшәкле) караuattар ҡуйылған. Ишек тирәһендә ҡымыҙлы көбө торған, һырланған ижауҙар эленгән.

**Светлана ШИТОВА.**
**"Башҡорттарҙа ағас семәрләү һәм биҙәк төшөрөү" китабынан.**

КӨНАУАЗ

# БЫЛ ФАЖИҒӘЛӘР...

## ир-егет өлгөһө юҡлыҡтанмы?

**Күптән түгел Рәсәй Федераль хәүефһеҙлек хеҙмәте Өфөлә неонацистик төркөмдөң биш ағзаһы ҡулға алыныуы, терактҡа юл ҡуйылмауы тураһында хәбәр итте. Әйе, был хеҙмәт Рәсәй территорияһындағы хәүефтәрҙе иҫкәртеп тора. Әммә йылына бер тапҡыр ил (Керчь, Ҡаҙан, Пермь) шундай ваҡиғалар менән осрашырға мәжбүр.**

Мәҫәлән, 2021 йылдың 20 сентябрендә Пермдә хөкөм ителеүсе егет интернетҡа һалған текстарында "Беҙҙең һымаҡ кешеләр бөтә нәмәне юҡҡа сығарасаҡ; донъя серегән, бөтә нәмә серегән", тип яҙғайны. Һәр психолог быңдай һүҙҙәр яҙған йәш кешенең үҙбаһаһы бик түбән булыуын аңлай. Йәш егеттең донъяға ҡарашы, донъяны аңлауы, тимәк, үҙен ир-егет булараҡ та, ғаиләнең имениеген ҡурсалаусы, лидер булараҡ та тормошҡа ашырмаған түбән үҙбаһаһына нигеҙләнә. Аҫтыртын ғына килеп атыу, үҙйөрөшлө бомба шартлатыу - был, әлбиттә, лидерҙың эше түгел. Битлек аҫтына йәшенеү шулай уҡ лидерға төҫ түгел. Бындай эштәр, кәмендә, ерәнгес эштәр рәтенә ҡарай. Был бөгөнгө Көнбайыш мәҙәниәтендә булдырылған билдәле психологик патология. Йәштәрҙең ошондай психотибы туранан-тура йәмғиәт хәленең сағылышы ул. Йәмғиәттә низер дөрөҫ түгел. Ғаиләлә, балалар баҡсаларында, мәктәптә, юғары уҡыу йорттарында ла тейешенсә тәрбиә биреү күҙәтелмәй. Ул бөтөнләй юҡ дәрәжәһендә.

Йәштәр, күп тапҡыр яҙылғанса, Көнбайыш мәҙәниәте идеологияһы йоғонтоһонда үҫә, был Болон белем биреү системаһынан килә. Минең уйлауымса, кисекмәҫтән мәғлүмәти киңлектәрҙе контролгә алыу мотлаҡ. Йәмғиәттең үҫеше өсөн яҡшы мөхит булдырыу мөһим, был дәүләт кимәлендә атҡарыла торған бурыс.

Мәғлүмәти етешһеҙлектәр балаларҙың нығынып бөтмәгән психикаһын үлтерә. Негатив мәғлүмәт шул тиклем күп, хатта быны оло кешеләргә лә ҡүтәреүе ауыр, балалар тураһында әйтеп тораһы ла түгел. Мәғлүмәт майҙанында күңел вибрацияһына йүнәлтелгән юғары кимәлдәге ыңғай контент юҡ тиерлек. Рухи йырҙар, күңел ҡылдарын ҡуҙғатҡан, шатлыҡтан илатҡан фильмдар ҡайҙа? Үсмерҙәр өсөн ысын ир-егет өлгөһө лә юҡ.

Донъя шаулатҡан енәйәт ҡылынғандан һуң Пермь юғары уҡыу йортонон тәүге ҡарары - дистанцион уҡыу форматына күсеү булды. Ошо осраҡта нимә күрәбеҙ: либераль идеология - индивидуализм. Барыһын да өйҙәргә ҡыуырға, үҙ-ара аралашырға бирмәскә. Йә электрон форматта ғына аралашырға. Бер кем менән дә йыйылыштар үткәрмәскә. Ә бит уйларға, анализ үткәрергә, барыһын да, үсмерҙәрҙе лә бер түңәрәккә йыйып, "Ни өсөн ундай хәл булды, ҡайҙан, ни өсөн шундай кешеләр килеп сыға?" тигән һорауҙарға яуап эҙләргә кәрәк ине...

Ни өсөн мылтыҡ алып, баламы, оломо икәнен ҡарап тормай, үлтереүҙәр йышая? Бында шул уҡ билдәле бер идеологияның эҙе күренә. Егеттәрҙең башын нимә менәндер бутағандар, тултырғандар һымаҡ. Үҙбаһалары түбән булған бөтә малайҙар ҙа ҡулдарына ҡорал тотмай, әлбиттә. Һис шикһеҙ, был ҡоралды уларҙың ҡулына тапшырған, уларға ошо идеяларҙы үҫтергән, ошо процестар менән етәкселек иткән кешеләр барҙыр. Дүрт йыл элек ошондай енәйәти хәлдәр Көнбайышта күҙәтелде. Бөгөн былар беҙҙә ҡабатлана (Керчь, Ҡаҙан, Пермь, Өфө). Ошондай енәйәттәрҙең үҙ кураторҙары, заказсылары һәм ойоштороусылары бар, тигәнде күҙҙә тотам. Киң мәғлүмәт саралары уларҙы енәйәттәштәр тип атайҙар. Ләкин төп проблема - ошо енәйәтселәр ниндәй мөхиттән алынып, енәйәттәштәр ҡулына эләгә? Улар ниндәй ғаиләлә үҫә? Беҙҙең мәғлүмәт сәйәсәтендә нимә дөрөҫ түгел? Ир-егеттәрҙе, малайҙарҙы тәрбиәләгәндә ниндәй хаталар китә? Быны ошо һорауҙарға яуап булырға тейеш йәмғиәттә.

Ысынында, ир-егеттәр менән бөтә ерҙә лә тоталь проблема бар. Никахтар һәм айырылышыу һандарына ғына күҙ һалғанда ла, Башҡортостанда, мәҫәлән, айырылышыуҙар һаны 75 процентҡа барып баҫа - был яуапһыҙлыҡтың сәскә атыуы ла инде ул. Тыуған илебеҙҙе һаҡлау буйынса мобилизация ресурстары тәшкил итә алған шундай ир-егеттәрҙе, яуапһыҙлыҡты күреп, тағы ла бер һорау тыуа. Был кеше тыуған илебеҙҙе һаҡлай аламы? Пермь егете, мәҫәлән, ниндәйҙер олигархтың активтары өсөн ҡыҫҡырып, әлбиттә, әммә илде һаҡларға бармаясаҡ. Ул иптәштәренә ҡаршы ут асасаҡ.

Эйе, беҙҙең үҫеп килгән быуынды тәрбиәләүҙә проблемалар бар. Малайҙар ҡыҙҙарға ҡарағанда бер аҙ икенсерәк тәрбиәләнә. Уларҙың тәрбиәһендә физик эштәр ҙә, еңеүҙәр һәм еңелеүҙәр ҙә булырға тейеш. Үҙеңдең ҡурҡыуҙарыңды, уңышһыҙлыҡтарыңды, нәфсеңде, үҙ-үҙеңде еңеү. Өлгө ала торған образдар булыуы мотлаҡ. Кемдән өлгө алырға? Нимә артынан йүгерергә? Нимәгә ынтылырға? Былар барыһы ла беҙҙең мәғлүмәт майҙанында юҡ. Ошо енәйәтсе егеттәрҙең ниндәй мөхиттән килеп сығыуын, уларҙы нисек тәрбиәләүҙәрен күҙәтергә кәрәк ине...

Минең ҡарамаҡҡа, хәҙерге ваҡытта барыһы ла юғалды, тип ҡасырға, ҡулды төшөрөргә ярамай. Үҫеп килеүсе быуынға, тәү сиратта, ир-егетлек тәрбиәләү өлкәһендә оператив саралар планы өҫтөндә уйларға кәрәк. Был мәғлүмәт сәйәсәте проблемаһы. Интернеттағы контенттың ҡайһы бер тәрҙәрендә тыйыуҙар булмауы, беҙҙең заман геройҙары араһында ир-егеттәр өлгөһө булмауы проблемаһы.

Йәштәр әле тормошто ла күрмәгән бит. Уларҙың ҡыуаныстары ла аҙ. Уларҙы өйрәтергә кәрәк, сөнки улар күпте белмәй, тәжрибәләре юҡ, улар тирә-яҡта нимә барғанын да аңламай. Һөҙөмтәлә улар бөтөнләй аңлашылмаған хәлдәргә тап була. Совет заманында ғаиләлә генә түгел, мәктәптә лә уҡытҡандар һәм тәрбиәләгәндәр. Әммә бөгөн бер ҡайҙа ла уҡытмайҙар! Сөнки ата-әсәләр көнө буйы эштә, ә мәктәптәр Болон системаһы йоғонтоһо аҫтында. Быны үҙгәртергә кәрәк! Беҙгә белем матрицаһының яңы моделе кәрәк. Совет матрицаһын юҡҡа сығарғандар. Бөгөн ул юҡ. Уны тергеҙергә, яңынан яҙырға кәрәк. Унда тарихи күсәгилешлелек булырға тейеш.

**Шамил БАТЫРШИН,**
**Башҡорт дәүләт университеты уҡытыусыһы.**

КИЛЕШМӘЙЕМ!

# НИҢӘ ӨЙҘӘН СҮП СЫҒАРЫРҒА?

**Мин оҙаҡ йылдар Башҡортостанымдан ситтә, Израилдә йәшәйем. Яҙмышым шулай булды. Башҡа халыҡтар менән аралашҡанда һәр саҡ уларҙың телен, мәҙәниәтен, бер-береһенә мөнәсәбәтен өйрәнергә ынтылдым. Һәр береһенең яҡшы сифаттарын баһаларға, хатта үҙемә матур бер өлгө итеп ҡарарға өйрәндем. Әсәйем шулай өйрәтте (ауыр тупрағы еңел булһын).**

Иң мөһиме, мин шуны аңланым: мин аралашҡан, осрашҡан милләт вәкилдәренең бөтәһе лә шул ҡағиҙәне ныҡлы тота - улар өйҙәге сүпте тышҡа сығармай һәм үҙҙәренекенең яманатын һатмай. Йәһүдтәрҙе һәм ҡытайҙарҙы ғына алайыҡ. Улар бер ҡасан да үҙ милләттәштәре хаҡында насар һүҙ әйтмәйәсәк, хатта гәйептәре булһа ла. Улар килеп тыуған проблеманы башҡаларҙы ҡыҫылдырмай, үҙ-ара ғына хәл итәләр ҙә ҡуялар.

Ҡатыным йәһүд милләтенән, уның менән 40 йыл бер ғаилә булып йәшәйбеҙ. Утыҙ йыл Израилдә, Грузияла, Литвала йәшәнек. Оҙаҡ ваҡыт аралашҡандан, гөрөф-ғәҙәттәрен, телен өйрәнгәндән һуң халыҡтар араһында барыбер ҙә айырма барлығын аңлайһың. Йәһүдтәргә килгәндә, шуны аныҡ әйтә алам: улар үҙҙәренең насар сифаттарын башҡаларға белдереп бармай, бер ваҡытта ла йәһүд йәһүдте кәмһетмәй. Грузиндар ҙа, литвалылар ҙа шулай.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, беҙҙең башҡорттар улай түгел. Интернет донъяһында рәхәтләнеп бер-берен, етәкселәрен хурлағандарын уҡып, аптырайым. Улар ниндәй уй менән шулай итә икән? "Хижина дяди Тома" әҫәрен хәтерләйһегеҙме? Унда ҡолдар рәтенән сыҡҡан надзиратель-күҙәтеүсе үҙҙәренекенә ҡарата айырыуса аяуһыҙ ҡылана һәм ҡара тиреһенән ҡотола алмағаны өсөн үкенә. Ҡайһы бер милләттәштәрҙең ҡылығына ҡарата ла ошондайраҡ баһа биреп булмаймы икән: йәғни улар үҙенең башҡортлоғонан кәмһенеп, башҡортлоҡтан үс алыу өсөн тәнҡитләмәйме икән үҙ милләттәштәрен? Шулай тип тә уйланыла әле ул...

**Раuил САДИҠОВ.**

ЫРЫУЫҢ КЕМ?

# ҠОШСОЛАР, ҺЫҘҒЫЛАР, ӨПӘЙҘӘР - ТӨНЬЯҠ БАШҠОРТТАРЫНАН БУЛАБЫҘ



Этнолог Р.Ғ. Кузеев һыҙғы һәм өпәй ырыуҙарының килеп сығышын башҡорт этносы формалашыуының боронғо, тәү этаптарында төрки һәм фин-уғыр (башлыса, уғыр) этник төркөмдәренең тығыҙ аралашыуы һәм ҡатышыуы менән бәйләп аңлата. Уның ғилми фаразының ысынбарлыҡҡа тап килеү-килмәүен әлеге ваҡытта ла тулыһынса раҫлап булмай, әммә ошондай ҡараштар этнология фәнендә XIX быуаттан бирле тарихи әҙәбиәттә сағылыш тапҡан. Ул былай тип яҙа: "Һыҙғы, өпәй, һеңрән, терһәк, бәкәтин ҡәбиләләре төньяҡ-көнсығыш Башҡортостанға көньяҡ-көнбайыш Урал алдынан - боронғо башҡорт этносы формалашҡан төп районден килеүселәр булып тора. Сығыштары буйынса улар урындағы ҡәбиләләрҙән, фин-уғырҙарҙан (һыҙғы, өпәй) йәиһә, моғайын, Көнбайыш Себерҙә үк төркиләшкән уғырҙарҙан (һеңрән, терһәк, бәкәтин) була. Беҙҙең эраның I мең йыллығы аҙағында ошо ҡәбиләләрҙең барыһы ла боронғо башҡорт этносы формалышыуы процесында ҡатнаша һәм II быуаттың тәүге быуаттарында ҡатай һәм әйле ҡәбиләләре менән дөйөм хәрәкәт барышында төньяҡ һәм төньяҡ-көнсығыш Башҡортостанға күсеп килеп, яңынан урындағы халыҡ менән ҡушылыу этабын кисерә".

Һыҙғы һәм өпәйҙәрҙең этник сығышында уғыр компоненты булыуына инанған ғалим Көнбайыш Себер уғырҙарының (боронғо мадъяр-венгрҙарҙың) IV-V быуаттарҙа Кавказға табан дөйөм күсеше барышында Көньяҡ Урал территорияһы аша үтеүен билдәләп китә. Урта быуаттарҙа Көнбайыш Европа әҙәбиәтендә боронғо венгрҙар (һунгарҙар) хаҡындағы мәғлүмәттәр Magna Hungaria ("Бөйөк Венгрия") йәиһә Ungaria Major ("Өлкән Венгрия") исемдәре аҫтында теркәлеп ҡалған. Ошо боронғо мадъяр берләшмәһенең ниндәй территорияла урынлашҡан булыуы әлегә тиклем бәхәсле булып ҡала. Әммә, Р.Ғ. Кузеев иҫәпләүенсә, уғыр ҡәбиләләренең көнбайышҡа табан миграцияһы тарихи Башҡортостан территорияһында эҙҙәрен ҡалдырған, уларҙы ҡуштирәк, кушнаренко, ҡараяҡуп археологик мәҙәниәттәре аша күҙаллап була. Археологик тикшеренеүҙәр кушнаренко-ҡараяҡуп тибындағы мәҙәниәт башланғысын IV-VI быуаттар арауығындағы Тобол-Исәт төбәге менән бәйләй, һуңынан ошо мәҙәниәтте барлыҡҡа килтереүселәр Өфө (Ҡариҙел) йылғаһы бассейнына күсенә, унан Ағиҙел һәм Кама йылғалары буйлап көнбайышҡа табан тарала. Мадъяр-һунғарҙарҙың ата-бабалары ла ошо уғыр берләшмәһенә ингән ҡәбиләләрҙән була. Тимәк, тарихи сығанаҡтарҙа күрһәтелгән Magna Hungaria иленең тәү ватанын Кама буйҙарынан йәиһә Урта Волга тарафтарынан эҙләргә була. IX быуатта боронғо венгрҙар бынан Ҡара диңгеҙ яғына күсенә, ә унан Үҙәк Европаға тиклем барып етә. Археолог В.Ф. Генинг боронғо мадъяр төйәгенең Кинель һәм Һамар йылғалары бассейнында урынлашҡан булыуын тоҫмаллай. XIII быуатта ата-бабаларының боронғо ватанын юллап килгән венгр монахы Юлиан тап ошо территорияла был яҡтарҙа тороп ҡалған мадъяр-уғырҙарҙың вариҫтары менән осраша.

Шул уҡ ваҡытта кушнаренко-ҡараяҡуп мәҙәниәтенә хас булған керамика өлгөләре Көньяҡ Урал аръяғы далаларында һәм Көнбайыш Ҡаҙағстанда ла табылған. Был инде Көнбайыш Себер протомадъярҙарының Көнбайыш Төрки ҡағанаты (VII быуат) күскенселәре менән тығыҙ бәйләнештә булыуын дәлилләй. Һуңғараҡ осорҙарҙа, төрки ҡәбиләләре биләгән оло далалар территорияһында барған киҫкен, хәүефле процестар байтаҡ ҡына ҡәбиләләрҙе Тарихи Башҡортостандың төньяҡ һәм төньяҡ-көнсығыш тарафтарына табан күсеп китергә мәжбүр итә. Ошо тарихи күсеш эҙҙәре IX быуат аҙағына ҡараған ҡаҙылма ҡомартҡыларҙа һаҡланған. Кушнаренко-ҡараяҡуп тибындағы археологик ҡомартҡылар Уйылғы (Өйәлге) күле районында (Силәбе өлкәһенең Ҡоншаҡ районы), Синеглазово (Силәбе ҡалаһы) һәм Башҡортостандың Лағыр (Салауат районы), Ҡаранай (Мәсетле районы) ауылдары янында табылған.

Р.Ғ. Кузеев һыҙғы башҡорттары риүәйәттәрендә уларҙың ата-бабаларының әлеге төйәктәренә Бәләбәй тарафтарынан, йәғни Бөгөлмә ҡалҡыулығы районынан күсеп килеүе хаҡында бәйән ителеүен яҙып алған.

Һыҙғы һәм өпәй этнонимдарының килеп сығышы хаҡында аныҡ ҡына мәғлүмәттәр юҡҡа иҫәп. Р.Ғ. Кузеев, археолог В.Ф. Генинг һәм лингвист А.А. Камалов фекеренә таянып, "һыҙғы" атамаһының самодий телендәге "сыски" (кәмә), ә "өпәй" һүҙенең балтик ҡәүемдәре телдәрендәге "упе" (йылға) һүҙҙәренә ауаздаш булыуын билдәләп үтә. Ғалим былай тип яҙған: "Һуңғы осраҡта ("упе" һүҙе күҙ уңында тотола. - **Ред. иҫк.**) бер үк тамырҙан сығып, өпәй ырыуы атамаһының ғына түгел, ә шулай уҡ Өфө ҡалаһы һәм йылғаһы исемдәрен аңлатып була (сағыштырмаса Уфа - Өфө > Өпө > Өпәй; Уфалей - Өпәле)".

Ғалимдың ошо һығымтаһына ҡайһы бер рус сығанаҡтарында Өпәй улусының русса "Уфейская волость" рәүешендә теркәлеүе тура килә. Ә 1725 йылда Көнгөр бургомистры Юхнев, башҡорт улустары буйлап сәйәхәт ҡылып, улар хаҡында мәғлүмәт туплай. Ул төҙөгән реестрҙа Себер даруғаһында Өфө (Уфимская волость) улусы теркәлә, әммә Өпәй улусы күрһәтелмәй. Тимәк, бында Өпәй улусының русса икенсерәк аталыуына шик юҡ. Төрки телле документтарҙа Өпәй улусы Упәй иләве рәүешендә иҫкә алына.

Һыҙғы һәм өпәй ырыуҙары башҡорттарының боронғо тарихи тамырҙарының Көнбайыш Себер уғырҙарына барып тоташыуы ысынбарлыҡҡа тап килә. Күрәһең, боронғо уғырҙар (протомадъярҙар) билдәле бер сәбәптәр арҡаһында Көнбайыш Себерҙән Яйыҡ, Илек, Эмба йылғалары буйҙарына һәм Көньяҡ Уралға тиклем һуҙылған далаларға килеп етә. V-VIII быуаттарҙа улар Уғыҙ конфедерацияһына ингән күсмә төрки ҡәбиләләре менән тығыҙ аралашып йәшәй, һуңынан Көнбайыш Төрки ҡағанатының "ун һаҙаҡлы" төркиҙәре менән бәйләнештә көн итә. Әйткәндәй, ҡытайҙарҙың "Суй-шу" хроникаһында (643 йыл) Уғыҙ конфедерацияһына ингән төркиҙәр араһында башҡорттар ҙа (ҡытайса "ба-шу-ки-ли") иҫкә алына. Шулай итеп, уғыр сығышлы һыҙғы һәм өпәйҙәр VI-VII быуаттарҙан бирле боронғо башҡорт ҡәбиләләре, шул иҫәптән ҡошсоларҙың ата-бабалары менән тығыҙ этник бәйләнешкә инеп, башҡортлашыу процесын кисерә.

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ**
**әҙерләне.**
**(Аҙағы. Башы 46-сы**
**һанда).**

БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 76



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Мәңгелеккә рейд: бер туғандай үтәнеләр изге Ватан ҡушҡанды

Яугирҙар аслы-туҡлы йөрөй, аҙыҡ запастары бөтә. Командирҙар нисек булһа ла аҙыҡ-түлек табырға тырыша, ошо маҡсат менән махсус төркөмдәр ауыл һәм хуторҙарға ебәрелә. Капитан Әхмәт Гәрәев етәкселегендәге төркөм Городище ауылы янында немецтар Дебальцевоға ҡыуып алып китеп барған 64 һыйырҙы ҡулға төшөрә. Майорҙар Афзал Ғималетдинов һәм Д. Әритҡолов ауыл халҡы менән беҙҙең һалдаттарға аҙыҡ-түлек менән ярҙам итеү кәрәклеге хаҡында аңлатыу эштәре алып бара.

18 февралдә 16-сы гв. атлы дивизияһының штабында корпус командование ҡатнашлығында генерал-майор М.М. Шайморатов тәҡдиме менән кәңәшмә уҙғарыла. Чернухинонан дошман көтмәгәндә, барса һаҡлыҡ сараларын үтәп, немецтарҙың ике пехота дивизияһы арауығындағы тәрән йырын буйлап 12-се һанлы шахта йүнәлешендә хәрәкәт итергә ҡарар ителә. 16-сы дивизия артынан 15-се дивизия яугирҙары ла ҡуҙғалырға тейеш була. Был ваҡытта 7-се гв. корпусының 14-се гв. атлы дивизияһы Чернухинонан 40-50 саҡрымдар тирәһендә шулай уҡ ҡаты алыштар алып бара.

Беҙҙең дивизияла байтаҡ ҡына яралылар ҙа була, ошо төнгө операцияла ҡаты яраланған, аяҡтарында ла баҫып тора алмаған яугирҙарҙы үҙҙәре менән алып китеү үтә хәүефле булғанлыҡтан, уларҙы урындағы ышаныслы кешеләрҙә ҡалдырып китергә булалар. Был эште башҡарыу гв. майорҙары С.Р. Ҡадировҡа, М.И. Кузнецовҡа һәм дивизияның медслужба начальнигы, 2-се рангылы военврач Александр Алексеевич Сарыгинға тапшырыла. Яралылар янында дивизия политбүлеге хеҙмәткәре, лейтенант Зиннәт Вәлиев ҡалдырыла.

Сабир Ҡадиров үҙенең блокнотына яралыларҙың исем-шәрифтәрен яҙып ала. Бына улар:

**1. Кузин Йосоп Сиражетдин улы**, Ғафури районы, Һабай ауылы. Фамилияһы Куджин тип тә яҙылған документтар бар. Һуғыштан ҡайтмаған. Ғаиләһенә 1943 йылдың 24 февралендә Юлино-2 хуторы янында хәбәрһеҙ юғалған, тигән хат килә. Күрәһең, алған яраларынан дошман тылында саҡта вафат булған.

**2. Садыҡов Ғәтиәт Сәләхетдин улы**, 1913 йылда тыуған, гвардия лейтенанты, Ишембай ҡалаһынан. Ул 58-се гв. атлы полкында миномет взводы командиры була. Донбаста тере ҡала. II дәрәжәләге Ватан һуғышы орденына лайыҡ була. 1944 йылдың 13 ғинуарында Белоруссияла батырҙарса һәләк була, Гомель өлкәһенең Слобода ауылында ерләнгән.

**3. Шәмсетдинов Мөнир Шәмсетдин улы**, 1912 йылғы, лейтенант, Ҡариҙел районы, Яугилде ауылы.

**4. Кәримов Зиннур Мөхәмәт улы**, 1915 йылғы, лейтенант, Күгәрсен районы, Ерекле ауылы.

**5. Сирбаев Әхкәм Зәйнетдин улы**, 1918 йылғы, кесе лейтенант, Салауат районы, Ташлы (дөрөҫө - Ташауыл) ауылы. 275-се атлы полк батареяһында взвод командиры була. Уның үлеме хаҡындағы документта һуғышта һәләк булып, Украинаның Ворошиловград өлкәһе Петровское ҡасабаһында (хәҙер - ЛХР, Петровское ҡалаһы) ерләнеүе хаҡында мәғлүмәт бар.

**6. Хәсәнов Ғәлимхан Хәсән улы**, 1907 йылғы, капитан, Ҡыйғы районы, Инде (?) ауылы (ундай ауыл юҡ, күрәһең, яңылыш теркәлгән). Был офицерҙың исеме - Ғилемхан, ул Ҡыйғы районының Йонос ауылынан. 58-се гв. атлы полкы партбюроһының яуаплы секретары була. Үлеме хаҡындағы документта Украина ССР-ы Ворошиловград өлкәһенең Николаевка ауылында ( хәҙер - ЛХР) ерләнеүе теркәлгән.

**7. Исхаҡов Шәһит Минекәй улы**, 1918 йылғы, лейтенант, Ауырғазы районынан.

**8. Исхаҡов Зиннәтулла Исхаҡ улы**, 1903 йылғы, рядовой, Балтас районы, Нурка ауылы (Норкино). 58-се гв. атлы полкында минометсы булып хеҙмәт итә. Үлеме хаҡындағы документта 1943 йылдың 19 февралендә Ворошиловград өлкәһенең Чернухино станцияһы янында ерләнеүе тураһында мәғлүмәт бар.

**9. Сәрүәров Ғараф Сәрүәр улы**, 1906 йылғы, рядовой, Дүртөйлө районы, Иҫке Урсаҡ (?) ауылы. Тыуған ауылының дөрөҫ исеме - Иҫке Уртай. 58-се гв. атлы полкында минометсы булып хеҙмәт итә. 1943 йылдың 24 февралендә һуғышта һәләк булып, Украина ССР-ның Ворошиловград өлкәһе Юлино ауылында ерләнгәне хаҡында мәғлүмәт бар.

**10. Фатихов Лотфулла Фатих улы**, 1904 йылғы, рядовой, Балаҡатай районынан. Белянка ауылында тыуған. 1943 йылдың 20 февралендә һәләк булып, Чернухино станцияһы районында ерләнгән.

**11. Нәбиев Ситдыҡ Хисмәтулла улы**, рядовой, Илеш районы, Йәркәй ауылы (Үрге Йәркәй). 1898 йылда тыуған. Үлеме хаҡында мәғлүмәт билдәле түгел.

Штабта мөһимерәк документтар һайлап алынып, кәрәкле тип һаналмағандары яндырыла. Дошман рәттәрен нисек йырып сығыу һәм артабан хәрәкәт итеү планы төҙөлә.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

***✓ 24 йәшкә генә еткән Бабич нисек итеп халҡының тарихи аһәңен үҙ йөрәге аша үткәреп, тотош дәүер йәшәп өлгөрҙө икән? Бабич минә ҡандаш олатай ғына түгел, ә үҙенә тиңләшергә саҡырған образ, һын да булды.***

# ШӘЙЕХЗАДА АУЫЛЫ

## әсәле-ҡыҙлы Таңсулпан

**Баш ҡалабыҙҙа бар ундай рухи ауыл - Шәйехзада ауылы. Республикабыҙҙың 100 йыллыҡ йәшен байрам иткән көндәрҙә ул ауылда оло йәнлелек күҙәтелде, исеме бер нисә тапҡыр онотолоуға дусар ителгән мәшһүр шағирыбыҙҙың һыны ҡалҡып сыҡты. Шәйехзада ауылы аҫабалары: Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың халыҡ артисы, Салауат Юлаев исемендәге премия лауреаты, Зәһир Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт институтының режиссура һәм актер оҫталығы кафедраһы мөдире Таңсулпан Даһи ҡыҙы Бабичева менән уның ҡыҙы Башҡортостандың халыҡ артисы, Шәйехзада Бабич исемендәге Республика йәштәр премияһы лауреаты, Мостай Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры актеры Рушана Юрий ҡыҙы Бабичева менән әңгәмәбеҙ ошо ауылда йәшәүселәрҙең рухи инаныуҙары, сәнғәт, театр, тормош тураһында барыр.**

**Таңсулпан Даһи ҡыҙы, Рушана Юрий ҡыҙы, мәшһүр Шәйехзада Бабич затына ҡарау, беренсенән, сикһеҙ ғорурлыҡ, икенсенән, оло яуаплылыҡ икәнлеген яҡшы аңлайбыҙ. Сөнки һеҙ күп кенә мәсьәләләрҙә башҡа кешеләр кеүек була алмайһығыҙ, ҡайһы бер ғәмәлдәрҙә башҡарыуҙан тыйылаһығыҙ, үҙегеҙҙе даими контролдә тотаһығыҙ. Ә бына үҙегеҙ был яуаплылыҡты нисек тояһығыҙ?**

**Таңсулпан Даһи ҡыҙы:** Һеҙҙең һорауығыҙҙа уҡ минең яуабым сағылыш таба ла инде. Ысынлап та, ғорурлыҡтан яуаплылыҡ күберәк. Был хаҡта минең яҙғаным да, һөйләгәнем дә булды. Мине Дәүләкән ҡалаһында өләсәйем Мәдхинур Хәйрулла ҡыҙы Бабичева тәрбиәләп үҫтерҙе. Атайымдан өс йәшемдә тороп ҡалғанмын. Атайым Рәми Ғариповтар менән Мәскәүҙә Әҙәбиәт институтында уҡыған, яҙыусы булырға хыялланған. Уҡыуын тамамлағас, пароход менән ҡайтырға сығып, Волгала батып үлә ул. Әсәйем сиргә дусар булғас, мине өләсәйем үҙ ҡанаты аҫтына ала. Ул 1936 йылда Дәүләкәндә педучилище асылғас, шунда уҡытырға бара. Заманына күрә алдынғы ҡарашлы уҡытыусы өләсәйем ул саҡта педучилищеға килеп йөрөгән яҙыусылар Дауыт Юлтыйҙар, Мәжит Ғафуриҙар менән аралаша.

Бер ваҡыт беҙгә Фәсәхәт апай Бабичева килде. Шул килгәнендә ул Шәйехзада Бабичтың 1957 йылда сыҡҡан китабын күрһәтте. Тап шул саҡта миндә затыма ҡараған шағирҙың ижадына ҡыҙыҡһыныу барлыҡҡа килде. Фәсәхәт апай китапты беҙгә ҡалдырҙы, әммә өләсәйем шиғри йыйынтыҡты аҫыраҡ йәшереп: "Шәйехзада Бибич беҙҙең туған тип бер кемгә лә һөйләнеп йөрөмә", - тип киҫәтеп ҡуйҙы.

Һуңыраҡ Бабич тураһында күп мәғлүмәткә эйә булыусы атайым яҡлап туғаныбыҙ Рафиҡ Бабич, Бабич хаҡында яҙып сыҡҡан шағирҙар Ғәзим Шафиҡов, Рауил Бикбаевтар менән аралашҡас, күп нәмәгә күҙҙәрем асылды. Шәйехзада Бабич мәшһүр шағир ғына түгел, республикабыҙҙың барлыҡҡа килеүендә йәнен фиҙа ҡылған батыр йәнле, ҡаһарман йөрәкле шәхес булған.

Баҡтиһәң, репрессиялар башланғас, өләсәйемдең дүрт ағаһын, 82 йәшлек атаһын ҡулға алғандар. Атаһы Белорет төрмәһенә барып етә алмай, юлда вафат була.

Өләсәйемдең Бабичтың китабын йәшереп, уның хаҡында башҡаларға һөйләүемде тыйыуының сәбәптәрен дә аңланым. Ул ошо юл менән мине золомдан йолорға теләгән. Өләсәйем минә 12 йәш тулғанда донъя ҡуйҙы. Донъя әҙәбиәтенә, сәнғәткә, театрға һөйөүҙе миндә ул тәрбиәләне. Бабайыбыҙ Шәйехзада Бабич затына ҡарауыбыҙға бәйле яуаплылыҡты ла өләсәйем тәрбиәләне. Хатта уның исемен әйтергә тыйыуында ла оло кинәйә, йәшертен мәғәнә бар ине.

Беҙ барыбыҙ ҙа, атайым яғынан да, әсәйем яғынан да уҡытыусылар. Үҙ иленде, халҡыңды яратыу, бөтә ғүмереңде донъяны ағартыуға ҡороу беҙҙең ҡаныбыҙҙа. Шуға күрә тормоштоң төрлө хәлдәре ике юлдың береһен һайлау кеүек һынауҙар алдына ҡуйғанда Бабич рухы үҙенән-үҙе дөрөҫ юлға сығара килде. Был матур һүҙҙәр генә түгел, сөнки дөрөҫ булмаған аҙымым өсөн выждан ғазабы кисергән саҡтарымды хәтерләмәйем.

**Рушана Юрий ҡыҙы:** Мин дә, әсәйем кеүек, бәләкәй генә сағымда Фәсәхәт апайҙың беҙгә килгәнен хәтерләйем. Улар әсәйем, өләсәйем менән һөйләшә инеләр. Шәйехзада Бабич исемен тәүге тапҡыр уларҙан ишеттем. Шул уҡ ваҡытта уның хаҡында күп тә һөйләмәйҙәр ине. Исеме сәй табынында шым ғына әйтелде.



Сәнғәт институтының тәүге курсында уҡығанда Бабичтың шиғырҙарын ишетеп, хайран ҡалдым. Ҡан хәтерем уяндымы икән, шағирҙың моңло шиғырҙары минә шул тиклем яҡын, үҙемдеке булып тойолдо. Артабан инде уның шиғырҙарын үҙем дә уҡый башланым. Шундай һорауға ла яуап эҙләнем: 24 йәшкә генә еткән Бабич нисек итеп халҡының тарихи аһәңен үҙ йөрәге аша үткәреп, тотош дәүер йәшәп өлгөрҙө икән? Бабич минә ҡандаш олатай ғына түгел, ә үҙенә тиңләшергә саҡырған образ, һын да булды. Миндә уның ҡаны типкән өсөн дә башҡаларҙан яҡшыраҡ эшләргә тейешлегемде аңлап үҫтем.

**Таңсулпан Даһи ҡыҙы:** Рушананың улы Дауыт ейәнемә алты йәш сағында: "Һинең әсәйең актриса, өләсәйең халыҡ артисы, атайыңдың атаһы Тимер ҡартатайың халыҡ шағиры", - тигәйнем, ул: "Минә һеҙҙең менән бик ауырға тура киләсәк", - тип яуапланы. Был да Бабич нәҫеленә ҡарауҙың иң юғары яуаплылыҡ кимәле сағылышы. Дауыт был һүҙҙәре менән, һеҙгә лайыҡлы ейән булыуы минә ауырға тура киләсәк, тигәнде лә аңлатырға теләне бит инде.

**Рушана Юрий ҡыҙы:** Бында һәр башҡорт үҙ шәжәрәһен ятҡа белергә бурыслы булыуы ябай ғына талап түгеллеген дә аңларға булалыр. Был ата-бабаларыбыҙ рухы алдындағы оло яуаплылыҡ та.

**Таңсулпан Даһи ҡыҙы:** Бына беҙҙең Фәсәхәт апайыбыҙ үҙенең бар ғүмерен Шәйехзада Бабичҡа бағышлаған. Уның хатта үҙ ғаиләһе лә булмаған. Шағир тураһында кемдә ниндәй мәғлүмәт бар, уларҙың барыһы менән дә осрашҡан. Үҙ ҡулы менән яҙған шәжәрәбеҙҙе минә лә бирҙе Фәсәхәт апай. Ул ваҡытта тарихсы Әнүәр Әсфәндийәров төҙөгән шәжәрә лә беҙгә таныш түгел ине. Тәүҙә Фәсәхәт апай яҙмаларына мин шағир хаҡында биографик белешмә итеп кенә ҡараным, һуңынан тәүге тапҡыр спектакль эшләй башлағас, фильм төшөргәндә күктәрҙән килгән мәғлүмәт рәүешендә бик күп нәмәләр асылды. Бер нисә йылдан һуң кейәүем - режиссер Булат Йосопов менән бергә фильмға тотонғанда тағы ла бик күп асыштарға юлыҡтыҡ. Яҙыусы Наил Ғәйетбай роман да яҙҙы.

**Бабичҡа һәйкәл асылыуын һеҙ нисек ҡабул иттегеҙ? Элек беҙ был турала хыяллана ла алмай инек. Һәйкәл урынын оҡшатмаусылар ҙа бар. Әммә арбаһына типография тейәп йөрөп, башҡорт матбуғатына нигеҙ ташы һалыусы, шул юлда йәнен фиҙа ҡылыусы шағирға һәйкәлдең нәҡ телеүҙәк ҡаршыһында ҡуйылыуы урынлы, минеңсә. Бабич Салауат һәйкәленә барған юлда Вәлиди урамына ҡарап тора...**

**Таңсулпан Даһи ҡыҙы:** Бабичтың исемен мәңгеләштереү буйынса 1924 йылда уҡ бик күп саралар проекты төҙөлә. Әммә улар, билдәле сәбәптәр арҡаһында, тормошҡа ашмай. Бер нисә йылдан һуң исеме кире ҡайтарылған хәлдә лә, уның хаҡында айырым кешеләр, яҙыусылар, ғалимдар, зыялылар ғына белде. Ә бына республикабыҙҙың 100 йыллығын байрам иткәндә уға һәйкәл ҡуйылыуы шағирҙы киң планда танытты.

Ысынын әйткәндә, беҙ һәйкәлде икенсе урында күргәйнек. Әле килеп һеҙ әйткән ергә килеп баҫҡас, үҙе шул урында торорға теләгәндер, тигән һығымта яһаныҡ инде. Ысынлап та, мистикаға килгәндә, донъяла үҙенән-үҙе генә хәл ителә торған күренештәр ҙә була.

**Рушана Юрий ҡыҙы:** Фильмдан һуң Бабичҡа һәйкәл ҡуйылыуы минә тәбиғи тойолдо. Фильмдың логик тамамланышы ла булды ул һәйкәл. Йыл һайын беҙ, Бабичевтар, уның һәйкәле янына йыйылабыҙ.

**Таңсулпан Даһи ҡыҙы:** Шул һәйкәл ярҙамында күпме нәҫелдәштәребеҙҙе, йәғни, һеҙ әйткәнсә, Шәйехзада ауылы ағзаларын таптыҡ. Ҡыйғаҙытамаҡтан да, Әсәндән дә бик күп туғандар килде. Улар барыһы ла сәнғәткә яҡын. Сәнғәт уларҙың төп һөнәре булмаһа ла, йә йырлайҙар, йә бейейҙәр, йә шиғыр яҙалар, ҡыҫҡаһы, үҙешмәкәр артистар. Үҙҙәрендә Бабичтыҡы һымаҡ балағурлыҡ сифаты ла бар. Инде һүҙгә байҙар, бәхәсләшеп тә китәләр, шаяралар, лаҡап һөйләйҙәр.

Илеш районының Лаяшты ауылында Шәйехзаданың апаһының ейәнсәре Майса апай балалары менән йәшәне. Ул балалар барыһы ла шиғыр яҙа. Үҙенсәлекле ярыш та ойошторалар. Алдан тема билдәләйҙәр ҙә, шул темаға шиғыр яҙып ярышалар. Ундай конкурстың берәй ерҙә үткәне бармы икән? Бындайҙы тик Бабич заттары ғына башҡара алалыр.

Йә булмаһа, Чесноковка ауылында йәшәүсе Тәбрис ағай Бабичевты ғына алайыҡ. Ул туғандарыбыҙҙы бергә туплаусы ла, барлыҡ сараларҙы ойоштороусы ла. Тәбрис ағай социаль селтәрҙә Бабичевтарҙың эшмәкәрлеген яҡтыртып бара. Ватсапта "Бабич туғандары" тигән чатыбыҙ ҙа бар. Мишкә районының Ҡыйғаҙытамаҡ ауылында музей ойоштороуҙа, күргәҙмә әсбаптар туплауҙа барыбыҙ ҙа ҡатнаштыҡ. Йыл һайын ике тапҡыр барып торабыҙ ул яҡҡа. Мотлаҡ рәүештә һәйкәл янында ла осрашабыҙ. Фотоға төшәбеҙ, сәскәләр һалабыҙ. Беҙҙе унда Бабич рухы, Шәйехзада ауылы йыя.

**Һәр бер ата-әсә үҙе кисергән ауырлыҡтарҙы балаһына теләмәйҙер ул. Таңсулпан Даһи ҡыҙы, һеҙ бигүк еңел булмаған һөнәр вәкиле булараҡ, Рушананың сәнғәт юлын һайлауына нисек риза булдығыҙ? Ҡытай фәйләсүфе Ошоноң фекеренсә, тик балаһы өсөн генә йәшәгән ата-әсәнең үҙ тормошо, ата-әсәһе өсөн йәшәгән баланың үҙ тормошо булмай...**

**Таңсулпан Даһи ҡыҙы:** Рушананың мин һайлаған һөнәргә тәбиғәте менән тап килгәнен күреп, мин уны, был юлдан барма, тип тыя алманым да, тыйырға тырышманым да. Хатта был турала уйламаным да. Рушана урта мәктәпте бөтмәҫ элек сәнғәт институтына кандидат булып уҡырға килде. Ул ваҡытта был алым рөхсәт ителә ине. Хәҙер Берҙәм дәүләт имтихандары башланғас, был мөмкин түгел. Рушананың һеңлеһе Рената хореографик училище тамамлап, шунан актерға уҡып, хәҙер хореограф булып эшләп йөрөй.

Фәйләсүф Ошоноң фекере менән килешергә лә, килешмәҫкә лә була. Бына минең әсәйем тормошоноң ҙур өлөшөн минә бағышланы. Ул 50 йәшендә эшен ташлап, Рушананы ҡарашырға тип беҙгә күсеп килде. Үҙенсә был аҙымын ауырып, бала сағымда мине ҡарай алмауы менән аңлатты. Әгәр ҙә уның ярҙамы булмаһа, мин ҙур эштәр башҡара алмаҫ инем. Ижадсыға ярҙам, таяныр кеше кәрәк. Минең ярты уңыштарым әсәйемдең ярҙамы менән тормошҡа ашты. Артист тормошо нормативтарға һыймай, иртәнән башлап төн уртаһына тиклем эштә, гастролдәр, концерт программалары... Һуң ғына өйгә ҡайтҡанда балалар ҡараулы, йортонда барыһы ла әҙер, был ҙур бәхет. Әсәйем булмаһа, мин актриса була алмаҫ инем. Ә бына үҙем, өләсәй булараҡ, Рушананың, Ренатаның балаларына әсәйем һымаҡ була алдым тип әйтә алмайым.

**Рушана Юрий ҡыҙы:** Дауыт мәктәптәге дәрестәренән һуң

***✓ Бабич үҙенең ҡыҫҡа ғына ғүмерендә барыһын да эшләп өлгөргән. Үҙе хатта өйләнеп, балалар тәрбиәләп өлгөрмәһә лә. Тимәк, ул нимә өсөн тәғәйенләнгән булһа, шуны атҡарған.***

әсәйемдең эшенә килә торғайны. Әле улыма 19 йәш, ул Санкт-Петербургта уҡый, тарих ярата, халыҡ-ара кимәлдә белгес булырға ниәте. Бала сағында артист булырға хыяллана торғайны.

Үҙем ошо һөнәрҙе һайлаған саҡта әсәйемдең юлын дауам итәм тип бөтөнләй уйламаным да. Уйлаһам, был юлды һайламаҫ инем. Мин бәләкәйҙән актриса булам тип хыялланманым, ә актриса булырымды белдем. Әҙәби китап уҡыһам, унда үҙемде шундағы бер персонаж итеп күрҙем. Тәүҙә княгиня Ольганы уйнарға хыял йөрөттөм. Мәктәпте тамамлар алдынан актрисаға уҡырға барырға ниәтемде әсәйемә әйткәйнем, ул: "Эйе, был бик яҡшы шөғөл", - тип кенә яуап бирҙе.

**▸ Ижадыңдың тәүге осоронда ла әсәйеңә оҡшарға тырышманыңмы?**

**Рушана Юрий ҡыҙы:** Юҡ, бер ҙә оҡшарға тырышманым. Беҙ икебеҙ сәхнәлә ике төрлө характер, ә бына Рената сәхнәлә әсәйемә оҡшаған. Беҙ һеңлем менән дә икебеҙ ике төрлөбөҙ. Мин октябрҙә, ул мартта, ул иртәнсәк 6 сәғәт 30 минутта, мин киске 6 сәғәт 30 минутта тыуғанбыҙ.

**▸ Әгәр ҙә режиссер һеҙгә бер ниндәй ҙә текстҡа таянмайынса, үҙегеҙҙе уйнарға ҡушһа, ул ниндәй спектакль булыр ине?**

**Таңсулпан Даһи ҡыҙы:** Улай булғаны юҡ әлегә. Ә былай,

**▸ Рушана, мин һине һәр ваҡыт "Салауат" трагедияһындағы эстон ҡыҙы Ану итеп күрәм...**

**Рушана Юрий ҡыҙы:** Бөтә персонаждарыңа ла йәнеңдең бер өлөшөн һалаһың бит инде. Шунһыҙ роль килеп тә сыҡмай. Мин Ануҙы уйнағанда тәжрибәм бик аҙ ине, бәлки, шуға ла унда Ануға ҡарағанда үҙем күберәк булып, шуға мине унда күрәһегеҙҙер.

**▸ Халҡыбыҙҙа "Ҡыҙыңды ҡырҡ ерҙән тый" тигән һүҙ бар. Рушананы һеҙ тыйып тәрбиәләнегеҙме?**

**Таңсулпан Даһи ҡыҙы:** Беренсегә ишетәм был хаҡта. Мине өләсәйем дә бер нәмәнән дә тыйманы, әсәйем дә тауыш күтәреп мине әрләгәне булманы. Дәрес әҙерләү һымаҡ мәсьәләләрҙә нимәләр уға әйткәнмендер, ә бына ҙур ки-



**Таңсулпан Даһи ҡыҙы:** Мин Рушана менән дә, Рената менән дә әхирәт, икеһе менән дә серҙәребеҙ уртаҡ.

**▸ Кеше донъяға тыуа, һөнәр үҙләштерә, балалар үҫтерә, ҡартая һәм баҡыйлыҡҡа күсә. Уның балаларын да, балаларының балаларын да шул уҡ баҡыйлыҡ көтә. Ошоларҙы белә тороп, кеше барыбер тырышып-тырмашып йәшәй. Логик яҡтан ҡарағанда бынан да мәғәнәһеҙерәк күренештең булыуы мөмкинме? Һеҙҙенсә, йәшәүҙең мәғәнәһе нимәлә?**

**Таңсулпан Даһи ҡыҙы:** Минеңсә, кеше үҙ тәғәйенләнешен бойомға ашырып өлгөрөргә тейештер. Шул уҡ ваҡытта кеше "Мин фәҡәт бына ошоноң өсөн тәғәйенләнгәнмен", тип тә әйтә алмай. Сөнки ул был йәһәттән хаталаныуы һәм ғүмерен яңылыш йәшәүе бар. Шуға күрә кешенең үҙ тәғәйенләнешен аңлау йәһәтенән эске һиҙемләүе көслө булыуы мөһим. Мин бына утыҙ йыл актриса булып эшләгәндән һуң, театрҙан китеп дөрөҫ эшләнемме икән, тип уйлайым. Тамашасылар ҙа шул һорауҙы даими бирә. Киткәнегеҙ өсөн үкенәһегеҙме, ҡасан кире ҡайтаһығыҙ, тип тә һорайҙар. Ундай үкенеүҙәр юҡ миндә. Йәшәгәс, һаулыҡ та кәрәк, матур мөнәсәбәттәрҙә йәшәү ҙә кәрәк. Үкенескә күрә, беҙҙең йәшәү эшкә генә бәйләнгән. Таңдан кискә тиклем тик шул турала ғына уйлайбыҙ, ял итә белмәйбеҙ. Бы-

# АҪАБАЛАРЫ -

## һәм Рушана Бабичевалар

һәр бер спектаклдә актер нисәләр процент үҙен уйнай. Үҙ фекерең, үҙ нервы системаң, үҙ реакцияларың барыбер ҙә сағылыш таба. Күп уйнай торғас, ролең үҙ балаң һымаҡ булып бөтә. Әгәр ҙә персонажың һинең характерыңдың ҡапма-ҡаршыһы икән, был осраҡта проценттар ҙа әҙерәктер.

**Рушана Юрий ҡыҙы:** Миңә үҙемә абсолют тап килмәгән ролдә башҡарыу бәхете тәтене. Ундай ролдә уйнауы ҡыҙыҡ. Линас Зайкаускастың "Шыуышма"һында ("Лавина") акушерканы уйнаным. Нимә генә булмаһын, сәхнәгә персонаж түгел, һин сығаһың.

**▸ Ни өсөн халыҡ актерҙарҙы нык ярата?**

**Таңсулпан Даһи ҡыҙы:** Әллә инде. Мин утыҙ йыл сәхнәлә уйнаным, педагогик стажым да утыҙ йыл. Ун йыл буйына актер ҙа булдым, уҡыттым да. Һуңғы егерме йылда мин тик педагог ҡына. Ошо егерме йыл эсендәге эштәрем актриса хеҙмәтемдән утыҙ тапҡырға күберәктер. Әммә ҡайҙа ғына бармайым, миңә барыбер актриса тип ҡарайҙар.

мәлдә мин уны тыйманым да, әрләмәнем дә. Һәр бер кешенең эсендә намыҫы була, намыҫ - ул Хоҙай менән бәйләнеш. Әгәр ҙә кешенең иманы бар икән, ул нимә эшләргә ярағанын, нимә эшләргә ярамағанын үҙе белә. Мин ҡыҙымды бер ниндәй ғәйебе өсөн дә мөйөшкә баҫтырып ҡуйманым. Рушанам - ул ыңғайлыҡтың идеалы. Дауыт ейәнемде генә үҫмер сағында компьютерҙа уйнауҙан тыя инем тыйыуға, әммә ул уйындарҙың ыңғай яғы шунда: хәҙер йәштәр шул уйындар ярҙамында нык үҫешә.

Минеңсә, баланы тыйыуға, әрләүгә ҡарағанда уға һайларға мөмкинлек бирергә кәрәктер. Нимәнең яҡшы, нимәнең насар икәнлеген бала үҙе айырған осраҡта ғына тәрбиә һөҙөмтәле, минеңсә.

**▸ Әсәй менән ҡыҙ кеше әхирәт була аламы? Иң йәшерен серегеҙҙе бер-берегеҙгә сискәнегеҙ бармы?**

**Рушана Юрий ҡыҙы:** Әлбиттә, әсәйем минең иң яҡын әхирәтем, ул минең барлыҡ серҙәремде белә.

на Рушана менән һуңғы тапҡыр әллә ҡасан осрашҡайныҡ, әгәр һеҙ әңгәмәгә саҡырмаһағыҙ, һаман осраша алмаҫ инек.

Барлыҡ ошо ваҡ эштәрҙе башҡарғанда һин үҙ ғүмереңдә башҡарасаҡ иң төп бурысыңды ла онотмаҫҡа тейешһең. Ғүмерең бөтөп, Хоҙай алдына баҫҡанда уға нимә тип өндәшергә һуң? Әңгәмәбеҙҙең башына ҡайтһаҡ, 24 йәш кенә йәшәгән Бабич үҙенең ҡыҫҡа ғына ғүмерендә барыһын да эшләп өлгөргән. Үҙе хатта өйләнеп, балалар тәрбиәләп өлгөрмәһә лә. Тимәк, ул нимә өсөн тәғәйенләнгән булһа, шуны эшләп өлгөргән.

**Рушана Юрий ҡыҙы:** Әсәйемдән яҡшыраҡ итеп әйтә алмам: Бабич бабабыҙ һымаҡ был ғүмерҙе лайыҡлы итеп үтергә кәрәк беҙгә лә!

**▸ Һуңғыһы Познерҙың классик һорауы: Хоҙай янына барғас, уға нимә тип әйтерһегеҙ?**

**Таңсулпан Даһи ҡыҙы:** Хоҙайым, Һин күрһәткән юлдан атланым һәм Һинең янына минең өсөн асҡан юлдан килдем!

**Рушана Юрий ҡыҙы:** Һинең менән осрашыуыма мин бик шатмын, Хоҙайым!

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ әңгәмә ҡорҙо.**

*УЙЛЫҒА - УЙ*

# ДАУАЛАНЫУ ЮЛЫН ЭҘЛӘГӘНСЕ...

## ауырыуҙан һаҡланыу юлын эҙлә



**Беҙ Аллаһы Тәғәләнән үҙебеҙгә һаулыҡ һорап доға ҡылабыҙ. Аҙ ауырыу, аңһат үлем биреүен үтенәбеҙ. Ә шул уҡ ваҡытта йыш ҡына сәләмәтлегебеҙ өсөн үҙебеҙ яуаплы булыуыбыҙ, күп ауырыуҙарҙы иҫкәртә алыуыбыҙ хаҡында онотабыҙ. Сама белмәйбеҙ, үпкәләйбеҙ, ғәфү итмәйбеҙ, асыуланабыҙ, көнләшәбеҙ.**

Әхирәтем даими рәүештә үҙәге көйөүгә зарлана ине, гастроэнтерологҡа күренергә кәңәш иттем. Барған, күренгән, анализдар биргән. Ҡушҡан тикшереүҙәрҙең барыһын да үтеп, врачҡа барһа:

- Һиңә ғәфү итергә кәрәк. Күңелеңдә оҙаҡ йөрөткән үпкә тойғоһо ашҡаҙаның, үт ҡыуығың эшмәкәрлегенә кире йоғонто яһай, - тигән.

Әхирәтем поликлиниканан уҡ түҙмәй шылтырата:

- Рационға бер сит ризыҡ индермәнем. Ҡурылған, майлы, тоҙло бер нәмә лә ашамайым, ә үҙәк көйә. Ҡайһы берҙә хатта үт ауыҙҙан килеп сыға, тигәйнем, врач: "Үпкәләй торған холҡоңдан арын, ғәфү итергә өйрән", - тип сығарып ебәрҙе. Бер дарыу ҙа яҙманы. Анализдарыңда бер тайпылыш та күрмәйем, тине.

Дуҫым - уҡымышлы ҡатын, күп уҡый, күп белә. Психосоматиканы, йәғни ауырыуҙың килеп сығыуына, үҫешенә психик факторҙарҙың тәьҫирен өйрәнеүсе йүнәлеш тураһында ла мәғлүмәтле ул. Врачтың әйткәнен дә шунда уҡ аңланы ул, әлбиттә.

- Ғәфү итмәй торған әйберҙәр ҙә була бит. Әммә кисерергә, дөрөҫөрәге, кире эмоциялар менән көрәшергә тура киләсәк, сөнки был торошом минең үҙемә оҡшамай. Беләм, был минең өсөн еңел булмаясаҡ, - тип һығымта яһағандай итте.

Һуңғы ваҡытта әхирәтемдең тормошонда булған хәл-ваҡиғаларҙы белгәнгә күрә, артыҡ белдеклелек күрһәтергә теләмәнем. Шулай ҙа: "Үҙ- үҙеңә ярҙам итеү хәрәкәтенә нигеҙ һалыусыларҙың береһе, психолог, яҙыусы Луиза Хей ҙа: "Кеше ауырый башлау менән, иң беренсе, ғәфү итергә тейешле кешеләрен иҫләргә һәм кисерергә тейеш", тип әйткән", - тигән булдым.

Ғүмер буйы традицион медицинаға тоғро булһа ла, һәр ваҡыт теге йәки был сирҙең нигеҙендә кешенең кире тойғолары ятыуын билдәләгән таныш врачым да бар. Эске конфликттың емергес көскә эйә булыуын һыҙыҡ өҫтөнә ала ул гелән.

- Оҙаҡ йылдар һаулыҡ һаҡлау өлкәһендәге күҙәтеүҙәремдән сығып, шуны әйтә алам: ашҡаҙан-эсәк тракты эшмәкәрлеге боҙолған пациенттарымдың күбеһе үпкәсел, тәкәббер кешеләр, - тип һөйләне ул был темаға һөйләшеүҙе йөпләп. - Эс ҡатыуы менән яфаланғандарҙың күбеһе - кеше уңышына көнләшеүселәр. Кем үҙен эшкә көсләп йөрөтә, шуларҙа остеохондроз, бил ауыртыуы йышыраҡ осрай. Хис-тойғоһон йәшергән, әйтә торған һүҙен ваҡытында әйтә алмаған йыуаш, баҫалҡы, йә киреһенсә, алдын-артын уйламай һөйләгән, ҡыҙыу, башҡаларҙан үҙен өҫтөнөрәк күрһәтергә теләгән кешеләрҙең башы йыш ауыртыусан. Бөтә ауырыуҙарҙы ла, әлбиттә, күңел торошона, эске ҡаршылыҡҡа бәйләргә ярамай. Әммә күңелле, алсаҡ, ярҙамсыл кешеләр тиҙерәк һауығыуын һәм оҙағыраҡ йәшәүен бер кем дә инҡар итә алмай.

Психосоматика буйынса һаулыҡ менән булған проблемаларыбыҙҙың сәбәбе беҙҙең төпкөл аңыбыҙҙы биләгән уйҙарыбыҙға, ҡурҡыуыбыҙға, хәүефләнеүебеҙгә, эске ҡаршылыҡтарға, яҡын кешебеҙ йәки бергә эшләгән хеҙмәттәшебеҙ менән килешмәүсәнлеккә, көнләшеүгә, асыуланыуға, рәнйеүгә, үпкәләүҙәргә бәйле. Һуңғы осорҙа кешеләрҙең йыш ҡына ауырыуы сәбәбен белмәй, медиктарҙан тыш, төрлө бағымсыларға, имселәргә йөрөгәндәренә шаһит булғаным һәм, нисек кенә ғәжәп күренмәһен, сирен еңгәндәрен беләм. Сөнки күп осраҡта һаулығына зарланған сирлегә, тәү сиратта, психотерапевт ярҙамы кәрәк. Шуға ла мин һаулығыбыҙ медицинаның көсөнә түгел, ә ғәҙәттәребеҙгә, йәшәү рәүешебеҙгә бәйле, тип әйтә торғайным пациенттарыма. Аңлағандары аңланы, аңламағандары - юҡ.

Күҙәтеүҙәремдән тағы шуларҙы еткергем килә: ашҡаҙандың һәр ваҡыт тулы булыуы күп ауырыуға килтерә. Иртә ятып, иртә тороу кешенең бай һәм етеш тормошона ғына түгел, сәләмәтлегенә лә ыңғай тәьҫир итә. Тәне һау кеше эҫегә лә, һыуыҡҡа ла түҙемле була. Күңеле һау асыуҙы ла, ҡайғыны ла, шатлыҡты ла, башҡа тойғоларҙы лайыҡлы үткәрә. Эшкә һәләтлелекте, һаулыҡты, яҡшы кәйефте оҙаҡ йылдарға еткерергә уйлаһағыҙ, бөтә нәмәлә лә сама белегеҙ...

Шулай тип тамамланы һүҙен врач. Аңлағандар аңлағандыр, аңламағандар иһә ҡабаттан күҙҙән үткәрһен ошо врачтың һөйләгәндәрен.

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

✓ - *Иҫерткес эсемлектәрҙе эсеү түгел, уйлауы ла ҡурҡыныс. Уны тәмләп ҡараған кешене шунда уҡ төрмәгә ябалар. Беҙҙә махсус төрмәләр юҡ. Уның өсөн диңгеҙ төпкөлөндә урынлашҡан утрауҙар ҡулланыла.*



*ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...*

**Минең алда мөләйем генә йылмайып йәш егет ултыра. Бер яҡтан уйлап ҡараһаң, ғәжәпләнергә урын да юҡ һымаҡ. Ә шулай ҙа бында бер мөһим үҙенсәлек бар. Был егет беҙгә сит илдән килгән. Исеме ҡолаҡҡа ятышлы ғына - Шахил Шиам. Бер аҙ бөҙрәләнә төшкән ҡара сәстәр, ҡарағусҡыл йөҙ, муйылдай ҡара күҙҙәр… Ирекһеҙҙән, уны һиндтарҙың Митхун исемле әртисенә оҡшатып ҡуям. Заманында "индийский" киноларҙы ауыл менән күтөп ала торғайныҡ бит әле. Шул киноларҙа яратҡан әртисебеҙ әлеге лә баяғы шул Митхун булды. Үҙе йырлай, үҙе бейей, үҙе килеп тороп оҫта һуғыша. Бер мәл хатта ун етегә ун туғыҙ асҡыс менән тотош машинаны йыға һуҡты ла ҡуйҙы. Уныһы әллә нисәмә тапҡырға әйләнеп-түкмәсләп китте. Ә шулай ҙа мин беҙҙең геройҙы тиккә генә кино геройы менән сағыштырмайым - улар яҡташтар. Шахил Һиндостандан алыҫ булмаған ерҙә, дөрөҫөрәге, утрауҙа йәшәй. Мальдивия утрауҙары тип атала ул. Һиндостандан ни бары 400-500 км алыҫлыҡта ғына. Әле шуны уйлап ултырам. Шахил Митхундан күпкә батырыраҡ, буғай. Малдьдивия егете бит Бөрйәнгә йырларға-бейергә, "кеше туҡмарға" тип түгел, ә кәләш алам тип килгән! Бындай етди аҙымға Митхундың йөрәге етмәҫ ине, моғайын. Ошоларҙы күҙ алдынан үткәреп ебәргәс, Шахилға хөрмәт бермә-бер артып китә. Уның менән ҡыҫҡаса танышыу тамам. Хәҙер әңгәмәне башлап ебәрергә лә ваҡыттыр.**

# МАЛЬДИВИЯ УТРАУЫНДА…

## беҙҙең кейәү йәшәй

**➔ Шахил, үҙегеҙҙең ил тураһында һөйләп ебәрһәгеҙ ине.**

- Минең илем Мальдивия Республикаһы тип атала. Утрауҙарҙа йәшәйбеҙ. Үҙаллылыҡты күптән түгел генә алғанбыҙ. Был мөһим ваҡиға 1965 йылдың 26 июлендә булған. Был көн беҙҙең милләт өсөн - оло байрам.

**➔ Утрауҙар күптер инде. Ике йөҙләп барҙыр (Шахилдың йылмайып ҡуйыуына ҡарағанда уйламайыраҡ һорау бирреп ҡуйылды, буғай).**

- Ике меңдән ашыу утрау бар. Ҙурҙары ла бар, бәләкәйҙәре лә етәрлек. Уртаса утрауҙың киңлеге ике, ә оҙонлоғо өс саҡырым. Иң ҙурының оҙонлоғо ете саҡырым. Уның бер яҡ осонан икенсе яғына йәйәүләп сәғәт ярым эсендә үтергә була. Бәләкәй һәм ыҡсым утрауҙар күп. Уларҙың ҙурлығы 300-400 метр самаһы ғына. Уларҙы ҡайһы бер туристар үҙҙәренең ял осорона тулыһынса һатып ала.

**➔ Утрауҙар араһында бәйләнеш нисек булдырылған?**

- Төп транспорт булып кәмә (моторлыһы, паруслыһы һәм башҡаһы) иҫәпләнә. Катер, яхта-пароходтар күп. Алыҫ утрауҙарға һыу самолеттары оса. Яҡындары араһында күперҙәр бар.

**➔ Беҙҙең өйҙәрҙе күрҙең һәм йәшәнең. Ә һеҙҙәге өйҙәр нисегерәк?**

- Утрауҙар бәләкәй булғас, өйҙәрҙе иркенләп төҙөп булмай. Урамдар ҙа тар ғына. Баш ҡала урынлашҡан утрауҙа күп ҡатлы йорттар бар. Башҡа утрауҙарҙа ике ҡатлы йорттар төҙөлә. Уның ҡарауы, беҙҙә йыл әйләнәһенә йылы. Шуға беҙҙә мейес-фәлән юҡ. Мунсаны ла тәү тапҡыр бында күрҙем.

**➔ Беҙҙең аш-һыу оҡшанымы?**

- Оҡшаны былай (Шахил көләмһерәп ҡуя). Беҙҙәге аш-һыу бөтөнләй башҡа. Беҙ күберәк йәшелсә һәм дөгө менән туҡланабыҙ. Күп ризыҡтар боросло һәм әсе. Итте ашамайбыҙ, тиһәк тә була. Һеҙҙә барлыҡ аҙыҡтар сөсө. Боросто бөтөнләй тип әйтерлек ҡулланмайһығыҙ.

**➔ Ә шулай ҙа уртаҡ аҙыҡ барҙыр инде?**

- (Шахил бер мәлгә уйланып ҡала). Минеңсә, ҡыҙҙырылған йомортҡалыр. Тауыҡ һәр илдә барҙыр инде ул.

**➔ Әйткәндәй, һеҙҙә күпме халыҡ йәшәй, динегеҙ ниндәй?**

- 400 мең самаһы кеше йәшәй (артыҡ күп түгел икән шул). Барыбыҙ ҙа мосолман. Ислам ҡанундарына бойһоноп йәшәйбеҙ. Биш тапҡыр намаҙ башҡарыу - фарыз. Рамаҙан айы - изге һәм мәртәбәле ай. Уның талаптарын тулыһынса үтәйбеҙ. Уны оло байрам итеп ҡабул итәбеҙ. Кемдер был изге айҙа яңылыштан ауыҙ асһа (һәм кемдер уны күрһә), уға ниндәйҙер яза ҡаралған. Ололарҙың һүҙе хөрмәт менән ҡабул ителә. Һәр утрауҙа мәсет бар. Намаҙҙар мәсеттәрҙә башҡарыла.

**➔ Ғаиләгеҙ ҙурмы?**

- Беҙ дүртәүбеҙ. Мин икенсе бала. Элек күп балалы ғаиләләр ҡәҙимге күренеш ине. Бөгөн бер-ике балалы ғаиләләр күбәйҙе. Бәпәй алған мәлдә атайҙың да, әсәйҙең дә түләүле отпуск алырға хоҡуғы бар. Атайға утыҙ көнгә хәтлем эшкә йөрөмәй бәпәй ҡарашырға мөмкинлек бирелә.

**➔ Белем алыу нисегерәк икән һеҙҙә?**

- Һәр утрауҙа балалар баҡсаһы һәм мәктәп бар. Мәктәптәр 12 йыллыҡ. Уҡыу бушлай. Утрауҙарҙа колледж-техникумдар юҡ. Улар Малела (йәғни, баш ҡалала) ғына. Беҙҙә юғары уҡыу йорттары юҡ. Юғары белемде Шри-Ланка, Һиндостан, Танзания кеүек илдәрҙә алырға була. Европа илдәренең юғары уҡыу йорттарында уҡығандар ҙа бар.

**➔ Һеҙ мәктәпте тамамланығыҙ һәм…**

- Турфирмала эшләй башланым. Беҙҙең илдә туризм ныҡ үҫешкән. Эш һәр кемгә етерлек. Хатта сит илдән килеп эшләйҙәр. Бына мин Рәсәйҙән килгән Бөрйән һылыуы Алмагөл менән үҙебеҙҙең турфирмала таныштым. Тыныс, ипле һәм, әлбиттә, һылыу ҡыҙ минең күңелемде шунда уҡ арбап алды. Дөйөм алғанда, беҙҙә йәштәрҙең күпселеге туризм өлкәһендә эшләй. Һәм һәйбәт аҡса эшләй. Әйткәндәй, ҡунаҡханаларҙа, кафе-



ресторандарҙа иҫерткес эсемлектәр һәр ваҡыт туп-тулы. Әммә улар ял итеүселәргә генә һатыла. Беҙҙекеләр уны һатып алмай (һатыу ҡәтғи тыйылған) һәм ҡулланмай.

**➔ Ә шулай ҙа кемдер эсә ҡалһа…**

- Иҫерткес эсемлектәрҙе эсеү түгел, уйлауы ла ҡурҡыныс. Уны тәмләп ҡараған кешене шунда уҡ төрмәгә ябалар. Беҙҙә махсус төрмәләр юҡ. Уның өсөн диңгеҙ төпкөлөндә урынлашҡан утрауҙар ҡулланыла.

**➔ Һеҙҙең туризмдың үҙенсәлеге нимәлә?**

- Беҙҙә йыл әйләнәһенә йылы. Шуға күрә ял итеүселәр йыл әйләнәһенә өҙөлмәй. Туристар ике өләшкә бүленә - яр буйында ял итеүселәр һәм һыу аҫтына сумыусылар. Тәүгеләре йылы ҡомда ҡыҙынып ял итергә ярата, ара-тирә һыу инеп ала. Икенселәре акваланг кейеп, һыу аҫтына сума һәм балыҡ-үҫемлектәр донъяһы менән таныша. Шуны ла әйтеп үтергә кәрәктер. Беҙҙә һәр ҡунаҡханала ғалим-биолог эшләй. Ул ял итеүселәрҙе урындағы тәбиғәт менән, уның үҙенсәлектәре менән таныштыра.

**➔ Миҫал килтереп китһәгеҙ ине.**

- Белеүегеҙсә, гөбөргәйел йомортҡаһын ярға сығып һала. Һәм уны ҡомға күмә. Беҙҙә йәшәгән гөбөргәйелдең бер төрө 200-гә яҡын йомортҡа һала. Әммә ни бары 2 генә бала гөбөргәйел тыуа. Ә ҡайһы бер ял итеүселәр йомортҡаларҙы ҡомдан ҡаҙып ала, ҡыҙыҡ өсөн тотоп йөрөй, аҙаҡ ташлап китә. Кем белә, бәлки, тап ошо йомортҡанан гөбөргәйел тыуыр ине. Биолог ошо турала аңлата ла инде.

**➔ Беҙҙең Бөрйән нимәһе менән һеҙҙең иҫтә ҡалды?**

- Иң аптыратҡаны шул булды - һеҙҙә лә төп дин булып Ислам нигеҙҙәре тора икән. Һеҙҙең мәсеттә беҙгә никах уҡынылар. Был хәлгә мин бик шатмын. Беҙҙә лә эҫе, һеҙҙә лә эҫе (быйыл ғына шулай булды, тип өндәшеп торманым инде). Әммә бында һауа ҡоро. Шуға тын алыуы еңел. Беҙҙә һауа дымлы. Шуға эҫене үткәреүе ауырыраҡ. Һеҙҙә таҙа һыу күп. Шуның ҡәҙерен белегеҙ (беҙ ысынлап та һыу ҡәҙерен белеп етмәйбеҙ шул). Беҙҙе бөтә яҡтан һыу уратып алған. Әммә диңгеҙ һыуы тоҙло. Эсеүгә яраҡһыҙ. Тоҙло һыуҙы сөсөгә әйләндерә торған ҡоролмалар бар. Әммә барыбер һеҙҙә һыу тәмле. Ҡуйы урманды тәү тапҡыр күрҙем. Ҡыш һәм ҡар тураһында ишеткән бар. Әммә уларҙы күрергә насип булманы. Шул ҡар тигәндәренең яуғанын күрергә, уны тотоп ҡарарға насип итһә ине. Алла бирһә, Бөрйәнгә ҡыш килергә иҫәп тотам (көрәк әҙерләп ҡуйырмын, февраль айында килергә тырыш, тип кәңәш бирҙем әле). Кешеләр алсаҡ һеҙҙә. Мине матур ҡунаҡ иттеләр. Рәхмәт барыһына ла. Юл алыҫ булғас, бер үҙемә килергә тура килде. Башҡа туғандарым килә алманы. Бер үҙем килеүгә ҡарамаҫтан, мине былай уҡ ололап ҡаршы алырҙар, тигән уй башыма ла килмәгәйне. Шуныһы күҙгә ташлана: һеҙҙең илдә кешеләр әллә ни йылмайып бармай икән (күп йылмайма - алйот тип әйтерҙәр, тигән әйтем барлығы тураһында өндәшеп торманым инде).

**➔ Һүҙҙе Мальдивия килене Алмагөл дауам итә.**

- Мин Нижневартовск ҡалаһында тыуғанмын. Атай-әсәй хаҡлы ялға сыҡҡансы беҙ Себер тарафтарында йәшәнек. Бөгөн Бөрйәндә йәшәйбеҙ. Мин Төмән дәүләт университетының сит ил телдәре бүлегендә белем алдым. Мальдивияға турфирма юлламаһы менән барҙым. Һәм бына ошо илдә алтынсы йыл эшләйем. Шахил менән бер турфирмала эшләйбеҙ. Уның менән дүрт йыл самаһы дуҫлашып йөрөнөк. Аллаһы Тағәлә шулай ҡушҡандыр инде. Бына бөгөн беҙгә Бөрйәндә мәсеттә никах уҡынылар. Никах тураһында таныҡлыҡ бирҙеләр. Ошо изге эште башҡарған Рәмил хәҙрәткә оло рәхмәт. Беҙҙе матур ҡаршы алған, беҙгә никах туйы ойоштorған атайым-әсәйемә (Хәмит һәм Резеда Ҡолдәүләтовтар), Рәйлә өләсәйемә һәм башҡа барлыҡ-барлыҡ туғандарыма оло рәхмәтемде еткерәм.

Мальдивия тураһында шуны өҫтәр инем. Унда халыҡ бик тырыш һәм эшсән. Үҙҙәренең дине, иле, халҡы, тарихы, тәбиғәте менән ныҡ ғорурланалар. Илдә ололарҙың һүҙе, уларҙың тәрбиәһе ныҡ көслө. Дини йолаларҙы һәм байрамдарҙы юғары кимәлдәрҙә үткәрәләр. Халыҡта милләт тойғоһо көслө. Ҡайһы берәүҙәр мальдивияларҙы башҡа милләт менән (әйтәйек, индустар менән) бутап ҡуя. Был хәлде улар ауыр кисерә. Ябайыраҡ итеп аңлатҡанда, башҡортто татар менән, үзбәкте ҡырғыҙ менән бутаған һымаҡ килеп сыға. Утрауҙарға йыл әйләнәһенә ял итергә киләләр. Урындағы халыҡ сит илдәрҙән күп килеүселәргә ҡарап, беҙҙең ил иң матуры, тип иҫәпләй. Мальдивия утрауҙары оҙаҡ йылдар буйына башҡа илдәргә буйһоноп йәшәргә мәжбүр булған. Шуға күрә үҙаллылыҡ алған көндө иң оло байрам итеп үткәрәләр. Байрам иткән ваҡытта йырлайҙар, бейейҙәр һәм, шуныһы үҙенсәлекле, бер-береһенә ҡоро төҫлө буяу ташлайҙар.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ҡыҫҡаса әңгәмә ошонoң менән тамам. Уның маҡсаты - Мальдивия утрауҙары тураһында мәғлүмәт еткереү, зиһен-белем киңәйтеү ине. Һүҙемде йомғаҡлап, шуны әйтке килә. Еребеҙҙе һаҡлайыҡ! Динебеҙҙе ҡәҙерләйек! Ололарҙы хөрмәт итәйек! Таҙа һыуыбыҙҙы тәләфләмәйек! Тәбиғәтебеҙҙе юғалтмайыҡ! Телебеҙҙе һаҡлайыҡ! "Йәшел йылан" яғына әйләнеп тә ҡарамайыҡ! Илебеҙ-милләтебеҙ, тип ғорурланып йәшәйек! Һәм, әлбиттә, ҡыҙҙарыбыҙҙы ситкә ебәрмәйек. Иншаллаһ, шулай булһын!**

**Әғләм ШӘРИПОВ**
**әңгәмәләште.**

*ӨФӨ БАШҠОРТО*

# КИЛӘСӘКТӘ ЛӘ...

## башҡорт мөхитле ғаиләлә йәшәһәм ине



**Тәү ҡарашҡа тал сыбығындай һомғол был ҡыҙ баҙнатһыҙ, ҡыйыуһыҙ кеүек күренә. Әммә уның сәхнәгә сығып баҫыуы була - бөтөнләй икенсе образ күҙ алдына баҫа: ул үҙенең асылына ҡайта һымаҡ. Юҡҡа ғына башҡорт ҡыҙҙары ир-егеттәр менән бер рәттән уҡ атмаған, һыбай сапмаған, кәрәк икән илен яҡламаған бит. Тап сәхнәлә уның ошо башҡорт асылы ла инде. "Йәшлек-шоу 2014" йыр конкурсында "Өмөт" номинацияһына эйә була, "Гәлсәр һандуғас-2017" конкурсы еңеүсеһе (1-се урын), "Алтын-2018" йыр конкурсы лауреаты. 2017 йылда "Юлдаш" плюс йәштәр интернет радиоһы ойошторған хит- парад еңеүсеһе. Йылайыр районында үткән Ишмулла Дилмөхәмәтов исемендәге музыка ҡоралдарында уйнаусылар конкурсы лауреаты. Республика кимәлендә, Санкт-Петербургта үткән йыр конкурстарында ла әүҙем ҡатнашып, призлы урындар яулаусы. Ғөмүмән, уның башҡарыуында йырҙар Башҡортостан радиоһы һәм телевидение тулҡындарында яңғырап тора. Кем икән, тип баш ватаһығыҙмы? БДУ-ның башҡорт филологияһы, шәрҡиәт һәм журналистика факультеты магистранты (2-се курс), "Йәнгүзәл" фольклор ансамбле ағзаһы Гөлйемеш ҠЫЛЫСОВА бөгөн беҙҙә ҡунаҡта.**

**Борон башҡорттар һәм әле лә оло-лар танышыуҙы "Кем балаһы була-һың?" тип башлай. Гәзит уҡыусылар-ҙы үҙегеҙ менән таныштырыуҙан баш-лайыҡ әле**

- Мин Өфөлә республика йыр сәнғәтен һөйөүселәргә таныш булған, йырҙары радио аша яңғырап торған Мирсәйет Ҡылысов менән "Ашҡаҙар" радиоһы журналисы Фәнүзә Баһаутдинова ҡорған ғаиләләге ике ҡыҙҙың олоһо булам. 2-се синыфта уҡығанда ғаиләбеҙ менән баш ҡала күләмендәге төрлө ижади бәйгеләрҙә ҡатнаштыҡ. Шуларҙың береһендә сығыш яһар өсөн атайым яҙған шиғыр юлдары ғүмерлеккә иҫтә ҡалды... Әле һеҙ биргән һорауға ла яуап ошо юлдарҙа тип уйлайым:

- Беҙ думбыраның ҡылдары,
Башҡортостан ҡыҙҙары!
Атайыбыҙ - ғорур үҫәргән,
Әсәйебеҙ - юрматы.
Матурлыҡты яратабыҙ,
Насарлыҡҡа беҙ ҡатыбыҙ!

**Афарин! Бөгөн башҡорт телен ғаилә теле тип кенә баһалаусылар ҙа бар. Был фекергә ҡарата нимә әйтер инегеҙ? Башҡорт теле һеҙгә көндәлек тормошта кәрәкме һәм эшегеҙҙә ярҙам итәме?**

- Әйтеп үтеүемсә, атай-әсәйебеҙ икеһе лә тамырҙары менән башҡорт, шуға ниндәй телдә һөйләшергә тигән һорау тыумай - ғаиләлә рәхәтләнеп башҡортса һөйләшәбеҙ. Көндәлек тормошта иһә ике телде лә ҡулланырға тура килә. Әлбиттә, ике тел белеү файҙаға ғына, ул уҡыуҙа ла, эштә лә ярҙам итә. Үҙем йыр сәнғәтен үҙ иткәнлектән, башҡорт, рус һәм инглиз телдәрендә йырлайым. Башҡорт телен белеүем тағы ла кинерәк мөмкинлектәр аса: төрлө йыр бәйгеләрендә ҡатнашам һәм Башҡорт дәүләт университеты студенттарын ижади бәйгеләргә әҙерләйем. Башҡортостанда тыуып үҫкән һәр башҡорт туған телен белергә тейеш тип иҫәпләйем.

**Урал, тиһәң, башҡорт өсөн ул шунда уҡ Ватан, тыуған ер, тыуған төйәк, йәғни йәнеңән дә ҡәҙерле ер булып күҙ алдына баҫа. Өфө тигәндә күңелегеҙҙә ниндәй хистәр тыуа?**

- Өфө - минең тыуған ҡалам. Ошонда тыуған йортом, мәктәбем, класташтарым-дуҫтарым... Ошонда юғары белем алдым. Ситкә сыҡһам, һағынып ҡайтам. Өфө - минең өсөн иң матур, йәмле ҡала!

**Өфө ҡалаһында башҡорт мөхите етерлекме, әллә тағы ла ниндәйҙер эштәр башҡарырға мөмкинме?**

- Күрше-тирә ҡалалар менән сағыштырғанда, Өфөлә башҡорт мөхите күберәк, әлбиттә. Шулай ҙа ошо булғанын ҡәҙерләп, тағы ла яңы проекттар өҫтәп, гранттар отоп, башҡорт мөхитен киңәйтеү ҡамасауламаҫ ине. Һәм йәштәрҙе әүҙемләштереү кәрәк тип уйлайым. Был йәһәттән дөйөм үҙәк булдырып, төрлө форумдар, ижади бәйгеләр, оло шәхестәребеҙ менән осрашыуҙар ойоштороп, быуындар бәйләнешен һәм республика райондарында йәшәүсе һәләтле йәштәр менән арала-шыуҙы нығытырға кәрәк. Ауыл йәштәре өсөн баш ҡала ишектәрен асырға ярҙам итергә, Өфө ҡала йәштәре бергә йыйылыу маҡсатында осрашыу урындары, күберәк милли байрамдар ойоштороға ине. Рухлы милли кадрҙарҙы үҫтереүҙә лә иғтибарҙан ситтә ҡалдырырға ярамай. Һәр шәхес үҙенең артынан бер генә булһа ла уҡыусыһын тәрбиәләп ҡалдырһа, башҡорт мөхите һаҡланыр ҙа, артыр ҙа, рухлы быуындар сылбыры ла өҙөлмәҫ.

**Элек баш ҡалала 20-се ҡала мәктәбе башҡорт балалары белем алған берҙән-бер белем усағы ине. Һеҙгә ниндәй мәктәптә уҡырға тура килде?**

- Әсәйем юғары белем алғандан һуң хеҙмәт юлын тап шул мәктәптә башлаған. Ләкин беҙҙе, Гөлгөнә һеңлем менән мине, ул мәктәпкә бирергә ашыҡманылар. Сөнки, берҙән, юл йөрөүе йыраҡ; икенсенән, йәшәгән йортобоҙға терәлеп тигәндәй 128-се мәктәп урынлашҡан. Мин ошо Затон биҫтәһенең Хәрби ҡаласығындағы мәктәптә белем алдым. Был белем усағында хеҙмәт итергә илебеҙҙең төрлө тарафтарынан йыйылған хәрбиҙәрҙең ҡатындары уҡыта. Улар төрлө милләттән, башҡорт телен бөтөнләй белмәйҙәр. Ә шулай ҙа мәктәптә башҡорт теле дәрестәре булды, ә өйҙә гелән башҡортса һөйләштек. Ҡайһы саҡта телгә рус һүҙҙәре килеп инһә, әсәйем: "Русса һөйләй башлаһаң, таҙа итеп һөйләмен-дә тик русса һөйләп бөт; башҡортса башлағанһың икән, бер рус һүҙен дә ҡыҫтырмай, таҙа, асыҡ итеп тик башҡортса һөйлә", - тип талап итә ине. Бәлки, ике телдә лә таҙа һөйләшеүҙең сере лә шундалыр. Тағы ла балалар баҡсаһында башҡорт төркөмөндә тәрбиәләндем. "Йәйләү" республика балалар лагерында ял иттем.

**Башҡорт теле тәрбиә биреүҙә ниндәй роль уйнай?**

- Башҡорт теле башҡа халыҡтар араһында минең кемлегемде билдәләй. Телде белеү, тимәк, башҡорттоң һанап бөткөһөҙ йолаларын да белеү. Ә беҙҙең һоҡланғыс йолаларыбыҙ тик ыңғай, матур тәрбиә нигеҙе булып тора.

**Башҡорт телен өйрәнеү өсөн мөхит кәрәкме, әллә теләкме, тәрбиәме?**

- Өс төшөнсә лә кәрәктер ул... Ләкин өйҙә алған тәрбиә ҙурыраҡ роль уйнайҙыр тим. Һәм туған телгә һөйөү ғаиләлә генә тәрбиәләнә тип уйлайым. Шуға, рус мәктәбендә уҡыйым, тигән булып, үҙ телен белмәгәндәрҙе аңламайым, аптырайым.

**Кемдер, мин - башҡорт, тип күкрәк һуға һәм милләт өсөн файҙаһы шуның менән бөтә, кемдер шым ғына милләтте күтәреү өсөн ҙур эштәр башҡара. Заман башҡорто һәм Өфө башҡорто ниндәй сифаттарға эйә булырға тейеш?**

- Тәү сиратта, белемле булырға тейеш! Заман талаптарынан ҡалышмай, заман менән бергә атларға, зирәк, һәләтле, ҡыйыу, тәүәккәл һәм тапҡыр булыу кәрәк. Мин - башҡорт, тип күкрәк һуҡмай ғына һәр ғаилә үҙ балаларын башҡорт рухында тәрбиәләп, туған телен өйрәтһә, һөҙөмтәһе лә күберәк булыр ине. Мәктәптән талап итеп, көтөп ултырырға түгел, туған телгә һөйөү тик ғаиләлә, атай-әсәй янында, өләсәй-картатай эргәһендә тәрбиәләнә, тип һис икеләнеүһеҙ әйтә алам.

**Бөгөн күптәр үҙенең юлын таба алмай ҡаңғыра, шул уҡ ваҡытта һеҙ - йәш лидер. Был тормошта үҙ-үҙенде, үҙ юлыңды нисек табырға?**

- Мин әле үҙем дә эҙләнеү юлындамын. Үҙеңде төрлө өлкәлә һынап ҡарарға кәрәк тип уйлайым. Һәм йылап тәжрибә туплап, үҙ телəгемә, маҡсатыма өлгәшермен тип өмөтләнәм. Ә, бәлки, яҙмыш үҙе йөрөтәлер кешене, тигән уйҙар ҙа тыуып ҡуя. Юҡҡа ғына, Аллаһы Тәғәләнең беҙҙең һәр ҡайһыбыҙға үҙ планы бар, тимәйҙәр бит. Тимәк, уның һабаҡтарын алырға тейешбеҙ.

**Әгәр тылсымсы булһағыҙ...**

- Бөгөн тәү сиратта тажзәхмәтте бөтөрөр инем һәм башҡорт балаларына тел асҡысы таратыр инем!

**Киләсәккә ниндәй хыялдар менән йәшәйһегеҙ?**

- Хыялһыҙ кеше булмай, әммә ул сер булып ҡалһын. Әммә, ябай ҙа, шул уҡ ваҡытта мөҡәддәс тә бер теләгем бар: үҙ ғаиләмдә лә башҡорт мөхитендә дауам итһәм ине.

**Зәйтүнә НИҒӘМӘТЙӘНОВА**
**әңгәмәләште.**

*ҮӘТ, ҠЫҘҘАР!*

# СПОРТСЫ



**Ошо көндәрҙә Венгрияның баш ҡалаһында 23 йәшкә тиклемге юниорҙар араһында Европа беренселеге уҙҙы. Унда Рәсәй намыҫын яҡлаусы спортсылар көмөш миҙал яулап ҡайтты. Илдең йыйылма командаһында Силәбе өлкәһе Ҡоншаҡ районы Һары ауылынан милләттәшебеҙ Динә Ғиззәтуллина ла бар.**

Рәсәй йыйылма командаһы Төркиә спортсыларын 4:3, Австрияны 4:1 мәрәйҙәре менән еңде. Ләкин "алтын" өсөн бәйгелә быға тиклем француз һәм венгрҙарҙы ҡыйратҡан Грузия командаһына 2:4 менән еңелде. Һөҙөмтәлә, Рәсәй спортсылары көмөш миҙалға лайыҡ булды. Ҡатнаш йыйылма команда составында тәүге тапҡыр Европа беренселегендә дзюдо буйынса сығыш яһаған Динә Ғиззәтуллина өс матчта ла көрәште. Сирекфиналда ул төрөк ҡыҙын еңде, ләкин ярымфиналда Австрия спортсыһынан артта ҡалды. Шулай ҙа финал барышында 2019 йылда ошо уҡ ярыштарҙа төп еңеүсе тип табылған Грузия спортсыһынан таһылыраҡ булып сыҡты.

Әйткәндәй, Европа кимәлендә тәүге еңеүе булһа ла, 21 йәшлек Динә Ғиззәтуллина күптән Рәсәйҙең атҡаҙанған спорт мастеры, ул быйыл ҡатын-ҡыҙҙар араһында Рәсәй чемпионы һәм Бойондороҡһоҙ Дәүләттәр Берләшмәһе илдәренең тәүге Уйындары чемпионы. Йәш спортсы Рәсәйҙең атҡаҙанған тренеры, Силәбе өлкәһе башҡорттары ҡоролтайы рәйесе Морис Йосопов етәкселегендә шөғөлләнә.

# СТУДЕНТ



**Красноярскиҙа XV "Мисс Азия-Себер - 2021" милләт-ара матурлыҡ һәм талант конкурсы уҙҙы.**

Башҡортостандан унда "Мисс Республика - 2021" конкурсы еңеүсеһе, М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты студенты, 21 йәшлек Илүзә Иҫәндәүләтова ҡатнашты. Конкурс һынауҙарын үтеп, Илүзә "1-се вице-мисс Азия-Себер - 2021" исеменә лайыҡ булды. Конкурста Тыва, Яҡутстан, Татарстан, Хакасия, Алтай, Монголия, Бурәтстан, Башҡортостан ҡыҙҙары ҡатнашты. Улар рус һәм туған телдәрендә үҙҙәре, тыуған төйәге, үҙ халҡының бөйөк ҡатын-ҡыҙҙары менән таныштырҙы. Һәр береһе милли ижади номер күрһәтте. Шулай уҡ милли кейемдәрҙә һәм киске күлдәктәрҙә дефиле ойошторолдо.

✔ *Был ойошмала карьера баҫҡысы буйлап күтәрелеүең тик үҙеңдән тора. Әгәр тырышлыҡ, ныҡышмалылыҡ булһа, һәр яңы белемгә асыҡ булһаң, эшеңде сифатлы һәм урын еренә еткереп башҡарһаң, компания быны күрә һәм баһалай.*



*ИНТЕРНЕТТАН*



# ИР ҺӘМ ҠАТЫНҒА КӘҢӘШ

■ Ғаиләлә һауыт-һаба шалтырамай тормай. Гарвард университеты ғалимдары бындай саҡта ир менән ҡатынға бергә ултырып башватҡыс сисергә тәҡдим итә. Баш мейеһе әүҙем саҡта кеше үпкәләүҙәрен тиҙерәк онотоп, барыһын да ғәфү итергә һәләтле була икән. Был исул ғаиләне һаҡлап ҡалыуҙа үҙенсәлекле сара булыр ине, ти ғалимдар. Төрлө тикшеренеүҙәрҙе өйрәнеп, психологтар ҡыҙыҡлы һығымталарға килгән. Бәҡтиһән, хис-тойғоларын контролдә тота алған кешеләрҙең баш мейеһе ҡабығының маңлай һөйәге алды арауығының ситке өлөшө әүҙемләгә ҙурыраҡ була икән. Ә бына был әүҙемлекте күтәреү бигерәк ябай - йомаҡтар, башватҡыстар менән баш мейеһенең был өлөшөн "эшләтеп" ебәрергә була, был саҡта кеше ваҡиғаларға тойғолар менән түгел, ә аҡыл менән баһа бирә башлаясаҡ.

■ Йыш ҡына матди байлыҡ артынан ҡыуыусылар етеш тормош менән бәхет тә килер, тип өмөтләнә. Яңы тикшеренеү күрһәтеүенсә, бындай кешеләрҙең юғары эш хаҡы түләнгән вазифаларға, уңыштың башҡа атрибуттарына мөмкинлектәре ҙурыраҡ булһа ла, уларҙың барыһы ла бәхетле һәм оҙон ғүмер кисерергә һәләтле түгел. Нотр-Дам университеты эргәһендәге бизнес мәктәбе ғалимдары үткәргән һынауҙарҙа 717 кеше ҡатнашҡан, уларҙы бала саҡтан уҡ күҙәткәндәр. Был кешеләрҙең аҡыл кеүәһе юғарыраҡ булыуы сәбәпле, күптәре колледж һәм университеттарҙа ғилми дәрәжә алған, табип йәки профессор сифатында вазифалар биләгән. Араларында урта мәктәпте һәм ҡала колледждарында ғына белем алыусылар ҙа бар. Экспериментта йәшәйештең 5 өлкәһе - эш, ғаилә, ял итеү, сәләмәтлек һәм тормоштан "ҡәнәғәтлек тойоу" баһаланған. Ҡатнашыусыларҙың күбеһе 45 йәштә һәм улар карьераһының иң күтәренке мәле булған. Тикшеренеү авторҙары билдәләүенсә, амбициялы ҡатнашыусылар матди йәһәттән уңышлыраҡ, улар билдәле университеттар тамамлаған, яҡшы эштә эшләгән, юғары эш хаҡы алған. Әммә уларҙың ғүмер оҙайлығы ялҡауҙарҙың ғүмер оҙайлығынан артыҡ түгел. Етмәһә, ҙур теләктәре булып та, мәҫәлән, карьера эшләй алмаусылар үҙҙәрен күпкә бәхетһеҙ тойған.

■ Бөтөн Рәсәй онлайн һорау алыуҙар һөҙөмтәләре күрһәтеүенсә, төрлө компанияларҙа эшләүселәр эш урынында тағы ла уңышлыраҡ булыу өсөн үҙҙәренең тышҡы ҡиәфәтен үҙгәртеүгә лә ризалашҡан. Мәҫәлән, хирург бысағы аҫтына ятыусыларҙың 50 проценты быны психологик комфорт өсөн эшләгән, 20 проценты тышҡы ҡиәфәтендәге етешһеҙлектәр карьера эшләүгә ҡамасаулай, тип иҫәпләгән. 5 процент респонденттар тотлоғоу, ҡылый күҙлелектән арынған. Ҡалғандар кейенеүҙе, үҙендә тотоуҙы үҙгәртергә генә ризалашҡан. 10 процент яуап биреүсе татуировка, пирсингтарынан ҡотолған. Бына пластик хирург ярҙамына мөрәжәғәт итеүселәр араһында күкрәктәренең үлсәмен ҙурайтыусылар ҙа байтаҡ.

*ШУНДАЙ ҺӨНӘР БАР!*

# ТИМЕР ЮЛСЫЛАР ДИНАСТИЯҺЫНАН



**Поездың рельстар буйлап хәүефһеҙ һәм ышаныслы хәрәкәт итеүен әллә нисә тиҫтә белгес тәьмин итә. Улар араһында поезд машинисы, уның ярҙамсыһы, юл монтеры, ревизор һәм башҡа күп төрлө һөнәр эйәләре бар. Йәмғиәттә тимер юлында күпселек ир-егеттәр эшләй, ә ҡатын-ҡыҙҙар иһә вагон оҙатыусыһы, кассир һәм ҡала-ара яны поезында билет һатыусы йәки тикшереүсе булып ҡына эшләй, тигән фекер төплө урын алған. Ләкин ҡорос магистралдә төрлө вазифала меңәрләгән гүзәл зат хеҙмәт итә. Бөгөнгө әңгәмәсебеҙ - "Рәсәй тимер юлдары" ААЙ филиалы - Куйбышев тимер юлының Башҡортостан төбәгенә ҡараған Йөйәк тимер юлы станцияһы етәксеһе булып эшләүсе Айһылыу Йәүҙәт ҡыҙы ҒҮМӘРОВА менән ҡатын-ҡыҙҙың тимер юлында эшләү үҙенсәлектәре хаҡында һөйләшәбеҙ.**

**➔ Һайлаған һөнәр кешенең яҙмышын билдәләй, тиҙәр. Һеҙҙең тимер юлына эшкә килеүегеҙ нисек булды?**

- Белорет районының бейек таулы, ҡуйы урманлы төбәгендә урынлашҡан Йөйәк ауылында ғаиләлә алтынсы бала булып донъяға килдем. Атайым оҙаҡ йылдар тимер юлында эшләп, бригадир вазифаһында хаҡлы ялға сыҡты. Беҙҙең төбәктә күптәр тимер юлында эшләне һәм әле лә эшләй. Дөрөҫөн әйткәндә, тимер юлы Белорет районының ошо төбәгендә иң эре, тотороҡло һәм ышаныслы эш биреүселәр араһында төүге урында тора. Беҙҙә лә, күрше ауылдарҙа ла күптәр ошонда эшләй. Шуға күрә буласаҡ һөнәр һайлау мәле килеп еткәс, нәҡ тимер юлы өлкәһенә ҡараған һөнәр үҙләштерергә теләүемә аптырайһы түгел.

Мәктәпте тамамлағас, 1983 йылда Өфө тимер юлы техникумына уҡырға барҙым һәм өс йылдан дипломлы белгес булып, тыуған ауылыма эшкә ҡайттым. Мине станция буйлап дежурлыҡ итеүсе итеп тәғәйенләнеләр. Бәләкәйҙән был өлкәләге эш тураһында ата-әйымдан, туғандарымдан ишетеп-белеп үҫкәс, эште башлап китеү ауыр булманы. Хеҙмәттәштәрем дә һәр саҡ ныҡлы терәк булып, үҙҙәре белгәнде өйрәтеп кенә торҙо.

**➔ Хәҙер һеҙ Йөйәк станцияһында етәксе вазифаһын башҡараһығыҙ. Һеҙҙең алға ниндәй бурыстар ҡуйылған? Уларҙы атҡарып сығыу өсөн тимер юлы хеҙмәткәре ниндәй һыҙаттарға эйә булырға тейеш?**

- Станция етәксеһе булып 2018 йылдан эшләйем. Минең вазифама Йөйәк тимер юлы станцияһы эшмәкәрлеген ойоштороу инә. Асыҡлап әйткәндә, поезд хәрәкәте хәүефһеҙлеген тәьмин итеү, пассажирҙарҙың һаулығын һәм ғүмерен һаҡлау бурысы тора алдымда. Эш режимы нормалаштырылмаған, йәғни мин һәр саҡ үҙемдең хеҙмәти бурыстарымды үтәргә әҙер булырға тейешмен. Тимер юлында һәр эш, һәр аҙым билдәләнгән ваҡытта, минутына тиклем теүәл башҡарала. Бөтә эшселәрҙең дә ошо ҡағиҙәне теүәл үтәүе тимер юлының пассажирҙарға һәм йөк оҙатыусыларға сифатлы хеҙмәт күрһәтергә булышлыҡ итә. Ә бының өсөн тимер юлында эшләгән һәр кешенең бер-береһе менән тығыҙ бәйләнештә эшләүе һәм үҙ эшенә яуаплы ҡарауы шарт. Эш көсөргәнешле, яуаплы, һәр ваҡыт уяу, теремек булырға, килеп тыуған һорауҙарҙы тиҙ арала хәл итә белергә кәрәк. Коммуникабеллек һәм стрестарға ҡаршы тора алыу тимер юлында оҙаҡ йылдар эшләү өсөн иң кәрәкле сифаттар рәтендә.

**➔ Һөнәри яҡтан үҫеш туктап ҡалмаһын өсөн эш биреүсе компания тарафынан ниндәй мөмкинлектәр бирелә?**

- Был йәһәттән Рәсәй тимер юлдары компанияһы ҙур эшмәкәрлек алып бара. Мәҫәлән, мин һәр саҡ, үҙемдең үҫеш өҫтөндә эшләргә кәрәк, тигән фекерҙәмен. Был үҫеш ваҡыты-ваҡыты менән генә түгел, ә даими рәүештә алып барылыуы айырыуса яҡшы. Шуға күрә мин тимер юлында хеҙмәт итеүселәр өсөн махсус булдырылған сервистағы уҡытыу курстары менән ихлас ҡулланам. Был курстарҙа үҙең теләгән ваҡытта, мөмкинлегеңә ҡарап инеп, төрлө темаларға белемде киңәйтергә, һөнәри яҡтан оҫталыҡты арттырырға мөмкин. Уларҙың дистанцион һәм бушлай булыуы айырыуса һәйбәт.

Был ойошмала карьера баҫҡысы буйлап күтәрелеүең тик үҙеңдән тора. Әгәр тырышлыҡ, ныҡышмалылыҡ булһа, һәр яңы белемгә асыҡ булһаң, эшеңде сифатлы һәм урын еренә еткереп башҡарһаң, компания быны күрә һәм баһалай. Йәш белгестәр өсөн профессиональ яҡтан үҫеү мөмкинлеге ҙур. Әйтәйек, юл монтеры булып эшкә килгән йәш егеттәр, теләге булып тейешле белем алһа, үҙен яҡшы яҡтан күрһәтһә, уны һис икеләнмәй етәксе вазифаға тиклем үрләтергә мөмкиндәр. Был йәһәттән Рәсәй тимер юлында асыҡ һәм аңлайышлы сәйәсәт алып барыла - эш рәтен белгәндәргә юлдар һәр саҡ асыҡ.

**➔ Тимер юлында эшләү еңелдән түгел. Ошондай ғәйәт ҙур, иңендә пассажирҙар һәм йөктәр өсөн оло яуаплылыҡ ятҡан компанияла гүзәл заттар ниндәй вазифалар башҡара?**

- Минең коллегаларым араһында төрлө һөнәрҙе үҙ итеп, тимер юлында уңышлы эшләп йөрөгән ҡатын-ҡыҙҙар бихисап. Мәҫәлән, станция буйынса

*ФӘҺЕМЛЕ ХИКӘЙӘТТӘР*

# НӘУАДИР ТӘРЖЕМӘҺЕ

**XIX-XX быуат саттарында милли мәҙәниәт өлкәһендә тәрән эҙ ҡалдырыусыларҙың береһе, билдәле башҡорт уҡымышлыһы Хәбибназар Үтәки ғәрәп әл-Ҡолйубиҙың "Нәуадир" йыйынтығын төрки теленә ирекле тәржемәлә баҫтырып сығара. Уның "Нәуадир тәржемәһе" китабы XIX-XX быуат башҡорт мәғрифәтселек әҙәбиәтенең айырылғыһыҙ биттәрен тәшкил иткән әһәмиәтле ҡомартҡы булып тора. Ошо китаптан ҡайһы бер фәһемле хикәйәттәрҙе "Киске Өфө" гәзитен уҡыусыларға тәҡдим итәбеҙ.**

### Яҡшы тип уйлауҙың...

Бер нисә уғры юл баҫыу өсөн кис менән юлға сыҡҡан. Төндә үткәреү өсөн яланда мосафирҙар өсөн һалынған йортҡа килеп ишек ҡаҡҡандар. "Беҙ Аллаһы Тәғәлә юлында һуғыш ҡылып йөрөүсе бәндәләрбеҙ, өйөгөҙҙә төн үткәрергә теләйбеҙ, рөхсәт итһәгеҙ, инер инек", - тиҙәр. Өй хужаһы уларға өйөнә инергә рөхсәт итә һәм ҡәҙер-хөрмәт күрһәтә. Өй хужаһының бер аяҡһыҙ улы була. Мосафирҙарҙан ҡалған тәғәмде ир ҡатынына бирә һәм: "Яҡшы бәндәләрҙән ҡалған тәғәмде балаңың аяғына буя әле, иншалла, төҙәлер", - ти. Ҡатын һөйөнөп, шул тәғәмде улының аяҡтарына һөртә. Таң атыу менән уғрылар бының өйөнән сығып китәләр, йорттарҙы талап, маллы булып, кисен тағы уларға киләләр. Шул саҡ үткән кистә аяҡһыҙ булған уғылдың йүгереп йөрөгәнен күрәләр һәм хужанан: "Кисәге аяҡһыҙ улың ошомо? Ул нисек төҙәлде?" - тип аптырап һорайҙар. Ир шатланып: "Аяҡһыҙ уғылым ошо, аяғына һеҙҙән ҡалған тәғәмде һөрткәйнек, һеҙ яҡшыларҙың бәрәкәтендә икәнһегеҙ, Аллаһы Тәғәлә сәләмәтлек бирҙе!" - тип яуап ҡайтара. Шул һүҙҙәрҙе ишеткәс, уғрылар илай-илай ғәфү үтенеп: "Әй, фәлән, беҙ һин уйлаған яҡшы кешеләр түгел, ә уғрылар һәм гонаһ эшләүселәрбеҙ, юл баҫырға сыҡҡайныҡ. Ләкин һин беҙҙе яҡшы кешеләр тип уйлауың сәбәпле, Аллаһы Тәғәлә балағыҙға сәләмәтлек биргән. Бынан һуң беҙ төүбә ҡылабыҙ, насар юлда йөрөүҙе туҡтатабыҙ", - тигәндәр. Шул ваҡыттан уларҙың һәр ҡайһыны төүбә һәм ғәфү ҡылып, яҡшыларҙан булып, артабан Аллаһы Тәғәлә юлында һуғыш ҡылыусы булып киткәндәр.

✓ *Үҙеңде үҙгәртеү буйынса махсус алымдар бар. Үҙеңде уңышлы кешеләр менән бергә күҙаллау, үҙеңдең тәртибеңдә, һөйләшеүеңдә, уйҙарыңды уларға оҡшатырға тырышыу уңыш килтерә. Аҙымдарың еңеүсенекеме, әллә еңелеүсенекеме?*



дежур итеүсе, тимер юлы вокзалы етәксеһе һәм уның ярҙамсыһы, диспетчер, ревизор-контролер, багаж һәм йөктәрҙе ҡабул итеүсе, сигнал биреүсе (сигналист), элемтәсе, электромеханик һәм башҡа һөнәр эйәләре бар. Шулай уҡ хәҙер ҡатын-ҡыҙҙар араһында хатта машинист ярҙамсыһы һәм машинист булып эшләүселәр ҙә бар. Куйбышев тимер юлының Башҡортостан төбәгендә, мәҫәлән, Алена Миронова исемле ҡыҙ машинист ярҙамсыһы булып бик тә уңышлы эшләп йөрөй. Ә бөтә Рәсәй буйлап бөгөнгө көндә 50-нән ашыу ҡатын-ҡыҙ машинист ярҙамсыһы кеүек ҡатмарлы һәм яуаплы һөнәрҙе үҙләштергән.

**➔ Эш биреүсе булараҡ, "Рәсәй тимер юлдары" компанияны ҡатын-ҡыҙҙарға ниндәй хеҙмәт шарттары булдырған?**

- Компанияла эшләүсе хеҙмәткәрҙәрҙең 30 процентын ҡатын-ҡыҙҙар тәшкил итә. Беҙҙең эш шарттары карьера үҫеше менән ғаилә араһындағы тигеҙлекте һаҡлау мөмкинлеге бирә. Шулай уҡ компанияла ҡатын-ҡыҙҙарҙы социаль яҡлау системаһы ла киң үҫешкән. Рәсәй тимер юлдарында бөтә эшселәрҙең һәм шул иҫәптән ҡатын-ҡыҙҙарҙың да хеҙмәт шарттарын яҡшыртыу буйынса даими эш алып барыла, медицина хеҙмәтләндереүе яҡшы, спорт менән шөғөлләнеү өсөн бөтә уңайлыҡтар тыуҙырылған. Бөтә ил буйлап ил итеү йорттарына, балалар өсөн лагерҙарға путевка, һаулыҡҡа ҡағылышлы даими үткәрелеп торған аңғәмә, лекция, консультациялар, йәш белгестәр өсөн ташламалы ипотека, мәҙәни саралар ҙа ҡатнашыу мөмкинлеге һәм башҡа күп төрлө социаль гарантиялар менән ҡуллана ала тимер юлында эшләүсе ҡатын-ҡыҙҙар һәм бөтә хеҙмәткәрҙәр.

Әсәлеккә һәм балалыҡҡа финанс йәһәттән ярҙам ҙур. Атап әйткәндә, йөклөлөк һәм бала табыу буйынса пособиены уртаса эш хаҡына тиклем еткереү өсөн өҫтәмә түләү, бала тыуғанда матди ярҙам, 1,5 йәштән 3 йәшкә тиклем бала ҡарап өйҙә ултырыусыларға айлыҡ түләү һәм башҡа төрлә аҡсалата ярҙамды билдәләп үткем килә. Шулай уҡ тотҡарлыҡһыҙ түләнгән һәм даими индексацияланған эш хаҡы ла тимер юлында эшләүселәр өсөн ҙур әһәмиәткә эйә.

**➔ Һеҙҙең ял-төн тимәй эшкә саҡырылыу мөмкинлеген ғаиләгеҙҙә нисек ҡабул итәләр?**

- Беҙҙең ғаиләлә барыһы ла ошо режимда йәшәй. Әйтеп үтеүемсә, атайым был өлкәлә оҙаҡ йылдар эшләне. Ағайым "Почетлы тимер юлы эшсеһе" тигән маҡтаулы исем алып, хаҡлы ялға сыҡты. Тағы ла бер ағайым машинист булды, үкенескә күрә, донъянан иртә китте. Ирем, улым Рәмис тә шулай уҡ тимер юлы эшселәре. Шуға күрә беҙ бер-беребеҙҙең эшен яҡшы аңлайбыҙ һәм эшкә бәйле ниндәйҙер аңлашылмаусанлыҡтар килеп тыумай. Ғөмүмән, ниндәй өлкәлә лә ғаилә ағзалары бер-береһенә терәк һәм таяныс булмаһа, эшләүе ауырға тура килә. Ирем һәм улым минә коллега булғас, үҙемде эш йәһәтенән борсоған һорауҙарҙы улар менән бүлешәм һәм һәр саҡ төплә, аңлайышлы кәңәштәр алам. Шөкөр, эшем менән дә, ғаиләм менән дә бәхетлемен.

Әйткәндәй, мин үҙемде, ауыҙ тултырып, тимер юлсылар династияһы вәкиле тип әйтә алам, сөнки әлеге ваҡытта һеңлем һәм 2 энем Өфөлә шулай уҡ тимер юлында уңышлы эшләп йөрөйҙәр.

**➔ Тимер юлында осраҡлы кешеләр булмай, тигән фекер менән килешәһегеҙме?**

- Ысынлап та, тимер юлы бер аҙ эшләп, унан китеп, аҙаҡ тағы кире килеп йөрөй торған өлкә түгел. Бында бер тапҡыр килгән кеше йә эшенә берегеп, уны яратып, бар күңелен һалып, оҙаҡ йылдар эшләй йәки эштең ҡатмарлы, яуаплы булыуына түҙмәйенсә, бөтөнләйгә китә һәм башҡаса килмәй.

**➔ Тимер юлы нимәне "ғәфү итмәй"?**

- Тәү сиратта, үҙеңдең хеҙмәти бурысыңа иғтибарһыҙ, яуапһыҙ ҡарауҙы. Һәр тимер юлы эшсеһенең үҙ вазифаһына ҡарата булған мөнәсәбәте пассажир һәм йөктәр өсөн яуаплылыҡтың бер өлөшөн тәшкил итә. Тимер юлында оҙаҡ йылдар эшләһән дә, "Минең тәжрибә ҙур", тип эште үҙ йәйина ҡуйырға ярамай. Ҡорос магистраль һәр ваҡыт һалҡын ҡанлылыҡты, уяулыҡты, күп бурыстар режимында эшләүҙе, стресҡа ҡаршы тора алыуҙы талап итә. Был сифаттар тимер юлында яңы ғына эш башлаған хеҙмәткәргә лә, әллә нисә тиҫтә йылдар эшләгән кешегә лә берҙәй мөһим. Әҙ генә кәсһеҙлек күрһәткәндә лә, бөтә эш юҡҡа сығырға һәм ошо рәүешле хеҙмәттәштәрҙе һәм компанияны ауыр хәлгә ҡуйырға мөмкин.

**➔ Һеҙ 35 йыл тимер юлында, атап әйткәндә, Йөйәк станцияһында эшләйһегеҙ. Үҙегеҙҙе башҡа һөнәр эйәһе итеп күҙ алдына баҫтыра алаһығыҙмы?**

- Бер тында үтеп китте был йылдар. Әле генә техникум бөтөп эшкә килгән йәш белгес инем, хәҙер үҙем йәштәргә тимер юлында эшләү нескәлектәрен аңлатам. Уларға һәр саҡ "Эштән, ул ниндәй генә ауыр булмаһын, ҡурҡырға ярамай. Ә ҡурҡмаҫ өсөн башҡарған эшеңде яратырға кәрәк", тип ҡабатлайым.

Тимер юлына эшкә килеүемә һәм әле лә ошонда эшләүемә бер ҙә үкенмәйем. Һөнәрҙе яңынан һайларға кәрәк булһа, мотлаҡ кире тимер юлына килер инем. Эшемде күңел һалып башҡарам һәм үҙемде башҡа бер өлкәлә лә күрмәйем. Тормош юлым мине нәҡ ошонда, тимерҙәр араһына, ҡорос магистралгә алып килеүенә, юлымда яҡшы хеҙмәттәштәр осрауына яҙмышыма рәхмәтлемен.

Бөгөнгө мәктәп уҡыусыларына, һөнәр һайлау алдында торған йәштәргә лә ошо өлкәне күҙҙән үткәрергә, төрлө яҡлап өйрәнергә саҡырам, сөнки тимер юлының һәр саҡ буласағына һәм уның әүҙем эшләүенә шикләнмәйем.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Тимер юлы күп өлөштәрҙән торған ғәйәт ҙур комплекс. Һәм уның гелән теүәл һәм өҙлөкһөҙ эшләүендә меңәрләгән тимер юлсыларының һәр береһенең хеҙмәте һалынған. Ирегет булһынмы ул, ҡатын-ҡыҙмы - айырма юҡ, уларҙың барыһы ла үҙ урынында кәрәкле һөнәрмәндәр. Бөгөнгө әңгәмәсем - Айһылыу Йәүҙәт ҡыҙы Ғүмәрова ла бөтә ғүмерен тимер юлына арнаған, оло маҡтауға лайыҡ, йәштәргә үрнәк булған, тимер юлсылар династияһын дауам итеүсе үҙ эшенең оҫтаһы.**

**Гөлназ МАНАПОВА**
**әңгәмәләште.**

## Ғәфү итеп була

Баһрам исемле фарсы падишаһы ғәскәре менән ауға сыҡҡан ваҡытында бер ҡыр ишәген ҡыуып киткән, ти. Ғәскәренән айырылып, йыраҡ ҡына киткән дә, ғәйеп булған. Ишәкте эҙәрлекләп барып тотҡан да, уны боғаҙларға уйлап, атынан төшкән. Шул тирәлә бер көтөүсе йөрөгән икән, падишаһ уға: "Эй, көтөүсе, мин был ишәкте боғаҙлағансы, минең атымды тотоп тор әле", - тип өндәшкән. Көтөүсе: "Ярай, хуш, була ул", - тип атты тотоп торһа, аттың маңлайында эленеп торған ҡиммәтле гәүһәрҙе күреп ҡалған да, уны йолҡоп алған. Баһрам көтөүсенең урлашҡанын күрә, ләкин "Кешенең ғәйебен күреү - үҙе ғәйеп" тип, көтөүсегә бер нәмә лә әйтмәй, әлеге хәлде күрмәмеш була. Бынан һуң ул атына атлана ла ғәскәре янына бара. Шул саҡ вәзире быныӊ атындағы ҡиммәтле гәүһәрҙең юҡлығын күреп: "Эй, падишаһ, атығыҙҙағы гәүһәр ҡайҙа булды?" - тип һорағас, Баһрам көлөп: "Уны кире бирмәй торған бер әҙәм алды. Әгәр кем дә булһа һеҙҙең берегеҙ ул кешенең ҡулында әлеге гәүһәрҙе күрһә, аслан баҫҡынлыҡ итмәгеҙ!" - тип үҙ һүҙен нығытып әйтеп ҡуйған, ти.

## Ғәҙел булмаҡ

Нәүшируан падишаһ заманында бер кеше үҙенә йорт һатып алған да, уның әсендә күп хазина һәм мәғдән тапҡан, ти. Ул йортто һатҡан кешегә барып: "Эй, фәлән, йортоңдан хазина сыҡты, ни ҡылаһың?" - тигәс, өй һатыусы кеше: "Мин һиңә йортто һаттым, унда хазина барлығын белмәнем. Шулай булғас, хазина ла һиңә инде", - тип яуаплаған. Һатып алыусы: "Юҡ, хазина һиңә тейеш, мин бары йортто ғына алдым", - тип ныҡышҡас, былар араһында низағ сығып, ахырҙа, падишаһҡа барғандар, үҙ дәғүәләрен бәйән иткәндәр. Хөкөмдар Нәүшируан: "Һеҙҙең балаларығыҙ бармы?" - тип һорау ҡуйған. Һатыусы: "Минең улым бар", - тигән. Һатып алыусы: "Минең ҡыҙым бар", - тип яуап ҡайтарған. Падишаһ: "Эй, һеҙ, улай булғас ҡоҙалашығыҙ ҙа ҡуйығыҙ, хазинаны уғылығыҙ менән ҡыҙығыҙға бирерһегеҙ", - тигән. Былар хаким әйткәнсә ҡоҙалашып, хазинаны ул менән ҡыҙға биргәндәр. Дәғүәселәр нисек ғәҙел һәм яҡшы булып, хазинаны үҙҙәренә алмаҫ өсөн талашһалар, падишаһ та шундай уҡ ғәҙел ки: һис бер тарафҡа хәбәр итмәйенсә, үҙ хөкөмөн ҡылған.

**Илшат ЯНБАЕВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

УҢЫШ ҠАҘАН



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Илаһҡа яҡынайыуҙың юлы

Аллаһы Тәғәлә хаҡындағы уйҙарҙан да ыңғайыраҡ фекерҙәр юҡ һәм булыуы ла мөмкин түгел. Ә ыңғай фекерләү өсөн бынан ары артыҡ көс түгергә кәрәкмәй. Донъя халҡының яртыһы бығаға өлгәшеүҙең ҡыҙыҡлы һәм һөҙөмтәле ысулын белә. Ул ошо мәлдәге уйҙарҙы енергә мөмкинлек бирә.

Әгәр һеҙ уҡып ултырған китабығыҙҙы ситкә алып ҡуйып, оло һөйөү менән Аллаһы Тәғәлә хаҡында уйлай башлаһағыҙ, илаһи ярҙам киләсәк өлкә менән бәйләнешегеҙҙе нығытырһығыҙ. Әммә бында бер ауырлыҡ бар. Телефон шылтырауы, ишек шаҡыуҙары, бала илауы, сәй ҡайнауы, сәғәтегеҙгә ҡарап, ҡайҙалыр ашығыу бәйләнеште өҙөүе ихтимал.

Ер шары халҡының яртыһы һәр ваҡыт, көн оҙонона, Илаһтың исемен ҡабатлауҙы ғәҙәткә индерергә тырыша. Индустар "Рама, Рама, Рама", тип ҡабатлаһа, мосолмандар "Аллаһ, Аллаһ, Аллаһ", ти.

Беҙҙең буталып бөткән был донъяла ошо өлгөгә эйәреү мөмкин дә түгел. Хоҙай исемен ҡабатлау хәҙер ниндәйҙер кимәлдә әрләшеү кеүек: "Аллаһ хаҡына, туҡта!", "Хоҙайым, ҡот осҡос!", "Эй Аллам, күңелһеҙ!", "Эй, Хоҙайым, был ҡасан ғына бөтәр икән!". Рустар ҙа "Иисусе Христе, да когда же ты успокоишься?" һ.б. тип ҡабатларға ярата.

"Аллаһ" һүҙен мейе компьютерына һалып ҡуйырға мөмкин. Шулай уҡ уны эш көнө дауамында күп тапҡырҙар ҡабатлауҙы ла программалаштырырға була. Бының өсөн инструкцияны ике йәки өс тапҡыр уҡығыҙ.

"Аллаһ" һүҙен мейе компьютерығыҙға индереү ысулы:

- Уңайлы итеп ултырығыҙ, күҙҙәрегеҙҙе йомоғоҙ һәм өс тапҡыр тәрән итеп тын алығыҙ.
- Өс тапҡыр уйығыҙҙа ғына: "Аллаһ һүҙе минең өсөн Илаһты аңлата", - тип ҡабатлағыҙ.
- Артабан ҡабат уйығыҙҙа ғына: "Мин көн һайын Аллаһ һүҙен күп тапҡыр ҡабатларға теләйем һәм шулай эшләйәсәкмен дә", - тиегеҙ.
- Уйығыҙҙа ғына: "Һәр ваҡыт, был исемде иҫемә төшөргән һайын, мин уның Илаһ булыуын иҫләйәсәкмен", - тип өҫтәгеҙ.
- Күҙҙәрегеҙҙе асығыҙ һәм үҙ алдығыҙға "Мин үҙ аңымда", тип әйтегеҙ.
- Әгәр был ысулды яҡшы үҙләштереүегеҙгә ышанһағыҙ, уны яҙыуға ҡарамай ғына ҡабатлағыҙ.

Ыңғай йәки кире уй даими көсәргәнеш талап итә. Аңдың программалашыуын көндәлек ғәҙәттәр раҫлай. Беҙ даими ҡабатланған берәй ҡүҙғытыусы нәмәгә йәки ваҡиғаға бер төрлө мөнәсәбәттәбеҙ. Ғәҙәттәр - психика һәм аң программалаштырыуының һөҙөмтәһе.

Гольф уйнаусының тубы сәкәнгә яңылыш эләкһә, ул һәр ваҡыт яңылыш һуғыу ғәҙәтен ала. Баҫып торошо һәм сәкән тотоуы уны яңылыш һуғыуға программалай. Кесе һеңлеләре кейәүгә сыҡҡан ҡыҙ үҙен ҡарт ҡыҙ булып ҡалыуға программалай. Эшҡыуарлыҡҡа тотонған кеше һәр ваҡыт уңышһыҙлыҡ кисерә. Ни өсөн? Сөнки улар үҙҙәрен шулай программалаған. Был программаны икенсеһенә алыштырмай тороп, уңыш ҡаҙаныу мөмкин түгел.

Үҙеңде үҙгәртеү буйынса махсус алымдар бар. Мәҫәлән, үҙеңде уңышлы кешеләр менән бергә күҙаллау, үҙеңдең тәртибеңдә, һөйләшеүеңдә, уйҙарыңды уларға оҡшатырға тырышыу уңыш килтерә. Арҡаң турамы? Аҙымдарың еңеүсенекеме әллә еңелеүсенекеме? Йөҙөң ҡырыҫмы әллә асыҡмы? Арҡаңды тура тот, атлап йөрөгән еңеүселәрҙеке һымаҡ булһын, йөҙөңдән йылмайыу китмәһен. Күптән түгел психологтар кеше йылмайған ваҡытта уның эске донъяһында шуға торошло үҙгәрештәр барыуын раҫлаған. Эске тормошобоҙҙо үҙгәртеп, беҙ тирәяғыбыҙҙағы тормошто ла үҙгәртә алабыҙ. Кешеләр йылмайғандарға нығыраҡ тартыла. Тикшереп ҡарағыҙ!

**Роберт СТОУН.**
**(Дауамы бар).**



## 22 НОЯБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55, 16.00, 2.20, 3.10 Т/с "Тайны следствия-20". [16+]
17.15 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.20, 22.30 Т/с "Стенограмма судьбы". [16+]
23.35 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.05 Т/с "Личное дело". [16+]
4.55 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Ай ҡыҙы". [12+]**
**11.00 Итоги недели (на рус. яз).**
**11.45 Специальный репортаж. [12+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Бай". [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Әлләсе... [12+]**
**16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 Ради добра. [12+]**
**17.45, 20.45 История одного села. [12+]**
**18.00 "Пофутболим?" [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**21.00 "Отцы". [6+]**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 Күстәнәс. [12+]**
**23.30 Топ 5 клипов. [12+]**
**0.00 Х/ф "Воры в законе". [16+]**
**3.00 Спектакль "Плачу вперед!". [12+]**

## 23 НОЯБРЯ ВТОРНИК

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55, 16.00, 2.20, 3.10 Т/с "Тайны следствия-20". [16+]
17.15 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.20, 22.30 Т/с "Стенограмма судьбы". [16+]
23.35 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.05 Т/с "Личное дело". [16+]
4.55 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Ай ҡыҙы". [12+]**
**11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Хазина". [6+]**
**15.00 Брифинг Министерства здравоохранения РБ по коронавирусу.**
**15.30, 18.15 Интервью. [12+]**
**15.45 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 "Дорога к храму". [0+]**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**18.45 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Торпедо" (Нижний Новгород). КХЛ.**
**22.00 Теге өсәү! [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Х/ф "В кольце времени". [16+]**
**2.45 Спектакль "Ночь, как вся жизнь". [12+]**
**4.30 Үткән ғүмер. [12+]**
**5.00 "Хазина". [12+]**

## 24 НОЯБРЯ СРЕДА

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55, 16.00, 2.20, 3.10 Т/с "Тайны следствия-20". [16+]
17.15 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.20, 22.30 Т/с "Стенограмма судьбы". [16+]
23.35 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.05 Т/с "Личное дело". [16+]
4.55 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Ай ҡыҙы". [12+]**
**11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 2.30 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30, 5.00 Тормош. [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 "Апчхи". [0+]**
**15.30 "Сулпылар". [6+]**
**15.45 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 Тайм-аут. [12+]**
**18.00 Дорожный патруль. [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 "Честно говоря". [12+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Байыҡ-2021". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**0.00 Х/ф "Дело Коллини". [16+]**
3.15 "Суд матери". [12+]

## 25 НОЯБРЯ ЧЕТВЕРГ

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55, 16.00, 2.20, 3.10 Т/с "Тайны следствия-20". [16+]
17.15 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Стенограмма судьбы".[16+]
23.35 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.05 Т/с "Личное дело". [16+]
4.55 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Ай ҡыҙы". [12+]**
**11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15 "Честно говоря". [12+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 2.45 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 Теге өсәү! [12+]**
**15.00, 18.15 Интервью. [12+]**
**15.15 Бирешмә. Профи. [6+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**18.45 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Витязь" /Московская область/. КХЛ.**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 "Ете егет". [12+]**
**23.45 История одного села. [12+]**
**0.00 Х/ф "Счастливый Лазарь". [16+]**
**3.30 Спектакль "Кавардак Forever". [12+]**

## 26 НОЯБРЯ ПЯТНИЦА

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55, 16.00 Т/с "Тайны следствия-20". [16+]
17.15 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.00 Юморина-2021. [16+]
23.00 Веселья час. [16+]
0.45 Х/ф "Шанс". [12+]
4.05 Т/с "Личное дело". [16+]
4.54 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Д/ф "Путешествие в ледниковый период". [12+]**
**11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15, 21.00 "Йома". [0+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**12.30 Үткән ғүмер. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30 "Автограф". [12+]**
**14.30 Башҡорттар. [6+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 "Аль-Фатиха". [12+]**
**18.00 Дорожный патруль. [16+]**
**19.00 "Башҡорт йыры-2021". [12+]**
**19.45, 20.45, 4.00 История одного села. [12+]**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**22.00 "ВасСәләм!" [12+]**
**23.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**23.30 Автограф. [12+]**
**0.00 Х/ф "Мои африканские приключения". [12+]**
**2.00 "Моя семья". [12+]**
**4.15 Әлләсе... [12+]**
**5.00 "Бай". [12+]**
**5.30 "Млечный путь". [12+]**

## 27 НОЯБРЯ СУББОТА

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.35 По секрету всему свету.
9.00 Формула еды. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.15 Юмор! Юмор!! Юмор!!! [16+]
13.45 Т/с "Большие надежды". [12+]
18.00 Привет, Андрей! [12+]
20.00 Вести в субботу.
21.00 Х/ф "Запоздалая месть". [12+]
1.10 Х/ф "Брачные игры". [12+]
4.25 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 17.30 Новости (на баш. яз).**
**8.15 "Аль-Фатиха". [12+]**
**8.45 "Ете егет". [12+]**
**9.30 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**10.00 Преград. Net. [6+]**
**10.15 "Этно-краса". [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "Книга сказок". [0+]**
**11.00 "Сыйырсыҡ". [0+]**
**11.15 Бишек. Колыбельные моего народа. [0+]**
**11.30 Детей много не бывает. [6+]**
**12.00 Күстәнәс. [12+]**
**12.30 Үткән ғүмер. [12+]**
**13.00 Автограф. [12+]**
**13.30 Башҡорттар. [6+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Д/ф "Дон Кихот. История одной оперы". [12+]**
**18.00 Командный Чемпионат Европы по дзюдо.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.30 "Байыҡ-2021". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**22.30, 1.30 Новости недели (на баш. яз).**
**23.15 "Башҡорт йыры-2021". [12+]**
**0.00, 4.15 Х/ф "Все включено. Каникулы в Греции". [12+]**
**2.15 "Подарок". [12+]**
**3.30 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**5.45 "Млечный путь". [12+]**

## 28 НОЯБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ

### РОССИЯ 1

5.20, 2.25 Х/ф "Ой, мамочки...." [12+]
7.15 Устами младенца.
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Когда все дома с Тимуром Кизяковым.
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00 Большая переделка.
12.00 Парад юмора. [16+]
13.45 Т/с "Большие надежды". [12+]
18.40 Всероссийский открытый телевизионный конкурс юных талантов "Синяя Птица".
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
1.30 Д/ф "Выход из карантина. Уругвай, Парагвай и другие". [12+]
4.14 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 "Бай". [12+]**
**9.15 "Ҡурай даны". [6+]**
**9.30 Тормош. [12+]**
**10.00 "Бейе". [0+]**
**10.15 "Сулпылар". [0+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**11.00 "Елкән". [6+]**
**11.30 Преград. Net. [6+]**
**11.50 Хоккей. "Амур" (Хабаровск) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.**
**14.30 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 "Дорога к храму". [0+]**
**16.30 Историческая среда. [12+]**
**17.00 Вестник "Газпромтрансгаз Уфа". [12+]**
**17.15 "Красивым, любимым, родным". Концерт, посвященный Дню матери. [12+]**
**18.30 Д/ф "Атай ҡыҙы". [6+]**
**19.15 "Байыҡ-2021". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**20.15 Вопрос + Ответ = Портрет. [12+]**
**21.00, 22.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**21.30 Новости недели (на рус.яз).**
**22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**23.00 "ВасСәләм!" [12+]**
**23.30, 4.30 Х/ф "Работодатель". [16+]**
**1.15 Спектакль "Шестая жена И. Грозного". [12+]**
**3.45 "Млечный путь". [12+]**
**6.00 Итоги недели (на рус. яз). [0+]**

## ИҒЛАН

Зачетную книжку №Л20634 на имя Сохибзод Саидназар, студента Лечебного факультета БГМУ, в связи с утерей считать недействительным.


**25 ноября (четверг) в 9.00**
**В ЦЕНТРЕ ЗАНЯТОСТИ**
**(г. Уфа, бульвар Ибрагимова, 47/1)**

**проводится собеседование с желающими работать в охране**
(охрана заводов "КамАЗ" в городе Набережные Челны).

✔ Статус предприятия государственный, графики работы по выбору работника:
- две недели (по 12 часов) через две;
- три недели через одну;
- месяц через месяц.

✔ Проживание в гостинице, затраты на дорогу оплачивает предприятие.

✔ Заработная плата до 52 000 рублей (на руки) в месяц. Работник обеспечивается форменной одеждой, обувью (по сезону), предоставляется ежегодный отпуск 28 календарных суток, возвращается 50% стоимости затрат на путевку в санаторий.

**Приглашаются мужчины, женщины, в том числе пенсионного возраста. Наличие удостоверения охранника необязательно.**

**Справки по телефонам: 8-9274816403, 8-9179166740.**


## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**23 ноябрь "Гөлбостан"** (Ҡ. Даян, Д. Йосопов). 12+
**24 ноябрь "Урал батыр"** (Башҡорт халыҡ эпосы буйынса), ҡобайыр. 12+
**25 ноябрь "Урал батыр"** (Башҡорт халыҡ эпосы буйынса), ҡобайыр. 12+
**26 ноябрь "Ҡыҙ урлау"** (М. Кәрим), комедия. 12+
**27 ноябрь "Йүгер, Харис, йүгер..."** (Э. Йәһүҙин), комедия. 18.00 16+
**28 ноябрь "Мин - Марат"** (У. Ғәлиев), провинциаль проза. 18.00 16+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**27 ноябрь "Аҡ яулыҡлы тирәккәйем"** (С. Айытматов), драма. 18.00 16+
**28 ноябрь "Айболит и Бармалей"** (К. Чуковский), мюзикл. 12.00 0+
**"Үәт, исмаһам, ахырызаман!"** (М. Багаев), комедия. 18.00 16+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**25 ноябрь "Любовное приключение"** (В. Аношкин). 18+
**27 ноябрь Премьера! "Знаменитый Незнайка"** (С. Чураева). 11.00, 13.00 0+
**"Гадкий утенок"** (Г.-Х. Андерсен). 16.00 0+
**28 ноябрь Премьера! "Знаменитый Незнайка"** (С. Чураева). 11.00, 13.00 0+
**"Гадкий утенок"** (Г.-Х. Андерсен), башҡортса. 16.00 0+

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**23 ноябрь** Урал дәүләт рус оркестры (Екатеринбург). 6+
**24 ноябрь "Өфө буйлап сәйәхәт",** ғаилә өсөн концерт. 14.00 0+
**26 ноябрь "Песенный круиз"**, концерт. 6+
**"Донъя халыҡтары көйҙәре һәм йырҙары"**, концерт. 6+
**27 ноябрь "Романса трепетные звуки"** (В. Әйүпова). 18.00 6+
**28 ноябрь "Soundtrack для всей семьи"**. 15.00 0+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**24 ноябрь "Метель"** (С. Пушкин, Г. Свиридов). 6+
**25 ноябрь "Ашҡаҙар"** башҡорт эстрада-фольклор төркөмө концерты. 6+
**26 ноябрь "Минең ҡатынымдың исеме Морис"** (Р. Шарт), комедия. 12+
**27 ноябрь "Нисек кейәүгә сығырға?"** (Н. Ғәйетбай), комедия. 18.00 12+
**28 ноябрь "Пусть всегда будет мама!"** Әсәйҙәр көнөнә. 12.00 0+

### Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**24-25 ноябрь Премьера! "Һырғалаҡ"** (А. Жидковский), балалар баҡсаһынан күренештәр. 16+
**26 ноябрь "Всем кого касается"** (Д. Сидерос). 12+
**27 ноябрь "Веселый эльф"** (В. Илохов), әкиәт. 13.00 0+
**28 ноябрь "Әсәйҙәрҙең изге йөрәге"**, хисле-моңло тамаша. 12+

### А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**22 ноябрҙә "Тере тупраҡ"** (И. Дилмөхәмәтов), халыҡ драмаһы менән Түбәнге Кама театры сәхнәһендә. 12+
**23 ноябрь "Тере тупраҡ"** (И. Дилмөхәмәтов), халыҡ драмаһы менән Туймазы ҡалаһында. 12+

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

**1443 һижри йыл.**

| Ноябрь - (Рабиғел ахыр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалка | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 22 (17) дүшәмбе | 7:32 | 9:02 | 13:30 | 15:31 | 17:01 | 18:31 |
| 23 (18) шишәмбе | 7:34 | 9:04 | 13:30 | 15:29 | 16:59 | 18:29 |
| 24 (19) шаршамбы | 7:36 | 9:06 | 13:30 | 15:28 | 16:58 | 18:28 |
| 25 (20) кесе йома | 7:37 | 9:07 | 13:30 | 15:27 | 16:57 | 18:27 |
| 26 (21) йома | 7:39 | 9:09 | 13:30 | 15:26 | 16:56 | 18:26 |
| 27 (22) шәмбе | 7:41 | 9:11 | 13:30 | 15:25 | 16:55 | 18:25 |
| 28 (23) йәкшәмбе | 7:43 | 9:13 | 13:30 | 15:24 | 16:54 | 18:24 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*БАШҠОРТ ТАРИХЫ ЙЫЛЫ*

# ЙӨРӘГЕНДӘ...

## башҡортлоҡ йөрөтөүселәр улар

**Ҡасандыр Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаев үҙенең бер шиғырында шулай тип яҙғайны. Уҙған аҙнала үткән "Арҙаҡлы рәсәйҙәр - ғәйнә башҡорттары" тип аталған онлайн-түңәрәк ҡорҙа был юлдар тағы бер яңғыраны: бары тик унда, Башҡортостан ғәйнә башҡорттарынан башлана, тигән фекер лейтмотив булып ятты. Ә бит тарих төпкөлөнә күҙ һалһаҡ, ғәйнә башҡорттарының шулай тип әйтергә тулы хоҡуғы бар. Әйткәндәр ҡоро һүҙ генә булмаһын өсөн, әйҙәгеҙ, бергәләп тарих төпкөлөнә сәйәхәт ҡылайыҡ...**

Түңәрәк ҡорға йыйылыусыларҙы Башҡортостан Башлығы хакимиәте етәксеһе урынбаҫары Урал Килсенбаев тәбрикләп, Башҡортостан менән Пермь крайын административ сиктәр генә түгел, ә уртаҡ тарих бәйләп тороуын һыҙыҡ өҫтөнә алды, сөнки бында элек-электән илебеҙгә Исмәғил Тасимов, Туҡтамыш Ишбулатов һ.б. күрек данлыҡлы шәхестәрҙе биргән ғәйнә башҡорттары йәшәй. "Башҡа субъекттар менән бер рәттән, Пермь крайында йәшәгән башҡорттар менән хеҙмәттәшлек итеү - һәр саҡ өҫтөнлөклө булып тора. Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбиров белдереүенсә, республиканан ситтә башҡорт телен өйрәнергә теләүселәр булған урындарҙа был йүнәлештә эштәр алып барыла. Пермь крайының Барҙы районы Елпачиха ауылында, мәҫәлән, йәкшәмбе мәктәбе асылды, Башҡорт тарихи-мәҙәни үҙәк эшләй. Һөҙөмтәләр артында урындағы активистарҙың тынғыһыҙ эшмәкәрлеге тора. Рәсил Мөхәмәтйәнов етәкләгән Пермь крайы башҡорттары ҡоролтайы был йәһәттән оҙаҡ йылдар уңышлы эшләй. Уларҙың "Ғәйнәләр: халҡым, телем тарихым" проекты бик күп мәҙәни-мәғрифәтселек сараларын тормошҡа ашырырға ярҙам итте", - тип билдәләне Урал Таһир улы.

Оҙаҡ йылдар ғәйнә башҡорттары тарихын өйрәнгән тарих фәндәре докторы Нәзир Ҡолбахтин үҙгәртеп ҡороуҙар башланғас, уҙған быуаттың 90-сы йылдарында, Пермь крайына Башҡортостандан иң беренсе ҙур делегация барыуы, 1996 йылда үҙенең ошо ырыу башҡорттарына бағышланған монографияһын баҫтырыуы тураһында бәйән итте. "Башҡорт ырыуҙары араһында ғәйнә башҡорттары социаль-иҡтисади йәһәттән иң алдынғы һәм үҫешкәне була. 18-се быуатта уҡ батша чиновниктары уларҙың тау эшмәкәрлеген билдәләй. Башҡорт ерҙәрен Строгановтар һәм башҡалар талай, батша власы ғәйнәләр ерҙәренә күпләп башҡа халыҡтарҙы күсереп ултырта башлағас, алдынғы ҡарашлы ғәйнәләр үҙ ерҙәрен һаҡлап ҡалыуға өлгәшә. Шул осорҙа империя сәнәғәтселәренең 95 процентын ғәйнә башҡорттары - Тасимовтар һәм башҡалар алып тора. Ҡуян ауылынан ғына 25 башҡорт тау сәнәғәте өлкәһендә эшләй. Ян-яҡтан ҡыҫырыҡлауҙар башланғас, ғәйнә сәнәғәтселәре батша власына тау эшселәре исеменән наказ яҙып ебәрә. Граф Чернышев менән башҡорт ерҙәренән мәғдән сығарып ситкә алып китеп һатҡан өсөн Тасимов уның менән 8 йыл дауамында судлаша һәм еңеүгә - 70 мең һум түләтеүгә өлгәшә. Туҡтамыш Ишбулатов - Пугачев полковнигы булараҡ билдәле, дөйөм алғанда 13 ғәйнә башҡорто Пугачев полковнигы дәрәжәһенә лайыҡ була, шуларҙың икеһе - старшина, икеһе - мулла, ҡалғандары ябай халыҡ араһынан".

Тарих фәндәре кандидаты Нурислам Ҡалмантаев: "Башҡортостан Ғәйнә башҡорттарынан башлана", - тип белдерҙе һәм бында ниндәйҙер кимәлдә тарихи хәҡиҡәт тә бар, сөнки 1-се башҡорт кантоны Елпачихала ойоштора, ә ошо кантонда формалаштырылған 20-се башҡорт полкы 1812 йылғы Ватан һуғышында ҡатнаша. Башҡорт дәүләт университеты доценты Искәндәр Сәйетбатталов үҙ сығышында ғәйнәләрҙең тағы бер арҙаҡлы улы тураһында мәғлүмәттәр еткерҙе. Ул - дин белгесе Баһадиршаһ әл-Ғәйнәүи. Тап ул 1759 йылда Ҡаҙанда Ҡөрьәндең етенән бер өлөшөн - Әфтиәкте төрки теленә тәржемә итеп баҫтыра. Китаптың преамбулаһында уның авторы - Ғәйнә еренән Баһадиршаһ ибн-Һөйәрғол тип яҙылған. Барҙа башҡорто. Был китап татар ғалимдары Ҡөрьәндең тәржемә ителеү ваҡытын билдәләгән датанан ете йылға алдараҡ баҫылған булған.

Ғәйнә башҡорттарының башҡа билдәле шәхестәре тураһында һөйләүҙе артабан да дауам итергә мөмкин булыр ине, әммә бөгөн төп маҡсат - һөйләп кенә ҡалыу түгел, ә уларҙың иҫтәлеген мәңгеләштереү. Был йәһәттән Башҡортостан Республикаһы Башлығы гранты ярҙамында эш бер аҙ алға киткән һәм И. Тасимовҡа, Т. Ишбулатовҡа һәйкәлдәр ҡуйылған, шулай уҡ "Олатайҙарҙың алтын китабы" ла үҙ урынын аласаҡ. Уларҙа И. Тасимовтың, Т. Ишбулатовтың, Салауат Юлаев ғәскәрендә булған 8 полковниктың биографияһы, 20-се башҡорт полкының тарихы яҙыласаҡ. Пермь крайы башҡорттары ҡоролтайы рәйесе Рәсил Мөхәмәтйәнов эшләнгән эштәр менән бер рәттән, проблемаларға ла, киләсәктә тормошҡа ашырыласаҡ проекттарға ла туҡталды. Бөгөн иң ҙур проблема - ул башҡорт берҙәйлеген һаҡлап ҡалыу. Был йәһәттән бары тик тарихыңды, тамырҙарыңды белеү генә ярҙам итә ала. Шуға ла ғәйнәләр тарихи хәтерҙе киләсәк быуындарға ла тапшырып ҡалдырырға тырыша: 1812 йылғы Ватан һуғышының 110 йыллығына Ҡуян ауылында 20-се башҡорт полкының иҫтәлеген мәңгеләштереү, Елпачиха ауылына ингән ерҙә ырыу тамғаһын ҡуйыу хыялы менән яна, "Алтын китап" эргәһенә Башҡорт ихатаһын төҙөп ултыртырға планлаштыра.

...Башҡортостан ҡайҙан башлана, тип һораһалар, бөгөн мин уны ғәйнәләрҙән башлана тиер инем, сөнки улар генетика буйынса ла башҡортлоҡто нығыраҡ һаҡлап ҡалған. Ә иртәгә фекерем бер аҙ үҙгәреп, Башҡортостан Ырымбур йәки Силәбе, Һамар йә Һарытау, Ҡурған, Свердловск йә Татарстан башҡорттарынан башлана, тиәсәкмен һәм хаталанмам: Башҡортостан ғәйнә башҡорттары кеүек йөрәгендә һәр саҡ башҡортлоҡто йөрөткән, ерен, рухын, телен, тарихын, мәҙәниәтен һаҡлап ҡалған һинән, минән, беҙҙән башлана. Беҙ төрлө, әммә беҙ бер бөтөн - Башҡортостан беҙҙән башлана!

**Шәрифә САЛАУАТОВА.**

*СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ*

# ФЕСТИВАЛЬ ӨФӨГӘ КИЛДЕ

**"Алтын Битлек" фестивале тәүге тапҡыр Өфөгә килде һәм баш ҡала тамашасыларын спектаклдәр менән әсир итте.**

Баш ҡалала 11 ноябрҙән 18-нә тиклем үткән фестиваль тураһында БР мәҙәниәт министрының беренсе урынбаҫары Наталья Лапшина, "Алтын Битлек" фестивале президенты Игорь Костолевский, Башҡорт опера һәм балет театры директоры Ильмар Әлмөхәмәтов, К.С. Станиславский һәм Вл. Немирович-Данченко исемендәге Музыкаль театрҙың балет труппаһы художество етәксеһе Лоран Илер һәм директоры Андрей Борисов журналистар менән осрашыуҙа һөйләне. Заманында донъяға танылған балет бейеүсеһе Рудольф Нуриев менән бер сәхнәлә эшләгән Лоран Илер остазының тыуған яғын килеп күрә алыуына ҡыуанысын белдерҙе һәм ҡуйыласаҡ тамашалар менән ҡыҫҡаса таныштырып үтте. Фестивалдең тәүге көндәрендә Өфө тамашасылары заман бейеүенең сағыу үрнәктәре менән таныштты. Артабан "П.Н. Фоменко оҫтаханаһы" театры ҡуйған У. Шекспирҙың "Йәйге төндәге төш" спектаклен ҡарай алды.

Билдәле булыуынса, 1993 йылдан алып ойошторолған "Алтын Битлек" Рәсәй Милли театраль премияһы театр сәнғәтенең бөтә төр жанрҙағы спектаклдәре өсөн дә тапшырыла: драма, опера, балет, заманса бейеү, оперетта һәм мюзикл, ҡурсаҡ театры. Һәм илдең төрлө төбәктәренән юғары баһаланған спектаклдәр яҙғыһын Мәскәү сәхнәләрендә ҡуйыла. Ә 2000 йылдан алып фестиваль илдә мәҙәни ҡаршылыҡтарҙы еңеү, заман театр сәнғәтенең иң юғары үрнәктәрен күптәр күрә алһын өсөн "Иң яҡшы спектаклдәр Рәсәй ҡалаларында" тигән программаны бойомға ашыра. Быйыл "Алтын Битлек"тең төбәк программалары Рәсәйҙең 13 ҡалаһында үтте һәм улар иҫәбендә Өфө беренсегә ҡатнаша. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, быға тиклем үк ныҡлы ижади бәйләнештәр урынлашҡан: Башҡорт опера һәм балет театры, М. Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театры спектаклдәре күп тапҡырҙар Премия эксперттары тарафынан юғары баһаланған. Ә 2022 йылда Башҡорт опера һәм балет театрының "Vita Nuova" спектакле фестивалдең 6 номинацияһында конкурста ҡатнашасаҡ.

# БАЛАМ - БӘЛӘММЕ?

**М. Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театры тамашасыларына үҙенсәлекле, ихлас, күңелдәргә үтеп инер һәм бик мөһим "Балам" спектаклен тәҡдим итергә йыйына. Өфөләр уны башлап 2-3 декабрҙә ҡарай аласаҡ.**

"Балам" спектакль-терапия - документаль жанрҙағы әҫәр, уның авторы Виктория Емелева. Был пьеса республиканың Заман драматургияһы һәм режиссура буйынса ижади лаборатория сиктәрендә яҙылған. Ул тамашасыларға аутистик спектры боҙолған балаларҙың ата-әсәләре, был яҙмыш һынауын нисек ҡабул итеүҙәре, үтеүҙәре хаҡында бәйән итә. "Әҫәрҙең жанры атай-әсәйҙәр менән аралашҡан арала үҙенән-үҙе барлыҡҡа килде, мин терапия үткән кеүек тойҙом үҙемде", - ти Виктория Емелева. Әйткәндәй, был проект уның һәм спектаклдең режиссеры Илшат Мөхөтдиновтың ғаилә тарихын да сағылдыра: улар үҙҙәре лә геройҙарының яҙмыштарын уртаҡлашҡан атай-әсәй.

Спектаклде сәхнәләштергән ижади төркөм уның кешелеклелек хаҡында булыуын һыҙыҡ өҫтөнә алды. Төп ролдәрҙе башҡарыусы билдәле актерҙар Гөлнара һәм Алмас Әмировтар әҫәрҙең уйландырыр көсө барлығын, уның замандаштарға бик ваҡытлы әйтелгән һүҙ булыуын һәм һәр кемдең күңелендә ауаздашлыҡ таба алырына ышанысын белдерҙе. Проектты музыкаль яҡтан Эмиль Әмиров биҙәй, рәссамы Альберт Нестеров, ә хореограф Алина Мостаева.

Театрҙың ижади төркөмө тамашасыларын күңел төшөнкөлөгөнә бирелеүҙән һаҡларға, әммә шул уҡ ваҡытта бөгөнгө йәмғиәтебеҙ өсөн бик мөһим мәсьәләләр тураһында уйланырға, бәлки, тормошҡа һәм тирә-йүндәгеләргә ҡараштарын үҙгәртергә, күңелдәрен бушатырға саҡыра.

**Камила ҒӘЛИЕВА.**

К О Т Л А Й Б Ы Ҙ !

## Хөрмәтле Марат Мөхәммәтйән улы!



90 йәшлек юбилейығыҙ айҡанлы ихлас һәм ҡайнар ҡотлау һүҙҙәрен ҡабул итеп алығыҙ! Һеҙ беҙгә белем бүләк иттегеҙ - беҙ һеҙгә мөхәббәт бүләк итәбеҙ! Һеҙ беҙҙе хаталарҙан ҡурсаланығыҙ - Һеҙгә беҙҙең ихтирам! Һеҙ беҙҙе яуызлыҡ ҡылмайынса, көнләшмәйенсә йәшәргә өйрәттегеҙ - Һеҙҙең изгелегегеҙ һәм зирәк аҡылығыҙ алдында баш эйәбеҙ! Һеҙ - беҙҙең Остазыбыҙ, Мөғәллимебеҙ!

Һеҙ 50 йылдан ашыу халыҡ мәғарифы системаһында хеҙмәт иттегеҙ, шуларҙың ике тиҫтә йылында Республика башҡорт лицей-интернатында, 77-се Өфө урта мәктәбендә, Ф.Мостафина исемендәге 20-се Башҡорт ҡала гимназияһында, Р.Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатында һәм Республика башҡорт-төрөк лицейында директор вазифаһын башҡарҙығыҙ. Уҡытыусылыҡ эшмәкәрлеге менән бер рәттән, Һеҙ йәмәғәтселек эшендә лә актив ҡатнаштығыҙ. Белем-тәрбиә эшендәге уңыштарығыҙ өсөн Һеҙ Башҡортостан Республикаһының һәм Рәсәй Федерацияһының халыҡ мәғарифы алдынғыһы исеменә, бер нисә тапҡыр республикабыҙҙың маҡтау грамоталарына лайыҡ булдығыҙ.

Хөрмәтле Марат Мөхәммәтйән улы!

Һеҙҙе, яҡын дуҫыбыҙға әйләнгән һоҡланғыс педагогты, ғүмер байрамығыҙ менән ҡотлайбыҙ! Һеҙгә тағы ла оҙайлы йылдар бәхетле ғүмер, һаулыҡ, тормош энергияһы һәм оптимизм теләйбеҙ! Көндәрегеҙ сағыу, күңелле ваҡиғаларға, уҡыусыларығыҙ рәхмәтенә мөлдөрәмә тулы булһын! Юбилейығыҙ менән!

**1-се һанлы Республика мәктәп-интернатын 1963 йылда тамамлаусы уҡыусыларығыҙ исеменән тәрән ихтирам һәм изге теләктәр менән Миңзәлә Вәлиулла ҡыҙы һәм Ҡадурий Әбдрәхим улы Фазлетдиновтар.**

АФАРИН!

**Үҫеп килгән быуынға дөрөҫ тәрбиә биреү мәсьәләһе хаҡында бәхәстәр килеп тыуһа, аҡыллы баштар үҙҙәре лә аңлап бөтмәгән контент, инновация, мониторинг, алгоритм, кастинг, майҙансыҡ (площадка) һымаҡ һүҙҙәре менән ауыҙҙарында бутҡа бешереп, балалар менән тәжрибәләр үткәреү хаҡында һөйләй башлайҙар. Һөҙөмтәлә былдай башланғыстар хәбәр һөйләүҙән ары китмәй. Нимә тиҙәр әле: буш арбаның ғына дыңғыры ҙур булыусан шул.**

# СӘП! ТЫП! ДӨП! ЗЫҢҠ!



Мостай Кәрим исемендәге Милли йәштәр театрында балалар өсөн ҡуйылған "Арба" спектаклен ҡарағас, тәрбиәнең ябай ғына икәнлеген дә аңланым. Аңлауҙар, спектаклдә күрһәтелгәнсе, ҡулдарҙың "сәп", аяҡтарҙың "тып" иткән, йөрәктәрҙең "дөп"өлдәп тибеүе аша мейемә "зыңҡ" итеп инеп ултырҙы. Барлыҡ мәшһүр әйберҙәр ябай була тигәндәре шулдыр инде, күрәһең.

Спектакль премьераһы 11 ноябрҙә тулы аншлаг менән үтте. Авторҙары - Зөһрә һәм Таңсулпан Бураҡаевалар, ҡуйыусы режиссер - Зиннур Сөләймәнов. Ролдәрҙе Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған артисы, Ш.Бабич исемендәге йәштәр премияһы лауреаты Илгиз Таһиров, актерҙар Рәмзил Сәлмәнов, Шәһит Хамматов, Салауат Юлдашбаев, Зөлхизә Абдуллина, Гөлсәсәк Зарипова, Әбйәлил Үтәбаев, Лилиә Исҡужина, Ләйсән Миңлеғәлиева, Зәриә Моратова башҡара.

Әкиәт геройҙары арбаға тейәлеп, уйнап-шаярып, йырлап-бейеп, кәмит күрһәтеп йөрөгәс, һеҙ уларҙы Бремен музыканттары тип тә уйлап ҡуйырһығыҙ. Улай уйлаһағыҙ, төптө яңылышырһығыҙ. Әкиәт арбаһы тәгәрмәстәре бер үк ваҡытта тарих менән бөгөнгө, әкиәт менән ысынбарлыҡ, мөхәббәт менән нәфрәт, яуызлыҡ менән изгелек, аҡ менән ҡара, батырлыҡ менән ҡурҡаҡлыҡ, Урал менән Шүлгән арауығында ла тәгәрәй. Сәхнә туҡтауһыҙ хәрәкәттә, костюмдарҙың сағыу, ваҡиғаларҙың етеҙ барыуы уны үҙебеҙ йәшәгән заман ритмына тиң итә.

Өс өлөштән торған ваҡиғалар солғанышында әкиәт геройҙары шундай аңлауға килә: унған ҡулдарың, дәртле аяҡтарың, батыр йөрәгең, зирәк аҡылың бар сағында кешегә һис бер ауырлыҡтар ҙа, ҡаршылыҡтар ҙа ҡамасау була алмай. Беҙҙең күп кенә проблемаларыбыҙ, урыҫ әкиәтендәге һымаҡ мейес башында мөғжизә көтөп кенә ултырыу, йә булмаһа, бәхетте, уңышты алтын балыҡтан юратып таптырыу арҡаһында ғына килеп сыға. Ысынлап та, ҡул-аяғы һау, йөрәге дөпөлдәп тибеп торған, аҡылы камил кешегә моңмо ни шатлыҡ толпарҙарына, бәхет арғымаҡтарына атланыуы. Сәхнә әҫәренең тағы ла төпкәрәк һалынған фекере: халҡыбыҙға тарих алдында йөҙ ҡыҙартырға түгел, батырҙарыбыҙҙы иҫкә алыу ҙа, үҙебеҙҙең нимәгә һәләтле булыуыбыҙҙы хәтергә төшөрөү ҙә дейеү-аждаһалар бикләүендә йәшәүселәрҙе үҙ асылына ҡайтара.

Сәхнә әҫәренең исеме "Арба" тип атала. Ул ябай ғына арба түгел, ә Зөһрә менән Таңсулпандың әҫәләре, милләтебеҙ әсәһе Мәрйәм Бураҡаеваның "Арғымаҡ" атына (Аңға, Рухҡа, Ғәмгә, Ырыҫҡа, Моңға, Аҡылға, Ҡотҡа) егелгән. Ниндәйҙер кимәлдә "Арба" "Арғымаҡ"тың дауамы итеп тә ҡабул ителә. Милләтебеҙ йәшәгәндә Арғымаҡҡа егелгән тылсымлы әкиәт арбаһы ауылдарыбыҙ һәм ҡалаларыбыҙ, далаларыбыҙ, урмандарыбыҙ, Уралтауыбыҙ буйлап барасаҡ та барасаҡ.

**Әмир ҒҮМӘРОВ.**

УЙЫНЛЫ-ЫСЫНЛЫ...

# КИЛДЕЛЕ-КИТТЕЛЕ ҺҮҘЛЕК

**Үҙизоляция быға тиклем ниәтләнеп тә, ваҡыт йә форсат табылмаған күп кенә ғәмәлдәремде атҡарырға ярҙам итте. Айырым һүҙҙәрҙең яңғырашынан, төҙөлөшөнән, йә башҡа сифатынан ниндәйҙер мәғәнә йә мәрәкә эҙләү ғәҙәтемә ингән. Тик уларҙы ниндәйҙер бер системаға һалырға быға са ҡул теймәне. Ваҡытында сатирик шағир, мәрхүм дуҫым Буранбай Исҡужин хатта ошо йүнәлештә махсус "Беҙҙеңсә-һеҙҙеңсә һүҙлек" тигән әкәмәт тә төҙөгәйне. Ә мин иһә былдай яҙмаларымды "Уйынлы-ысынлы, килделе-киттеле һүҙлек" тип атаным. Исеменән күренеүенсә, был һүҙҙәргә аңлатмаларҙан логик нигеҙләү эҙләргә кәрәкмәй. Шулай уҡ ҡыҙыҡлы тойолған ҡайһы бер диалект һүҙҙәрен дә килтереп үтәм. Рәхәтләнеп көлһәгеҙ йә һис юғы йылмайып ҡуйһағыҙ, шат булыр инем. Бисмиллаға "А" хәрефенән башлайым.**

## А

**Абрикос** - һутын һығып алһаң, абрисок була.
**Авиапочта** - класта артҡы партала ултырған ҡыҙҙарға осоролған самолет-хат.
**Автобиография** - үҙең яҙған яҙмыш.
**Автобус** - автомуйынсаҡ.
**Автомат** - автоһүгенеү.
**Аҙ** - ике генә хәрефтән торғас, аҙҙыр, күрәһең.
**Аҙғын** - аҙ ғынаға риза булмаусы.
**Аҙыҡ-түлек** - аҙыҡты түләп алырғамы, әллә аҙаҡ түләпме?
**Айбаныу** - ай, Баныу, тип Баныуҙы күреп онотолоу.
**Аккомпанемент** - бер компанияла йөрөүсе мент.
**Актуаль** - аҡ бәҙрәф.
**Акционер** - аҡса инер йәмғиәт.
**Алама** - аномаль.
**Албырғау** - антонимы артбырғау.
**Алгебра** - математика алға бара.
**Алйот** - "ал" һәм "йот"тан яһалған. Түмен дә тәмләмәйенсә йотҡас, алйоттор, күрәһең.
**Алкауник** - бер инәй һөйләне: "Күршеләремдең бер улы врач, бер улы мәктәп лиректоры, өсөнсөһө - балкауник, минең малайҙар өсөһө лә - алкауник..."
**Алмағас** - алмаһын алмағас, өҙөлөп төшкәнсе ултыра инде.
**Амбразура** - үлемһеҙлеккә ишек.
**Амнезия** - аңға зыян.
**Амплитуда** - теге яҡҡа хәрәкәт, был яҡҡаһы - **амплисюда.**
**Анализ** - ана, Лиза китеп бара.
**Ананас** - ул беҙҙе.
**Анра** - тамыры "аң" булғас, ниңә анра икән?
**Апитерапия** - әпәй терапияһы, икмәк ашап дауаланыу.
**Арбалет** - осоп йөрөүсе арба.
**Арифметика** - метиктың арифы.
**Армия** - әрме һәм мин.
**Арыҫлан** - Руслан менән Рөстәмдең ҡартатаһы.
**Асатай** - атаҡлы йыраусы, яҙыусы, хужалыҡ етәксеһе Спартак Ильясов.
**Асыл** - "асылыу"ҙан алынған. Йомоҡ, ябыҡ кешеләр йомол, ябыл буламы икән?
**Аскет** - аҫҡа үлгән эт.
**Аспирант** - ас пираттың анты.
**Асфальт** - иң ҡыҫҡа ғүмерле юл ҡатламы.
**Атлет** - осоп йөрөүсе ат.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**
**(Дауамы бар).**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ЭШЕ БАР КЕШЕЛӘ...

## мең кешенең эше бар

Ҡара ерҙе яманлама, ҡайтып, шунда барырһың; ил-йортоңдо яманлама, ҡарғышына ҡалырһың.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Теләге булмағандарға, йә теләге үтә күп булғандарға - ҡайғы.

**(Ж.-Ж. Руссо).**

Яуызлыҡ һәр саҡ эргәлә йөрөй, изгелекте генә табыу ҡыйын.

**(Илья Шевелев).**

Кешене бер ҡарауҙан һынап булмай. Уның дәрәжәһенең етдилеккә төрөнгән булыуы, етешһеҙлектәре икейөҙлөлөк битлеге аҫтында булыуы бик ихтимал.

**(Ж. Лабрюйер).**

Кешенең ниндәйҙер сифатына баһа биреү өсөн... үҙең дә ошондай сифаттарға эйә булыу кәрәк.

**(В. Шекспир).**

Ҡатын-ҡыҙҙың матур булыуы өсөн - бары бер генә, ә һөйкөмлө булыуы өсөн мең төрлө мөмкинлеге бар.

**(Ш. Монтескье).**

Бары тик матур булыу менән генә сикләнгән ҡатын-ҡыҙҙың тормошо... заяға үткән.

**(Б. Фонтенель).**

Үҙ ихтыярыңдан тыш риза булыуға ҡарағанда, үтенесте әҙәпле генә кире ҡағыу яҡшыраҡ.

**(Тәлғәт Абдрахманов).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Ир менән ҡатын 30 йыл бергә йәшәгән. Ошо юбилейҙы билдәләргә булғандар былар һәм ҡатын, ғәҙәттәгесә, аҡ күмәс бешергән. Күмәсте мейестән алғас, уны, ғәҙәттәгесә, арҡырыға урталай бүлгән, ике өлөшөнә лә май яҡҡан. Ғәҙәттәгесә, күмәстең аҫҡы өлөшөн үҙенә ҡалдырып, өҫкө яғын иренә һонған да... ҡулын тиҙерәк кире тартып алған: "30 йыл буйына һәр иртә күмәс бешерәм, уның өҫкө яғын бер генә тапҡыр булһа ла үҙем ашап ҡарау тураһында 30 йыл хыялландым. Ошо йылдар буйына иремә өлгөлө ҡатын булдым, бынамын тигән балалар үҫтерҙем, ғаиләмде аяҡҡа баҫтырыу өсөн күпме көс һәм энергиямды һалдым..." - тип уйлаған ул. Һәм бер ҡарарға килеп, 30 йыл буйы килгән ғаилә традицияһын боҙған: ҡулдары ҡалтырай-ҡалтырай, иренә аҡ күмәстең аҫҡы өлөшөн биргән, үҙенә өҫкөһөн ҡалдырған. Ә ире күмәсте алған да, йөҙө яҡтырып, былай тигән: "Һин, һөйөклөм, беҙҙең юбилей көнөндә шундай ҡиммәтле бүләк эшләнең миңә. Мин 30 йыл буйы күмәстең үҙем ятраҡан аҫҡы өлөшөн ашауҙан мәхрүм булып йәшәнем, уға бары тик һин генә хоҡуҡлы тип иҫәпләнем..."**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

1 582218 911006 21047

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
БР «Республика Башкортостан» нәшриәт йорто ДУП филиалы - «Башҡортостан» республика нәшриәтендә баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99, 246-03-24
**Матбуғат таратыу** 246-03-23

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
19 ноябрь 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3250
Заказ - 1399